Самат Ғәбиҙуллин

# Шаңдаҡ



Самат Ғәбиҙуллин

# Шаждак

Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте

ӨФӨ · 2009

УДК 821.512.141-1
ББК 84-5 (2 Рос=Баш)
F 68

Төҙөүсеһе З. З. Вәлитов

**Самат Ғәбиҙуллин**
F 68 Шаңдаҡ: шиғырҙар, поэма-баллада, иҫтәлектәр, бағышлауҙар. – Өфө: Китап, 2009. – 240 бит.

ISBN 978-5-295-04830-2

Билдәле башҡорт шағиры С. Ғәбиҙуллиндың был китабына ғүмеренең һуңғы йылдарында ижад ителгән шиғырҙары тупланды. Әҙип замандаштарын тарихыбыҙға тоғро булырға, рухи тамырҙарҙы онотмаҫҡа өндәй.

Йыйынтыҡта шулай уҡ элегерәк яҙылған, әммә әһәмиәтен юғалтмаған әҫәрҙәр ҙә урын алған.

**УДК 821.512.141-1**
**ТП–208/09** **ББК 84-5 (2 Рос=Баш)**

**ISBN 978-5-295-04830-2** © Вәлитов З. З., төҙөү, 2009
© Ғәбиҙуллин Б. С., Мөхәмәтова Ф. Ә.

# *Тыуған ерем — төйәгем*

## Кешеләрем!

Аҡыллы һүҙ һеҙгә һөйләй алмам —
Ул аҡылды һеҙҙән йыяһы бар.
Тыя алмам хилаф аҙымдарҙан —
Үҙ-үҙемде әле тыяһы бар.
Ниҙәр ҡылып, ниҙәр кисерһәм дә,
Һеҙҙең менән булдым, булырмын гел,
Кешеләрем!
Һеҙҙең менән генә
Юлдарымда уңдым, уңырмын гел.
Һеҙҙән алда бара алмам, ахыры,
Барһам икән артта ҡалмай ғына.
Үтһәм икән юлдың осонаса
Ауырлыҡтар һеҙгә һалмай ғына.

*1990*

## Ҡас ышыҡтан, сыҡ асыҡҡа

Төн.
Яланда усаҡ яна
Тандыр ғына, баҙлап ҡына.

Ел салғыйын елпеп үтһә,
Дөрләп, гөлтләп ут ҡабына,
Һәм тирә-яҡ балҡып китә,
Шаңдаҡ* китә йыраҡ-йыраҡ.
Юлаусылар өмөт бағлап,
Тура килә утҡа ҡарап.
Булһа утың ышыҡ ерҙә,
Ел уға йән өрә алмай.
Көйрәй-көйрәй үҙ көйөнә,
Һүнә усаҡ, күп тә янмай.
Эй, йөрәгем — янған усаҡ,
Ҡас ышыҡтан, сыҡ асыҡҡа.
Елпеп торһон заман еле,
Һәм шаңдаҡ бир тирә-яҡҡа.

*1966*

## Бөрйән ырыуы йыйынына

Мәсем тауҙан, Баҙал һәм дә Юрматауҙан,
Ағиҙелдән, Үҙән һыуҙан һәм Нөгөштән,
Атай-олатай төйәк иткән
Шүлгәнташтан
Сәләм һеҙгә, ырыуҙаштар —
ҡан-ҡәрҙәштәр!
Гүзәллеккә тиңе булмаç шул яҡтарҙан
Килдек бына, йән тартмаһа, ҡан тарта, тип.
Һәр эштә лә арҡа терәр дуçтар кәрәк —
Осрашҡандан, күрешкәндән дуç арта, тип.

---

*Шаңдаҡ — *алыçта сағылған яҡтылыҡ.*

Хандар, бейҙәр заманынан бөгөнгәсә
Йәбер-золом аҙ күрмәне беҙҙең ерҙәр.
Халҡым, телем, ер-һыуым, тип, ут йотоп,
Башын һалды аҫыл-аҫыл күпме ирҙәр.
Үҙен үҙе хөрмәт иткән бар милләттәр
Уянғанда, тиңлек даулап ҡуҙғалғанда,
Йоҡлап ҡалһаҡ, уның һуңы бөтөү булыр —
Һандуғаслы талыбыҙға ҡоҙғон ҡуныр.
Кәңәшле эш — тарҡалмаҫ, ти боронғолар —
Кәңәшләшеп алайыҡсы, дуҫ-туғандар!

*1996*

## Берҙәм баҫһаҡ...

Көнө етеп, йәнгенәһен ҡулға алып,
Тулғаҡ көтөп йөрөгән әсәләрҙәй,
Сатнап япраҡ ярғанғаса
йөҙ ҡат үлеп,
Йөҙ терелә булыр яҙғы бөрөләр ҙә.
Көндөҙҙәрен ҡояш һөйөп иркәләһә,
Төндәрендә ҡаты ҡырау ҡороштора.
Ҡыя һибеп үтә эре, һалҡын ямғыр,
Күҙ астырмай яуа ҡай саҡ ырашҡылар.
Еңел генә түгел япраҡ яралыуы,
Ә бит әле гөрләп сәскә атаһы бар.
Емеш-еләк, йәшелсәне өтмәк булып,
Көнө-төнө мең-мең афәттәр һағалар.
...Халҡым, һинең өмөттәрең, ниәттәрең
Ҡалай оҡшаш ошо яҙғы бөрөләргә:
Афәттәргә бирешмәйсә,
көнгә ҡарап,

Күҙ асырға тейеш һин дә,
үргенләргә.
Айырма тик шунда бары: бөрөләр бит
Тәбиғәттең мәңге ҡырыҫ ҡосағында.
Ә халҡымдың ғәййәр ҡыҙ һәм уландары
Һүндермәйсә ут дөрләтә усағында.
Ирек, тиңлек даулар өсөн, сыға йәштәр
Ата-баба ғүмер баҡый ҡыуған юлға.
Аҙымдарҙы тиңләп,
барлап сафыбыҙҙы,
Бергә-бергә, тотоношоп ҡулды-ҡулға,
Берҙәм баҫһаҡ, ҡеүәтләп бер-беребеҙҙе,
Талатмабыҙ сит-яттарҙан еребеҙҙе.
Алға ҡуйған маҡсаттарға ирешербеҙ,
Хурлатмабыҙ бер кемдән дә телебеҙҙе.

*1996*

## Илгә иткән изгелектәр...

Хоҙайҙың көндәре, бәлки,
Тары бөртөгөнән күптер.
Беҙҙеке генә һанаулы —
Һә тигәнсе үтер-китер.
Ҡуй, һанамайыҡ көндәрҙе,
Беләйек тик дуҫ-дошманды.
Көсөбөҙҙән килгән ҡәҙәр
Үтәйек выждан ҡушҡанды.
Фәрештәләр бизмәнендә
Ауырыраҡ тартыр бер яҡ:
Илгә иткән изгелектәр
Үҙебеҙгә ҡайтыр бер саҡ.

*1993*

## Юҡ, үҙгәртеп булманы әле

* * *

Райпо, ОРС тирәһе
Шикле урын электән.
Килгән затлы әйберҙе
Тапманыҡ беҙ кибеттән.
Осто аҫтан, осто өҫтән,
Осто түрә-ҡараға.
Дуҫ-иш, туған күпме алған —
Унытын кем һанаған.

* * *

Аяҡ аҫты ҡар ине,
Иркен донъя тар ине.
Сигәреткә илле тинде
Күп күргән саҡ бар ине.
Әмериктән сигәрет килгәс,
Байып киттек бит ҡалай:
Ун ике һум алтмыш тинде
Йәлләмәйбеҙ бит, малай!

* * *

Үҙгәртеп ҡорабыҙ, тинек,
Бар йәмғиәт тормошон.
Юҡ, үҙгәртеп булманы әле,
Һаман да беҙ — ҡыутомшоҡ.

* * *

Ҡара тонда яҙғанһың, тип
Ғәйепләмә, ҡуйсәле.
Ҡараны аҡ итеп күрер
Көнгә етмәнем әле.

*1991*

## Ҡараштар

Мөмкинме икән аңлап бөтөү
Кешенең күҙ ҡараштарын?
Һәр ҡарашын йөпләп тора
Керпектәре һәм ҡаштары.
Иң тәүҙә ул сәңгелдәктән
Сабый күҙе менән баға.
Был ҡараашта һис асыу юҡ,
Тик аптырау бар донъяға.
Төшә, шыуа, атлай башлай,
Күргән бере — сер, яңылыҡ.
Ҡарашына ғәжәпләнеү,
Һоҡланыу ҡала яҙылып.
Ҡурҡыу тигән ғәләмәт тә
Өҫтәлә тап шул осорҙа:
Яп-ямаҡай әйбер күрһә,
«Әсә-әй!» — тип ул һорай ярҙам.
Бала үҫә. Ҡарашында
Сағыла килә тойғолары,
Булмыштары, уй-ниәте
Һәм балалыҡ шуҡлыҡтары.
Үҫмер саҡта күп нәмәне

Кеше күрә, аңлай башлай.
Һөйөнәме, көйөнәме —
Тик бер генә ҡараш ташлай.
Оялыу оҡшай ҡыҙҙарға,
Егеттәргә — тәүәккәллек.
Икеһенә уртаҡ миҙгел —
Елкендереп килә йәшлек.
Егет — ҡыҙға, ҡыҙ егеткә
Наҙлы ҡараш һирпә башлай.
Шул ҡарашты бер тойоуҙан
Йөрәктәр тилерә, шаша.
Ялбарыулы ҡараш була,
Берсә үпкә белдерә ул.
Ҡараштар телде тешләтә,
Берсә ихлас көлдөрә ул.
Бер ҡараш күккә күтәрә,
Терелә́й күмә береһе.
Ҡайһы ҡараштың серҙәрен
Һис сисә алмай йөрөйһөң.
Ҡараштарҙа мутлыҡ була —
Уйнай шайтан балалары.
Бәйләргә лә, өҙөргә лә
Кешеләрҙең араларын
Тик бер генә ҡараш етә.
Ҡараш арбай, ҡараш өтә.
Изгелеккә һыуһағандар
Бер яғымлы ҡараш көтә.
Була шундай ҡараштар ҙа:
Йәлләттәрҙе ҡалтырата,
Ҡулынан ҡылысын төшөртә —
Аяҙ көндә йәшен ата.

Мөмкинме икән аңлап бөтөү
Кешенең күҙ ҡараштарын?
Һәр ҡарашын йөпләп тора
Керпектәре һәм ҡаштары.

*1996*

## Шайтан аҙҙырғандыр шул...

Шайтан шарҡылдап көлә —
Был да беҙҙең көнөбөҙ.
Фәрештәләр өндәшмәй:
«Сыҡмай беҙҙең өнөбөҙ».
Беҙ — аумаҡай бәндәләр —
Ары ла һуғылабыҙ,
Бире лә һуғылабыҙ,
Ожмахҡа инмәксе булһаҡ,
Тамуҡҡа ҡыуылабыҙ.
Бәй, унда ла сират, имеш,
Аптырашта әруахтар:
Алған сауаптар — самалы,
Баштан ашҡан гонаһтар.
Йыуып бөтөрөрлөкмө ни
Беҙ буялған нәжесте*!
Кисәге даһиҙарға ла бит
Шул уҡ нәжес йәбеште.
Шайтанға бирелгән аҡыл
Ниңә беҙҙә юҡ һуң ул?
Булғанын да һатып бөттөк —
Шайтан аҙҙырғандыр шул!

*1993*

*Нәжес — *бысраҡ, әшәке нәмәләр* (*нечистоты*).

## Көнөбөҙ

Ҡараңғыла тайғаҡ юлдан килгәнбеҙ беҙ,
Иң тураһы ошо юл тип белгәнбеҙ беҙ,
Ҡайҙа ҡырын, ҡайһы ере соҡор-саҡыр,
Ҡайҙа үр йә һөҙәк, ҡайһы ере таҡыр —
Аяҡ менән һәрмәп кенә һиҙгәнбеҙ беҙ.
Саҡ-саҡ ҡына яҡтырҙы ла, туҡтап ҡалды,
Саҡ-саҡ ҡына төҫмөрләргә була алды.
Быға тиклем был юлды бит күргән дә юҡ,
Ҡайҙа илтә — аныҡ ҡына белгән дә юҡ.
Һәрмәләнеп килә торғас, аяҡ талды,
Әллә инде таң алды был, әллә эңер?
Шул уҡ юлдан барабыҙ беҙ мөңгөр-мөңгөр,
Кемдер тайып, аумайынса саҡ-саҡ килә.
Ундай мәлдә, әллә инде, Алла белә —
Кемебеҙҙең тел осонда ниндәй һүҙҙер.
Төн дә етмәй, тик ҡояш та ҡалҡмай ялтлап,
Тайҙыра тип, ярты юлда булмай туҡтап.
Оло юлға етәйек, тип, имен-аман,
Ҡайҙа шыуып, ҡайҙа ҡырын-мырын атлап.

*1992*

## Шулмы өнөм?

— Эшкә! — тинем,
ең һыҙғандым,
Тик эшемдән йәм тапманым.

— Яҙам! — тинем,
ҡәләм алдым,
Яҙғанымдан тәм тапманым —
Ниндәй саҡ был?
Илде, ерҙе, имандарҙы
Сепрәк ише бүлешәләр.
Бер ҡараһаң — көлөшәләр,
Бер ҡараһаң — үлешәләр —
Вайран донъя!
Әҙәмдәрҙе көпә-көндөҙ
Албаҫтылар албырғата:
Йөҙ йылмайып хәбәр һөйләй,
Һүҙ артында мәкер ята —
Хайран донъя!
Ҡитғаларҙы дауыл айҡай —
(Ерҙең ямғыр көткән мәле.)
...Күктәр иңләп болот уҙа,
(Тик ул ямғыр килтермәне.)
Ниндәй саҡ был?
Тирә-яғым — һүҙ ҡойоно,
Ә мин тик бер һүҙҙе көттөм —
«Хәлең нисек?» тигән бер һүҙ.
Ихласлыҡҡа сарсап бөттөм —
Шулмы көнөм?
Матур китаптай уҡылған,
Эскерһеҙлектән туҡылған
Төштәремдә эй ҡыуанам!
Уянам да эй уйланам:
Шулмы өнөм?

*1992*

## Ай менән әрепләшеү

Кисә төндә һанһыҙ йондоҙҙарға,
Айға ҡарап-ҡарап торҙом да
(Нимәгәлер йән көйгән саҡ ине),
Ҡарашымды ситкә борҙом да
Әйтеп ҡуйҙым: «Эй, Ай, маҡтансыҡ һин,
Ғашиҡтарға юлдаш, йәнәһе.
Кәрәк саҡта һин юҡ, кәрәкмәҫтә
Арттан ҡалмай йөрөр шәүлә һин!
Ай йылмая, ти ҙә шағир халҡы,
Был да әле беҙгә икеле.
Йылмайғанға һин һис оҡшамайһың,
Йылмаялыр шағир күңеле».
Ә Ай әйтте, йәне көйҙө, ахыры:
— Эй, бисара, Әҙәм балаһы,
Тик үҙеңә кәрәккәнде күреп,
Тик үҙеңә эләккәнде күреп,
Күрмәгәндә бәлә һалаһың.
Ғашиҡмы һеҙ, юҡмы, минең өсөн
Барығыҙ ҙа бер тиң сабыйҙар!
Уйлап ҡара, кем бар арағыҙҙа,
«Ғашиҡмын!» — тип һөрән һалмай ғына,
Мәңге ғашиҡ булып ҡалырҙай,
Хистәр ялҡынында янырҙай?
— Һинме әллә ғашиҡ, йә әйт, кемгә?
— Ергә ғашиҡ, һеҙ ҙә унда бит!
Ғашиҡ булыу — әкиәт һатыу түгел,
Бар ғилләһе уның шунда бит!
Йылмайыуға ҡалһа, гел йылмайып
Торорға мин тиле түгел дә.
Барыһын күреп, янып-көйөп йөрөһәң,
Бик йылмайғың килмәҫ һинең дә.

— Барып күреп ҡайттылар бит инде,
Һалҡын таш һин, туң таш, билләһи!
Шуның менән хистәр тиһең тағы,
Яныу тураһында һөйләйһең.
— Беләм. Килгәйнеләр мәғдән эҙләп,
Йөрөнөләр шунда соҡсоноп.
Йәнәһе лә, тау-тау алтындарҙы
Ҡайтармаҫмы Ай, тип, тотторроп.
Булһа әгәр, һис йәлләмәҫ инем,
Һуң, ҡояштан алған нурҙы ла
Ергә бирәм бит мин, һеҙгә бирәм,
Төнөгөҙ булһын, тимен, нурлыраҡ.
— Һәләк нурлы инде! Әйттем дәһә,
Кәрәк саҡта булмай эҙең дә.
Бөтә үлеш-һуйыш, вәхшилектәр
Төндә була. Ана бөгөн дә
Анау килгән болот араһына
Ҡасырға бит әҙер тораһың.
Төндә Ерҙе нурлы итәм мин, тип,
Кемде ышандырмаҡ булаһың?
— Эй, бисара, Әҙәм! Һин һаман да
Ҡайыраһың тик үҙ яғыңды.
Ергә, һеҙгә изгелек итәм, тип,
Мин нишләргә тейеш тағын да?
Беҙ бит — йыһан есеме, мәңгелектән,
Сикһеҙ йыһан беҙҙең донъябыҙ.
Ер генә ул, һеҙҙең вәхшилекте
Күрһәтмәҫкә, белгертмәҫкә була,
Болотона боҫа оялып.
Анау килгән болот, тиһең инде,
Ул минеке түгел, һеҙҙеке.
Оялыр, ҡаплар нәмәм юҡ минең һис,
Булып китмә артыҡ белдекле.
Кем үлешә, кем һуйыша һуң ул?

Үҙегеҙ бит, эйе, үҙегеҙ.
Нәфсе ҡоло булып, ҡомһоҙланып,
Тонған инде тамам күҙегеҙ.
Миңә килеп донъя ҡормаҡ булып
Хыялланып йөрөгән булдығыҙ.
Һеҙҙең затҡа миндә урын юҡ ул,
Ерегеҙҙә татыу булығыҙ, —
Тине лә Ай, сумды болоттарға,
Мин торҙом да ҡалдым аңшайып.
Йәнем көйҙө: «Бөгөн ҡасһаң да һин,
Иртән тағы сығырһың аҡшайып,
Шунда һөйләшербеҙ...»

*1997*

## Ныҡ әле ул, торһон әле!

— Тегенеһен тегеләйерәк,
Иплэп тотоп, ипләберәк,—
Атай йөрөй кәңәш биреп.
Өй күтәрә уландары,
Күрше-күлән, туғандары
Эштең рәт-сиратын белеп.
Мүк һалыша килендәре,
Йүгереп йөрөй ейәндәре,
Эштәр бара ырам ғына.
Болоң барҙа, дәртең барҙа,
Ағай-эне итһә ярҙам,
Өй һалыу ул байрам ғына.
Өлкән улдар инде күптән
Үҙ донъяһын ҡороп бөткән,
Бынығы була кинйәһенә.

Үҙ сиратын йөрөнө көтөп,
Инде сығармаҡсы төтөн
Үҙенең дә мөрйәһенән.
Иҫке өйҙә әсәй кеше
(Бөтәме ни унын эше):
Самауыры борҡоп ҡайнай,
Оло ҡаҙан аш өлгөртә,
Кемендер һыуға йүгертә,
Барыһын да ҡат-ҡат барлай.
Ишектән эйелеп инеп,
Күрмәгәне, сәләм биреп,
Хәҙер түргә уҙырҙар тип,
Кейеҙҙәрен йәйеп ҡуйған,
Ҡомғанына һыуын ҡойған,
Бит-ҡулдарын сайырҙар, тип.
Ә иҫке өй йылы ғына,
Тәмле аш еҫтәре тулған,
Сыҡҡыларын килмәҫ, инһәң.
Иманлы һүҙ йөрөй алдан,
Ҡот-бәрәкәт хужа бында —
Бирә Алла, бирәм тиһә!
Һуғыштан һуңғы тәнәйҙәр —
Инәй, апай, олпат ирҙәр —
Олатай, өләсәй хәҙер.
Үҙҙәре лә һис бил яҙмай,
Балалары аҙмай-туҙмай,
Килененән күрә ҡәҙер.
Үҫеп еткән бәпкәләр ҙә
Морон төртә, йылы эҙләп,
Инә ҡанаты аҫтына.
Иҫке өй ҙә шулай инде,
Һыйындыра ул һәр кемде,
Йүнле булһаң, ин тартынмай.
Улдары әйтһә лә ҡат-ҡат,

Иҫке өйҙө боҙҙормай ҡарт:
«Ныҡ әле ул, торһон әле!
Мосафирҙар инеп ҡуныр,
Эҙләп килгән дуҫ-иш булыр —
Миңә атын борһон әле!»

* * *

Хәҙер ундай ғаиләләр
Юҡтыр, тимә, күреп беләм:
Бар ул, бар, тик һирәгерәк.
Йәшәй халҡым ҡыйын мәлдә,
Хәүеф-хәтәрҙәр килгәндә
Шуларға бит арҡа терәп.

*1997*

## Ниңә һуңланың һин, кәкүк?

Быйыл да яҙ һуңламаны,
Көндәр ҙә йылы килде.
Ташҡан-шашҡан йылғалар ҙа
Ярына ҡайта инде.
Йәшелләнә бара урман,
Ҡоштар оя йүнәтә.
Тик йәнемә бер моң етмәй,
Зарығып шуны көтәм.
Ниңә һуңланың һин, кәкүк,
Һинһеҙ яҙҙар яҙмы ни?!
Ҡарға ҡарҡылдауы ғына
Ҡолаҡтарға наҙмы ни?!
Ниңә һуңланың һин, кәкүк?

*1991*

## Мәле етер

Кисә генә, кәкүк моңона манып,
Урмандарым япраҡ яңыртты.
Шатлығынан шашып һандуғастар
Хыялыйҙар итте таллыҡты.
Ирәйешеп йәйге хозурлыҡтан,
Бая ғына еләк йыйғайныҡ.
Ваҡыт та тигән арғымаҡтың
Теҙгендәрен ҡулда тойғайныҡ.
...Урман буйлап киләм.
Имәндәрҙән
Сәтләүектәр ҡойола тып та тып —
Ғүмер даулай яңы яралғылар —
Юҡтыр ҡөҙрәт уны туҡтатыр.
Ҡойолһондар, әйҙә, сәтләүектәр,
Төшһөн улар йылы тупраҡҡа.
Мәле етер: кәкүк моңон тыңлап,
Йәш имәндәр төрөнөр япраҡҡа.

*1989*

## Етте, етте!

Алҡын йылғаларҙың ағыр юлын
Кире бормаҡ булып беҙ ҡыялдыҡ.
Ожмах төҙөй һалып,
түренә менеп
Ултырырға бер саҡ хыялландыҡ.
Ай-йондоҙға барып ҡала ҡорҙоҡ —
(Хыялдарҙың кем һуң сигенә еткән?)
Баҡһаң, тыуҙырған да, туйҙырған да
Үҙ еребеҙ — гәзиз тупраҡ икән.
Билғау аҫтың нык булғанда ғына,

Быуын талмай икән юлдарыңда.
«Эшләйем!» тип һүҙ һөйләмә икән,
Эш килмәҫтәй булһа ҡулдарыңдан.
Шуны саҡ-саҡ онотоп ташламаныҡ,
Ярай әле иҫкә килдек бөгөн.
Самалайбыҙ ҡулдан килерлекте,
Иңгә һалған сакта заман йөгөн.
Етте, етте ҡомдан арҡан ишеү,
Эшкә ашырлыҡ булһын хыялыбыҙ!
Яфа күрмәй ыуҙан, ялҡындарҙан
Ыуылйып та ятһын тупрағыбыҙ!

*1990*

## Ҡаршылағыҙ, тауҙар!

Бындай саҡтар һирәк булалыр ул:
Тыуған көндә осам самолетта.
Әйтерһең дә, ҡуй көтөүе инде —
Төйҙәк-төйҙәк кенә аҡ болоттар
Эркелешеп аҫтан, өҫтән елә,
Әйҙәп барам барыһын тауҙарыма.
Ә күңелем — алҡын даръя, гүйә,
Аша инде, аша ярҙарынан.
Сағыу ҡояш нуры теткеләгән
Аҡ болоттар уртаһында барам.
Бөгөн, гүйә, мин бер ҡуй көтөүсе,
Көтөүемде тауҙарыма борам.
Самолетта осам күкте иңләп,
Бар донъяны ҡосам, көн — минеке.
Аҡ болоттар, нурҙар әйҙәп киләм,
Ҡаршылағыҙ, тауҙар, мин — һеҙҙеке!

*1992*

## Баһадирҙар кеүек ҡаялар

Тауҙар...
Ел-дауылдар килеп ябырылһа,
Ҡара болот ҡунһа иңенә,
Болоттарҙан һура тартып алып,
Йәшендәрҙе урап биленә,
Баһадирҙар кеүек алышалар,
Ҡарашынан күктәр күкрәтеп,
Күкрәгендә сәме ҡайнауынан
Айбарланып, ерҙәр тетрәтеп.
...Ғәрәсәттәр тына. Ҡояш балҡый,
Тау һырттары нурға мансыла.
Ҡаяларҙың ялтыр маңлайынан
Тирҙәр тамып тора тамсылап.

## Күҙ йәштәре

Ерҙә ҡасан тулы һиллек булған?
Ҡайһы быуат булған тып-тыныс?
Үткән бөтә һуғыштарҙы хәҙер
Иҫкә алыу ҙа бит ҡурҡыныс.
Һуғыш-һуйыш —
күҙ йәш даръяһы —
Йотҡан күпме яҡты хыялды.
Әллә шуға,
әллә шуға микән
Һыуы тоҙло хатта океандың?

## Шуны уйлап, күңелемә...

Нәфис ауазлы ҡошсоғом —
Лирам, бер аҙ сабыр ит.
Һинең менән хушлашырға
Заманы икенсе бит.
Ғәҙеллек өсөн айҡашҡан
Дауҙар ҙа бар донъяла.
Яр аҫтынан ғына сыҡҡан
Яуҙар ҙа бар донъяла.
Алдап-йолдап шымафыйҙар
Тәхеттәргә үрелә.
Төрлө сүрәттәргә кереп
Тәфтиләүҙәр терелә.
Ҡытлыҡ булмаған, булмаҫ та
Батшаға йә түрәгә.
Шуны уйлап,
                күңелемә
Төшә шомло күләгә.
Аң булырға ҡуша беҙгә
Үткәне һәм бөгөнө,
Ауыр йөктәр күтәргәндә
Төшмәҫ өсөн бөгөлөп.

*1993*

## Бирешмәҫкә, эй, йәшәргә ине

1

Нисәнсе йыл йәнем тетрәп тора
Гәзит, журнал битен асҡан һайын.
Өтөп ала эфир тулҡындары,
Яңы китап тотам бик һағайып.

Нисәнсе йыл мине ботарлайҙар,
Инде нисәнсе ҡат аталарҙыр?!
Ҡанлы йоҙроҡ менән таныталар
Һис булмаған ғәйеп, хаталарҙы.
...Һеҙ кисергән бөтә ғазаптарҙы,
Олуғ заттар, мин дә кисерәм бергә.
Өндәремдә алйып йөрөйөм дә,
Төштәремдә батам ҡара тиргә.

2

Ҡарт тарихтың утыҙ алты йылы*—
Буталышлы, ҡыйралышлы заман!
«Беләбеҙ!» — тип күпме алданғанбыҙ,
Осмотон да белмәгәнбеҙ һаман.
Һәм белмәйбеҙ: күпме саф йөрәктең
Нәжес менән бергә буталғанын,
Бинахаҡҡа йәне ҡыйылғанын,
Йәлләттәргә һәйкәл ҡуйылғанын...

3

Үткәндәрҙе уйлап уйылам да,
Күҙ һаламын тағы бөгөнгөгә.
Тиктомалдан ғына был афәттәр
Ябырылдымы ни бөгөн илгә?
Ил нигеҙен ҡорған, беҙҙе ҡурсыр
Кешеләрҙе ҡырған шул йәлләттәр.
Беҙ күрәсәк ошо бөгөнгөгә

---

*Утыҙ алты йыл — *1917—1953 йылдар күҙ уңында тотола.*

Әҙерләгән нигеҙ бар йәһәттән.
Шаңҡытылған балыҡ хәлендә ил,
Кем шаңҡытты?
Мин дә, һин дә түгел.
«Тегеләр» тибеҙ, анһат ҡотолабыҙ,
Тик «улар» ҙа күҙ алдында бит гел.
«Улар»ҙы ла үҙебеҙ күтәрәбеҙ
(Беҙгә тиклем дә бит шулай булған.
Хуплап-йөплəп торғас һәр бер һүҙен,
Ни теләһә шуны ҡылған),
Һәр бер «Ул»дың әйткән һәр һүҙенә
Ҡул сабабыҙ, ур-ра ҡысҡырабыҙ...
Саҙаҡаға бөгөн ҡул һонабыҙ —
Бына ниндәй бөйөк эш ҡырабыҙ.
Халыҡ — көтөү түгел, ғали, тинек,
Барыһына ла, тинек, тик ул хужа!
Үҙ яҙмышын үҙе ҡора, тинек, —
Ҡорҙоҡ инде бына, күрә Хоҙа!
Беҙ тыумаҫтан элек башланған хәл
Ҡалырмы икән беҙҙән һуң да шулай?
Мейемде гел сүкей ошо һорау,
Йоҡоларым ҡаса, выждан дулай.

4

Эй буталсыҡ заман!
Әрепләшеү
Түргә менеп ултырып алды тағын.
Миҙалдарҙың, гүйә, тағып алдыҡ
Алғы яғын түгел, артҡы яғын.
Аҡ, ҡыҙыл төҫ бөттө беҙҙең өсөн,
Күрәбеҙ тик уның ҡараларын.
Эштә янып түгел, һүҙ ҡуйыртып

Боҙола бит әҙәм аралары.
Сепрәк-сапраҡ өсөн талаш китте:
Кәрәкме ул, юҡмы — ҡаптыралар.
Берәйһенә бер сүп етмәй ҡалһа,
Өҫтәл туҡмап уны таптыралар…

5

Үҙебеҙ күп саҡ һап-һау көйөнә лә
Үтә меҫкен булып ҡыланабыҙ.
Аяҡ аҫтындағы хазинаны
Эйелеп алырға ла йыбанабыҙ.
Беҙ бит ундай заттан түгел инек,
Ҡағылды һуң әле ниндәй зәхмәт?
Ашаттыҡ та, кейендерҙек тә беҙ —
Ярты донъя әйтте, әйтә рәхмәт.
Еребеҙ шул уҡ.
Күктә шул уҡ ҡояш,
Афәттәрме элек булмағандар?
Эшләнәһе эштәр тулып ята,
Аяҡ-ҡулды бәйләп ҡуймағандар.
Нишләнек һуң әле, ватандаштар?
Бер-беребеҙгә ниңә ҡарышабыҙ?
Беткә асыу итеп тун яғабыҙ,
Үжәтлектә һаман ярышабыҙ,
Атайҙар бит беҙҙең ауһа ауған,
Теҙгендәрен ҡулдан ысҡындырмай.
Яу ҡайтара китһә,
әйләнмәгән
Дошмандарын еңеп үс ҡандырмай.
Үҙенән алда дуҫын ҡайғыртҡандар,
Бер-береһенә таймаҫ терәк булған.
Бар иманы булған татыу тормош —

Илдәргә ҡот,
йөҙҙәргә нур ҡунған.
Ҡапылғара баҫыр яу көтөлмәй,
«Ситтәр» менән дуҫлыҡ нығый бара.
Әммә бөгөн уртаҡ өйөбөҙҙә
Ыҙғышабыҙ ниңә беҙ үҙ-ара?
Яман — еңдем, яҡшы — ҡуйҙым, тиер,
Шуны аңлар хәлгә етһәк икән!
Былай ҙа бит юлыбыҙ урғылъянлы —
Икәүләшеп бергә үтһәк икән!
... Бирешмәҫкә, эй, йәшәргә ине
Салт аҡылға ҡушып тапҡырлыҡты.
Һөмһөҙләнмәү, Кеше булып ҡалыу —
Бөгөнгө көн иң ҙур батырлыҡтыр!

*18 август, 1991*

## Тиҙерәк эшкә ҡушһаҡ икән

Шығыр-шығыр, алйы-болйо
Быйыл да ҡыш үтеп бара.
Көләс яҙҙы көтә-көтә,
Түҙемлегем бөтөп бара.
Көн торошо ғынамы ни
Минең йәнде өйкәй бөгөн.
Бөтмәҫ хафа, тынмаҫ шау-шыу
Ҡаплап алды илдең күген.
Өмөттәрем, хыялдарым
Ел-дауылдар араһында,
Капитанһыҙ карап кеүек,
Ҡалды океан уртаһында.
Ә океан ажар бөгөн,
Тулҡындарҙы тулҡын ҡыуа:
Айбарланып бәреләләлә,

Умырып-умырып ярҙы йыуа.
Карап гранит ҡаяларға
Бәрелеп онталмаһын өсөн,
Тиҙерәк эшкә ҡушһаҡ икән
Аҡыл һәм дә беләк көсөн.

*1991*

## Йығылғандар тороп баҫһын

Әллә: «Ба-аҡ!» — ти,
Әллә: «Ҡа-аҡ!» — ти,—
Өйрәк микән, ҡаҙ микән?
Беҙҙең алда йәйрәп ятҡан
Төпһөҙ күлме, һаҙ микән?
Килеп етте
Һәр кемгә лә
Үҙ урынын белер саҡ.
Көн күрәйем, тигәндәргә
Ҡылды урталай телер саҡ,
Барҙың ҡәҙерен белер саҡ.
Етәкселәргә еңелме?
Етте шуны аңлар саҡ,
Булмаҫтайҙы күрә белер,
Булырҙайҙы һанлар саҡ.
Аҡһаҡалдар нимә тигән,
Шуға ҡолаҡ һалһаҡсы:
«Тамаҡ тамуҡҡа төшөрөр» —
Төшмәй имен ҡалһаҡсы!
Үҙ ауына үҙе ҡапһын
Хәйлә ауын ҡорғандар.
Тороп баҫһын йығылғандар,
Йығылмаһын торғандар.

*1992*

## Кисереү юҡ!

Ҡылыс сүкеп Урал ҡоросонан,
Күп халыҡтар менән туғанлашып,
Ҡаның ҡойоп, һөйәктәрең түшәп,
Күп залимдар менән янъяллашып,
Ирек алдың, Башҡортостан!
Тик кемдәрҙер аҙаҡ,
ялбыратып,
Үтмәҫ бысаҡ менән тунағандар.
Араларҙы сиктәр ҡырҡып үткәс,
Аймылышта ҡалған бер туғандар —
Кем әрнемәҫ, Башҡортостан!
Бүлеп ятҡас шул сик аралары,
Һинең күпме гәзиз балаларың
Атайлы ла көйө йәтим һаман, —
Әсәйле лә көйө йәтим һаман —
Ситтә йәшәй, Башҡортостан!
Кем онотһон,
төп йортонда янған,
Йәнгә йылы бирер усаҡтарҙы...
Рухыбыҙҙы, телде ботарлаған
Рәхимһеҙ үтмәҫ бысаҡтарҙы
Кисереү юҡ, Башҡортостан!

*1990, 1992*

## Йән әсетер хәлдәр барҙа...

Сит ерҙә солтан булманым,
Илемдә олтан түгел.
Тик һаман да сәфәрҙәмен,
Юлдан биҙмәне күңел.
Ейәр ризыҡ, эсәр һыуҙар

Йөрөтә, тиҙәр, ирҙәрҙе.
Әммә нәфсе ҡоло булып
Гиҙмәйем мин ерҙәрҙе.
Үҙемдән дә алда йөрөй
Халҡым, телем хәстәре.
Йән әсетер хәлдәр барҙа,
Бөтмәç илдә эштәрем.
Буй етмәçкә үрелмәйем,
Уй-ниәтем бик ябай:
Фекерҙәштәр, дуçтар менән
Бер һөйләшһәм, шул ярай.

*1990*

## Ҡайһығыҙҙан кәңәш һорайым да...

Илгә сығып әйләнәйем әле:
Ҡайҙа ниндәй хәлдәр бар икән?
Мин һағынған, мине һағынып һөйләр
Дуç-иштәрем иçән-һаумы икән?
Һабаҡташтар һәм дә табаҡташтар,
Хеҙмәттәштәр, серҙәш-моңдаштар,
Хыялланған саҡта — хыялдаштар,
Сәфәр сыҡҡан саҡта — юлдаштар,
Гелән бергә булып буламы ни —
Таралдыҡ шул илгә, таралдыҡ.
Бер үк уй-ниәтте атҡарырға
Төрлө тарафтарға юл алдыҡ.
Тиçтерҙәрем ниндәй ир икән дә,
Ниндәй әсә икән дуç ҡыҙҙар?
Халҡым, телем өсөн дау барғанда
Юҡмы арағыҙҙа моңһоҙҙар?
Килен йомшап, йомшаҡ түшәгендә
Ултыралармы икән инәйҙәр?

Тыныс, йылы өйҙә, аҡ биләүҙә
Иҙрәп йоҡлаймы икән тәнәйҙәр?
Яңғыҙ инәйҙәрҙең мөрйәһенән
Иртә һайын төтөн сығамы?
Әллә рәнйетелеп, күҙ йәш түгеп,
Йөрәк майҡайҙары һыҙамы? —
Илгә сығып әйләнәйем әле,
Һорашайым, барып күрәйем.
Ҡайһығыҙҙан кәңәш һорайым да,
Ҡайһығыҙға кәңәш бирәйем —
Илгә сығып әйләнәйем әле...

*1992*

## Тәҙрәләрҙе асып ҡуйям әле...

Әйтәм, көнө-төнө ҡарҡылдайым —
Бүлмәм ҡалай тынсыу булып киткән.
Ни табыла — шуны,
                                ҡасып-боҫоп,
Тарта торғас, еҫе һеңеп бөткән —
Тәҙрәләрҙе асып ҡуйям әле.
Бокалдар ҙа хәҙер йыш сыңламаҫ,
Тормаһындар нәфсе ҡуҙғытып гел,
Алып ҡуйям,
                        төпсөктәрҙе түгәм,
Сафландырып әҙерәк сыҡмаҫмы ел —
Тәҙрәләрҙе асып ҡуйям әле.
...Бер бүлмәлә генә булһасы эш...
Бүлмә түгел, тотош ил бит шулай.
Был мәхшәрҙә мейем ҡайнап бөттө,
Саф һауаға һыуһап йәнем дулай —
Тәҙрәләрҙе асып ҡуйям әле...

*1992*

## Бөгөн булһа уйлап...

Аҡтар, тинек — яман заттар, тинек,
(Туҡынылар шулай бала саҡтан).
Бөйөк идеал өсөн көрәшсегә
Мылтыҡ тоҫҡап торған алдан-арттан.
Имеш, бөтәһе лә батша, баяр
Ялсылары, һаҡсылары булған.
Һәр һалдаты, һәр генералының
Эсе тик боҙоҡлоҡ менән тулған.
Улар изге йәндәр булғандар, тип,
Барыһын да, юҡ-юҡ, аҡламамын.
(Халыҡ күреп торған, тарих белә,
Ҡыҙылдарҙың кеме булмағанын.)
Ә шулай ҙа, әсәһенә тиңләп,
Аҡ батшаны түгел, үҙ Ватанын,
Шуны ҡурсыр өсөн бик күптәрҙең
Йән аямай сая алышҡанын
Һис онотмаҫ, һаҡлар хәтерендә
Икһеҙ-сикһеҙ Рәсәй киңлектәре.
(Ҡыҙылмы ул, аҡмы — айырып ҡара
Түшәлеп ҡалған һалдат һөйәктәрен.)
...Сараһыҙҙан төптө ят ерҙәргә
Барып һыйынғандар араһында
Аҙ булғанмы ысын патриоттар —
Үҙ илкәйен һағынып илағандар.
Был тарихты, юҡ, мин яһаманым,
Һис юҡ хаҡым инҡар итергә лә.
Һәм юҡ хаҡым тарих битендәге
Аҡ, ҡараны күрмәй үтергә лә.
Батша, баяр яҡлыларҙы түгел,
Үҙ иленең тоғро уландарын

Бөгөн булһа уйлап әрнейем мин,
Тикшермәйсә ниҙәр ҡылғандарын.

*1992*

## Ҡайтығыҙ!

1

Уралып ятҡан Урал армыттары,
Иңләп-буйлап үткән һуҡмаҡтар,
Һеҙҙе аралап атай-олатай уҙған,
Ейәндәре бөгөн уҙмаҡта.
Һеңеп ҡалған һеҙгә һәр быуындың
Күпме йыр һәм ҡурай моңдары.
Шатлыҡтары яуһа ләйсән булып,
Монар булып ҡурған аһ-зары.
Кесерткән һәм тарма ҡаплап алған
Йәйләү урындарын уҙғанда,
Өләсәйҙәрҙең йыры һыҙыла төҫлө:
«...Йәйлә-әүҙәргә-әй сығып
йәйлә-ә-әгәндә-әй,
Тепет-е-ер-тепетер-е-ер бейәлә-ә-р
һауғанда-ай-й...»
Сауыллыҡтар баҫҡан иҫке юлдар —
Арба, сана юлы, ат юлы.
Барып сыҡһаң, рәнйеп ята төҫлө,
Оҙатып ҡала төҫлө моң булып.
Илтә улар алыҫ сабынлыҡҡа,
Солоҡтарға барып терәлә.
Алпамыштай торған шул солоҡтар,
Туҡтап кит, тип, өнһөҙ инәлә.

Туҡтаһам да шул мин, бер аҙ туҡтап,
Замандарҙы байҡап торамдыр.
Эшҡыуарҙар унда туҡтап тормай,
Уйҙары тик ҡырыу урманды.
Ҡыл тартҡандай тура сыға юлдар
Алыҫ-алыҫ ятҡан яҡтарға.
Ҡайҙан белеп, ниндәй тоҫмал менән
Юл һалдылар икән олатайҙар?!
Иҫке юлдар, йәйләү урындары,
Ауылдарҙан ҡалған нигеҙҙәр,
Ҡайҙа һеҙҙең гөрләп торған саҡтар?
Өндәшмәйҙәр улар, өнһөҙҙәр.
Шүрәлеләр генә хужа булған
Ҡарурмандар хәҙер юҡ инде.
Ағас һанына ҡарап иҫәпләйҙәр
Кеҫәләргә керер һәр тинде.
Уйлай китһәң уйҙар аҙашмалы
Атай-олатайҙарҙың яҙмышы.
Төйәктәрен ташлап киткән өсөн,
Һөйәктәрен ташлап киткән өсөн
Төшмәһәсе беҙгә ҡарғышы.
Хәйер, төшмәҫ. —
Беҙҙең һымаҡ ваҡсыл
Булмаған бит улар тормошта.
Кеҫәһендә бер тин булмаһа ла,
Ерен ҡайғыртҡандар иң башта.

2

Урау-урау Урал армыттары,
Иңләп-буйлап үткән һуҡмаҡтар...
Айыҡ баштан ғына бер уй уйлап,
Бер үтһәләр икән шулар буйлап

Ил ҡыҙырып йөрөгән һармаҡтар.
Бөгөн йәштәр ҡайҙа ағыла, тиһәң,
Себер тарта, йота уларҙы.
«Оҙон аҡса», машина, йорт йыһазы
Биләп алған бөтә уйҙарын.
Ас йәшәгәнме ни ата-баба,
Белмәһә лә машина-маҙарҙы?
Ил саҡырһа, уғын юнып алып,
Ҡайтарырға сапҡан яуҙарҙы.
БыҒау һалып Себер һөрһәләр ҙә,
Иҫән ҡалғандары
                    һирәклэп
Төйәгенә ҡайтып еткән барыбер,
Аяҡҡайҙары талһа, имгәкләп.

3

Ил ағаһы булыр ир-егеттәр,
Ил инәһе булыр йәп-йәш ҡыҙҙар,
Ҡайҙа бөгөн ут үрләтәһегеҙ?
Һеҙҙе уйлап йөрәгем гел һыҙлар.
Тыуған ерегеҙҙә хужа булып
Йәшәһәгеҙ, йүнсел булһағыҙ,
Ата-баба юлын ҡыуһағыҙ,
Булмаҫ инегеҙ һис улъяһыҙ.
Ишәйер ҙә ине иләүебеҙ,
Гөрләп торор ине баш йорт та.
Үҙ ерендә байғош хәлендә һис
Ҡалмаҫ ине бөгөн башҡорттар.
Күкрәктәрен киреп килмешәктәр,
Хужаларса тотоп үҙҙәрен
Йөрөй алмаҫ, талай алмаҫ ине,
Үлсәп һөйләр ине һүҙҙәрен.

4

Иҫке юлдар, йәйләү урындары,
Исеме генә ҡалған ауылдар,
Әсәләрҙәй хәүефләнеп көтә,
Аталарҙай һаман өмөт итә:
«Ниңә һуңлай беҙҙең ҡыҙ-улдар?»
Фәлән ағай, миңә ер кәрәк, тип,
Төгән ағай, миңә эш кәрәк, тип
Ялынмағыҙ берүк, инәлмәгеҙ
(Ултыра бит улар «эш күрһәтеп»).
Һеҙ халыҡҡа тәүҙә һүҙ ҡатығыҙ,
Ил өҫтөндә сыпсыҡ үлгәне юҡ —
Ҡайтығыҙ һеҙ тиҙерәк, тик ҡайтығыҙ,
Ҡайтығыҙ!

*1991*

## Һинән ситтә бәхет эҙләйһем юҡ

Башҡортостан!
Гиҙҙем тауҙарыңды,
Теш сәңкетеп эстем һыуҙарыңды,
Шыр урмандар аша юлһыҙ үттем,
Тик барыбер юлға сығып еттем —
Аҙашырмы кеше үҙ ерендә?!
Килеп сыҡ, тип күптән ымлаһа ла,
Бул(а)алманым бары мин далала.
Юлым төшһә, барыбер күрермен бер,
Ҡылғандарҙы кисеп йөрөрмөн бер,
Һәр тарафын күреп үҙ өйөмдәй.
Ҡайһы ғына яҡта булһам да мин
Матур ерҙәр күреп илһамландым:

Хис-тойғолар ташып бер йырларлыҡ,
Ситтәгеләр һағынып бер иларлыҡ —
Гүзәллектәр иле — башҡорт ере!
Һиндә тыуҙым, һиндә буй еткерҙем,
Һин ни күрһәң, мин дә шуны күрҙем.
Һин хәлһеҙ ҙә бөгөн,
һин бөйөк тә,
Әҙләйһем юҡ бәхет һинән ситтә,
Тупрағыңа тамһын хәләл тирем!

*1992*

## Ымһындырып, әйҙәп юлдар ята

Ятыуҙарҙа,
йәйге селләләрҙә,
Татлы йоҡоларға талғандай һин,
Шаршыларҙа ғына,
уянып китеп,
Һурылып сығып елеп алғандай һин,
Тау-урмандар һылыуы — Нөгөш-һыу.
Туғай-болондарҙың бер нағышы,
Күпме быуындарҙың моң-һағышын
Тыңлағанһың,
буйыңа һеңдергәнһең,
Уйсан йылғам, һинең был яҙмышың
Тағы кемгә тәтер өлөш һуң?!
Көндәр, миҙгелдәр ҙә төрлө-төрлө:
Йәйҙәр үтһә, етә һалҡын көҙҙәр.
Сыуаҡ көндәр йөҙгә нур йүгертһә,
Ырашҡыла сәсәп, тона күҙҙәр —
Теште ҡыҫып алға ынтылаһың.
Нөгөшкә лә бөтә ирәйер саҡ:
Кирегә ҡыумаҡ булып ағымдарын,

Өйрөлөп, һыҙғырышып, сабышып,
Ябырыла уға ел-дауылдар —
Таштарына үтә көҙ һалҡыны.
Яҡыная һаман ҡыш тыныуы —
Һыу өҫтәрен боҙҙар ҡаплап ала.
Бирешмәҫкә тырыша һаман йылға:
Боҫрап ятыр ҡарандары ҡала —
Таштар шартлаһа ла, туңмай улар.
Быуһалар ҙа юлын,
борһалар ҙа,
Аға йылға, аға,
туҡтамай ул,
Тау-таштарҙы ярып юл таба ул,
Боҙ аҫтында ла һис йоҡламай ул.
(Ирек даулағанда кем һуң йоҡлар?)
...Ерҙә тормош та бит,
йылға һымаҡ:
Килгәндә лә ниндәй гәрәсәттәр,
Ҡыл өҫтөндә донъя ҡалғанда ла,
Торғанда ла аңдып мең афәттәр,
Дауам итә, таба бер әмәлен.
Кешелекте,
шул уҡ йылғаны ла
Йәшәтеүсе ҡояш — көн яҡтыһы,
Ер йылыһы, хеҙмәт, тәүәккәллек,
Тәбиғәттең изге, шифа тыны...
Булмай уның тыныр-туҡтар мәле.

* * *

Көн итеүҙәр ауырлаша, тип беҙ
Күпме генә көйөнөп, уфтанһаҡ та,

Юл сатына еткәс, инде ҡайҙа
Китергә, тип күпме баш ватһаҡ та,
Тормош дауам итә.
Таңдар ата...
Бирешмәгеҙ үрҙәр артылғанда,
Тын ҡыҫыла, тип һис туҡтамағыҙ.
Хәрәкәттә генә бәрәкәт бит —
Атлап барған көйө йоҡламағыҙ —
Ымһындырып, әйҙәп юлдар ята.

*1996*

## Күрербеҙме?

Үҙ яҙмышын һәр кем үҙе яҙа,
Тигән дә бит аҡыл эйәләре,
Заманымы, үҙебеҙме оңҡот —
Күргән-белгән дә һис юҡ бит әле
Үҙ яҙмышын үҙе яҙғандарҙы.
Ауыҙлыҡлап, кемдер гел «ҡайғырта»,
Тегеләй ҙә былай борғолай ул,
Уртыбыҙҙы тартып йыртаа-йырта.
«Был юл түгел,
кире боролоғоҙ!» —
Фарман килә. Боролмай юҡ сара.
«Быныһы дөрөҫ микән?» — Икеләнеп,
Беҙҙең дә бит ғүмер үтеп бара.
Бөгөн, ярай, дөрөҫ барҙыҡ һымаҡ,
Иртәгә ни булыр, һин беләһеңме?
Мин белмәйем. Яҙмыш яҙғаным юҡ,
Ауыҙлыҡты һиҙәм, һин һиҙәһеңме,
Ҡайһы яҡҡа тартыр уртты йыртып?
(Ул былай ҙа күптән ҡанап бөткән.
Өмөт уты ғына аҙ-маҙ бызлай,

Хыялдарҙы күптән ҡырау өткән.)
Күрербеҙме беҙ ҙә берәй заман
Юл тоҫмалын белгән һыбайлыны?
Уйыбыҙҙа көн-төн ошо һорау,
Яуап таба алмай ил алйыны.

*1992*

## Әллә ғәрәсәт тыныр мәл?..

Юл кейемен һалмайынса,
Үтте байтаҡ йылдарым.
Йә таҡыр, йә урғылъянлы
Булды уҙған юлдарым.
Офоҡтар әйҙәй,
                    бына мин
Юлдарға сығам тағы.
Әллә ғәрәсәт тыныр мәл,
Әллә башланыр сағы?
Әйләнәм дә, дауыл ҡупһа,
Ергә нығыраҡ баҫам.
Ә уйҙарым
            йылдар аша
Уҡ булып зыңлап оса.

*1980, 1991*

## Уйлайһы ла беҙгә, һайлайһы...

Ҡарт тарихтың байтаҡ биттәренән
Ҡуптарылды алтын яҙыуҙар.
Йән тетрәтеп асып күрһәтелде
Дан-шөһрәттән илереп аҙыуҙар.

Халыҡтарҙы күтәү урынына
Әйҙәр өсөн, төптән уйлаһаң,
Алдай белеү һәм ҡурҡытыу еткән —
Бар даһиҙар юлы шул даһа!
«Бөйөктәрҙең» бөтә боҙоҡлоғон
Ҡанлы ҡулы менән яҙырға
Ҡуштандары көтөп кенә торған
Һәм ҡотортҡан һаман аҙырға.
Ялағайҙар ҡасан булмаған һуң?
Әле аҙмы беҙҙең арала?
Үткәндәрҙән һабаҡ алмау яман —
Бар фажиғә шунан ярала.
Алданғанын белмәй һемәйеүҙе
Аҙ күрмәгән кешелек донъяһы.
Яңы упҡындарға осмау юлын
Уйлайһы ла беҙгә, уйлайһы,
Һайлайһы ла беҙгә, һайлайһы...

*1996*

## Мине генә алмай йоҡо

Бер ни белмәй йоҡлай сабый —
Киләһе көн — ул ни белһен.
Өндәрендә ни күргән дә,
Төштәрендә ул ни күрһен
Шөбһәләнеп уянырлыҡ,
Төн йоҡламай уйланырлыҡ.
Ә мин ятам.
Алмай йоҡо,
Арып-талһа ла тәндәрем.
Әллә шулай буламы икән

«Оло кеше» тигәндәре?
Күҙ алдымда —
бөтә донъя,
Уйҙар... уйҙар —
сикһеҙ даръя...
Бер эшемде бөтөрәһем,
Икенсеһен башлайһым бар.
Күпме серек киҫкәләрҙе
Юлдан алып ташлайһым бар;
Ил яҙмышы — өлгөрлөктә,
Сафтар көсө — берҙәмлектә!
Көнләшеп тә ҡуям ҡай саҡ:
Ниңә мин дә сабый түгел?
Шундуҡ уйҙан кире дүнәм:
Кисер, ерем, кисер, илем!
Шаулы, даулы был заманда,
Һәләкәттәр янағанда,
Әлдә мин сабый түгелмен,
Юҡһа нишләр ине бала?
Быуындары ныгынғансы
Бала миңә таяна ала.
...Йоҡлай сабый — ерем ҡото,
Мине генә алмай йоҡо.

*1970, 1992*

## Халҡым

Уралымды көмөш эйәр итеп,
Ауыҙлыҡлап ваҡыт толпарын,
Елеп үткән халҡым.
Ҡылысынан
Уйнап ҡалған йәшен уттары.

Урауҙарҙан
ураулығы менән
Айырылып торған юлдары.
Тик түҙемдән
түҙемлеге менән
Айырылып торған улдары.
Йәбер-золомдарҙан ҡото осоп,
Олаҡҡанда һанһыҙ замандар,
Ерен-һыуын ҡурсып ауһа ауған,
Әммә ҡалған улар Уралда.
Урал менән халҡым шуға бөгөн
Ер йөҙөндә берҙәй һөйкөмлө.
Урал ғорур, минең халҡым кеүек,
Халҡым ғорур, Урал шикелле!

*1966, 1991*

## Өлгөргәндәр инеп ҡалһын

— Тупһаға баҫып инмәгеҙ! —
Өләсәйҙәр өйрәтте.
(Ҡайҙа баҫһаҡ, нисек баҫһаҡ,
Улар һынсыл күҙәтте.)
— Аслан улай эшләмә! — тип,
Оҡшамаһа, төҙәтте.
Ипле әйтеп, оялтып та,
Күп нәмәгә өйрәтте.
...Өй тупһаһы ғына түгел,
Быуат тупһаһы алда.
— Баҫып инмә! — тип киҫәтер
Өләсәйҙәр юҡ янда.
Юлдаштарым өлгөр минең,

Аҙымдары алымлы.
Уйылып ҡалған эҙҙәре лә
Әллә ҡайҙан таныулы.
Тупһаға баҫмабыҙ, беләм,
Аша баҫып үтербеҙ.
Биштәрҙәрҙе ипләрбеҙ ҙә
Юлды дауам итербеҙ.
Ишекте ябып китербеҙ,
Өләсәй бит өйрәтте.
(Ҡайҙа баҫһаҡ, нисек баҫһаҡ,
Улар һынсыл күҙәтте.)
Этрәгәләм, мыштырҙарҙы
Үткәрергә юҡ самам.
Өлгөргәндәр, аша баҫып,
Үтеп ҡалһын тупһанан.

*1985, 1992*

## Иманлы булыу фарыз

«Хаҡтар бәйҙән ысҡынды», — тип
Янабыҙ ҙа көйәбеҙ.
Ә бит шул хаҡтарҙан алда
Беҙ ысҡындыҡ үҙебеҙ.
Әҙәп, иман тигән бәйҙән
Ысҡынып ҡастыҡ тәүҙә.
Шунан намыҫ тигәненән
Тамам ҡотолдо әҙәм.
Ҡөрьән һүҙен һөйләгәнде
Динозаврҙай күрҙек.
Өр-яңынан төҙөйбөҙ, тип,
Бар иҫкене емерҙек.

...Донъя — ҡуласа икән шул,
Бына хәҙер күрәбеҙ:
Төҙөй башлағандарын да
Кинәнеп емерәбеҙ.
Бер эшлекһеҙ урынында
Тағы бишәү яралды.
Затлы әйберҙәрҙән бигерәк,
Шаҡы-шоҡо таралды.
Дин юлына ихлас баҫҡан
Инсандар бар барлыҡҡа.
Тик берәүҙәр үҙен белмәй
Вәғәз һөйләй халыҡҡа.
Күп ваҡытта хилаф эшкә
Үҙебеҙ юл ҡуябыҙ.
Мулла булыу фарыз түгел,
Иманлы булыу фарыз.

*1997*

## Ауған ҡайын сереп бөткәс кенә...

1

Ерләшкән бар яҡын туғандарҙы,
Дуҫ-иштәрҙе, таныш-белеште.
Ерләштем дә,
ерҙә ҡалғандарҙың
Ҡайғы-хәсрәттәрен бүлештем.
Бәхилләшеү һүҙе әйткән саҡта,
Йәш аралаш сыҡты һүҙҙәрем.
Мин генәме?
Олпат ағайҙар ҙа
Һөртөп-һөртөп алды күҙҙәрен.

Әруахтарға әйттек: «Тыныс йоҡла,
Ҡайтмаҫ ергә киттең, хуш инде.
Бөтәбеҙҙең мәңгелек йорт — ошо,
Урап үтмәй был юл бер кемде».

2

...Ҡәберлекте ҡырлап үткән юлдан
Уҙып барған саҡта бер көндө,
Күрәм: уртала бер зыяраттың
Рәшәткәһен һәм һәйкәлен онтап,
Ҡарт бер ҡайын ауған гөрһөлдәп.
Мин иҫәүән: «Ярай, был мәрхүмдең
Туғандары килер, төҙәтер», —
Тип уйланым. Ошо зыяратты
Үткән һайын йөрөнөм күҙәтеп.

3

...Йылдар үтте. Ауған ҡайын серене,
Күрмәнем мин унда бер кемде.
Ә бер көнө ябай бер хәҡиҡәт
Телеп үтте минең мейемде:
«Юҡ та беҙҙә килеп зыяратты
Ҡабат-ҡабат төҙәтеү йолаһы!»
Мәңгелеккә ер аҫтында шулай
Ҡала икән әҙәм балаһы.
«Ҡайтмаҫ ергә» киткән әруахтарҙың
Һис ҡайтмаҫы ергә яңынан,
Ауған ҡайын сереп бөткәс кенә,
Тамам барып етте аңыма.

*1992*

## Юҡ, ҡурҡытмай

Иллем үтте —
илле баҫҡыс мендем —
Ҡотланылар дуҫтар, туғандар.
(Ысын дуҫтар менән туғандар бит
Һынала тик юлда булғанда.)
Изге теләктәр ҙә, бүләктәр ҙә
Байтаҡ булды,
рәхмәт яҙмышҡа!
(Шул теләктәр, тимен, дәрт өҫтәһен,
Әйҙәп торһон эшкә, уңышҡа.)
Ары күтәреләм. Юл-баҫҡыстар
Текәләнә һаман, көс һынай.
(Хәлең еткән тиклем күтәрел, тик
Буш ҡул менән менмә, ти, буғай).
Ҡул буш түгел: иллем тулған көндә
Тотторҙолар миңә бер ваза.
(Саф гәлсәрҙән. Һәр биҙәге уның
Балҡып китә сағыу нурҙарҙан.)
Эсе тулы өмөт, теләк кенә —
Дуҫ һәм туғандарым өмөтө.
(Ошо көндән ошо ваза менән
Бар булмышым минең бер бөтөн.)
Һәр баҫҡысҡа күтәрелгән һайын,
Йылдар өҫтәй барыр үҙ йөгөн.
Юҡ, ҡурҡытмай йөктәр өҫтәлеүе,
Тик бер уйҙан ҡурҡам мин бөгөн:
Мең бәләләр аңдып тора һаман
Аяҡ салмаҡ булып мөйөштә.
Абына ҡалһам, гәлсәр ваза осор,
Селпәрәмә килер өмөттәр.

*1989*

## Күрмәмеш бул!

Аҡланамы күңел йомшаҡлығы,
Килешмәйме әллә ирҙәргә?
Белмәйем шул.
Әммә ҡайһы ваҡыт
Йәш эркелә минең күҙҙәргә.
Уҡыйыммы берәй һәйбәт әҫәр,
Тыңлайыммы әллә моңло йыр,
Ҡустыларым ҡурай һыҙҙырамы —
Күҙ йәштәрен әмәл юҡ тыйыр.
Пионерҙар
оло йыйындарҙа
Зал түренә инеп баҫһалар,
Шат балалар сығып баҡсаларға,
Шау-гөр килеп күңел асһалар —
Күҙ йәшкәҙәй.
Уйҙар аҡтаралар
Шанлы-ҡанлы тарих биттәрен.
Ниндәй саҡтар булған.
Булып ята —
Уйлай китһәң, иҫең китмәле!
Бөгөн килеп
«үтә аҡыллылар»
Бөтөнөһөн инҡар итмәксе.
Маймылдан бит беҙ яралғанбыҙ, тип,
Әллә маймыл хәленә етмәксе...
Киноларға хәҙер барыу оят,
Телевизор —
һүндер тиҙерәк!
Ишеткәне түгел, күргәндәре
Башҡа һыймай. Түҙсе, түҙ, йөрәк!
...Ҡатын-ҡыҙҙың ябай матурлығы
Аҡылды ла егәр иш итһә.

Гүзәллектәр күрһәм,

hүгенеү түгел,

Йомшаҡ, яғымлы hүҙ ишетһәм —

Күҙемә йәш тула.

Уңайһыҙ ҙа —

(Кемдәр булмай эргә-тирәңдә!)

Һин дуҫ булһаң, ундай минуттарҙа

Күрмәмеш бул мине, күрһәң дә.

*1991*

## Ысынлап та, кемдең кем икәне...

1990 йылдың яҙында
Бөрйәндең күп ауылдарын
hыу баҫты

Иҙел быйыл Бөрйән ауылдарын

Ҡомлап-йышып йыуып ҡараны,

Бер юлы ул асты кешеләрҙең

Күңелендәге аҡты, ҡараны.

Бәғзе берәү,

бата-сума йөрөп,

Кешеләрҙе, малды ҡотҡарҙы.

Икенселәр аңдып көн үткәрҙе

Ярҙамға тип килгән тоҡтарҙы.

— Китаптар йәл, — тине ҡайһы берәү

Һәм киптерҙе битләп, үтекләп.

Ә берәүҙәр батҡаҡ араһынан

Ҡалаҡтарын йыйҙы бөртөкләп.

Бөтмөр ағай,

усына төкөрҙө лә,

Балта, сүкеш алды ҡулына

Һәм тотондо емерек донъяһына,

Ең һыҙғанды ҡыҙы, улы ла.
Ялҡау ярҙам көттө,
кемдәрҙәндер
Тегенеһен, быныһын таптырҙы,
Ғауғалашты.
Бушҡа килгән малды
Үҙе былай йәһәт ҡаптырҙы.
Бөтә халыҡ ярҙам ҡулы һуҙҙы:
Тапҡан-таянғанын оҙатты.
Бәғзе түрә уны ҡайҙа, нисек
Йәшерергә белмәй баш ватты.
Хәтерҙәрҙән оҙаҡ юйылмаҫлыҡ
Оло ҡаза күрҙе бөрйәндәр.
Ысынлап та, кемдең кем икәне
Һынала икән бәлә килгәндә.

*1990*

## Тынғы бирмәй бер уй

Ҡарт-ҡамҡылар
Йөрәге ярылырҙай
Һүҙ ишетә ҡай саҡ яһилдарҙан:
— Ашарыңды, — тиҙәр, — ашағанһың,
Йәшәреңде, — тиҙәр, — йәшәгәнһең...
(Әйтеп бөтөрмәйҙәр аҙағын,
Йәнәһе лә, үҙе аңлаһын.)
Үр артынан үрҙәр артылғанда,
Ғүмер ебем ҡылдай тартылғанда
Тынғы бирмәй бер уй һис кенә:
Ашайһылар, бәлки, ашалғандыр,
Йәшәйһеләр, бәлки, йәшәлгәндер,
Тик күп әле эшләр эш кенә.

Сапҡан бакуйҙарҙы йыяһы бар,
Күбәләйһе, кәбән ҡояһы бар...
...Кәрһеҙ ҡартлыҡ бер саҡ килгәндә:
— Йәшәреңде, — тимәй, — йәшәгәнһең,
Эшләреңде инде эшләгәнһең, —
Тиһә икән яһил әҙәмдәр.

*1989*

## Һөйләшеүҙәрҙән

— Кисә һин кем инең әле?
— Бер әҙәм инем:
Ҡай саҡ табын түрендә,
Ҡай саҡ берәҙәк инем.
— Әле кем һуң,
ҡайҙарҙаһың,
Ни эштәр ҡыйратаһың?
— Әле ни, күреп тораһың:
Буяп сепрәк-сапраҡтарҙы,
Өҫтәп япраҡ-мапраҡтарҙы
Сығара ла һатамын,
Шулай йәшәп ятамын.

* * *

— Кисә һин кем инең әле?
— Мин ни, активист инем.
«Йәшәһен!» — тип тә ҡысҡырҙым,
Ҡайһы ваҡыт: «Би-исс!» — тинем.
— Әле ни эшләйһең инде?
— Хаҡлы ялда ятамын.
Берәй төшөмлөрәк урын
Тапһам, тип баш ватамын...

* * *

— Ә һин, ағай, кем инең һуң?
— Минме? Мин донъя көттөм:
Елкәм сейләнгәнсә тарттым
Төрлө саҡ төрлө йөктө,
...Әле лә тартам.

## Унан алда күрше күршеһенә...

Әллә артыҡ олоғайып киттек.
Улай тиһәң, йәш тә самалы.
Әммә ошо ғына ғүмерҙә лә
Күргәндәр бит хайран ҡалмалы!
Бығауҙарын өҙгән халайыҡтар
Хакимдарҙы ата, аҫалар.
Әлмисаҡтан килгән ҡанундарҙы
Бөгөн килеп утҡа аталар.
Сәфәр сыҡтыҡ алыҫ йондоҙҙарға,
Ә күршебеҙ?
Уны онотторҡ.
(Беҙ оноткан өсөн
ут күршебеҙ
Ҡайыҙламаҫ тимә бер тотоп.)
Илдәр менән илдәр татыулашыр,
Уныһына минең юҡ шигем.
Унан алда күрше күршеһенә
Шик-шөбһәһеҙ асһын ишеген!

*1989*

## Уйлап һөйләр ирҙәр генә...

Беҙгә хәҙер «ағай», «бабай» тиҙәр,
Онотмаһаҡ икән шуны беҙ.
Юҡһа бала-саға һымағыраҡ
Ҡыланабыҙ ҡай саҡ үҙебеҙ.
Орҙо-бәрҙе генә һүҙ һөйләйбеҙ,
Балтабыҙҙы яҙа сабабыҙ.
Кәрәкмәҫтәй ерҙә күҙ уйнатып,
Кәрәк ерҙән ситкә ҡасабыҙ.
Инде беҙҙән төплө һүҙ көтәләр,
Эш көтәләр күҙгә салыныр.
Уйлап һөйләр, сәмле ирҙәр генә
Ил ағаһы булып танылыр.

*1985, 1991*

## Дауахананан сыҡҡас

Урамға бер сыҡҡан арала ла
Осрай күпме дуҫ-иш, ағай-энең.
Эйәк ҡағып ҡына үтһәң дә бит
Тынысланып ҡала бер аҙ йәнең:
«Ярай әле бары ла имен икән...
Таралып та китә шик-шөбһәләр.
Бирешмәмен мин дә сир-фәләнгә,
Ерҙәштәрем имен йөрөһәләр.
Дауахана!
                    Һинең дә бит хәҙер
Исемең генә ҡалып бара инде.
Хәлеңде аңлар табиптарың булһа,
Бөгөн беҙгә шул да ярай инде.

Ҡыштыр-ҡыштыр ғына йөрөһәң дә,
Кеше араһында йөрөү — бәхет!
Ҡәҙерен генә белгән кешеләргә
Нурлы донъя үҙе алтын тәхет!»
Белмәйбеҙ шул ҡәҙерен...

*1997*

## Һеҙ уларҙы, берүк, кәмһетмәгеҙ...

Дан-шөһрәттең ҡойоноп нурҙарына,
Арғымаҡта елгән сағығыҙҙа,
Көскә һөйрәп талған аяҡтарын,
Бер мосафир уҙһа янығыҙҙан;
Етә алмай сағыу түбәләргә,
Ҡаңғырғанда берәү тау юлында;
Көйләй алмай яҙмыш елкәндәрен,
Баҙап ҡалһа тормош дауылында —
Һеҙ уларҙы, берүк, кәмһетмәгеҙ,
Сәфәребеҙ ауыр, юл йыраҡ бит.
Күк йөҙөндә, ана, йондоҙҙар ҙа
Береһе тоноҡ, береһе нурлыраҡ бит.

*1989*

## Ауылыма

Тыуған ауылым,
Беләм, кисермәсһең:
Ситкә тартты юлым,
аймылыштым.
«Ғүмерем буйы һинән айырылмам», — тип
Уйлағайным. Ахыры, яңылыштым.

Хәйер, юҡтыр,
алыҫтарҙа саҡта
Һағыныуҙарым һине хаҡ ине бит!
Гүзәл ерҙәр күрһәм,
сағыштырып
Ҡарағаным — тыуған яҡ ине бит!
Ситтә саҡта,
аңғармаҫтан ғына,
Күреп ҡалһам берәй ауылдашты,
Үрге остан башлап түбәнгәсә
Һәр береһенең хәлен мин һораштым.
Әле лә шулай: хәл һорашҡан саҡта
Тик яҡшы һүҙ көтә күңелдәрем.
«Үлем-китем юҡмы?» — тигән уйҙан
Тетрәнеп тә тора гел йәндәрем.
Бер ауылда түгел, бер үк өйҙә
Төрлө кеше барын күптән беләм.
Яҡшыһы бар уның, яманы бар —
Бөтәһен дә ишетә, күрә киләм.
Һорашамын береһен ҡалдырмайса,
...Күргән һайын берәй ауылдашты,
Уйым менән ҡыҙырып урамдарҙы,
Һағыныу хистәремде ҡандырмайса
Туҡтамайым.
Барыһы ла минең
Йөрәгемдә йөрөй. Йөрөр шулай.
Яҡшы хәбәр — йәндәремә дауа,
Ямандары унда көн-төн дулай.
Ил тотҡаһы — инәй-бабайҙарым
Вафат инде күптән, гүргә ятты.
Мин уларҙы һаман иҫкә алам
Берсә көлөп, берсә уйға батып.

Инде хәҙер ҡусты, ҡәрендәштәр
Изге усаҡ утын дөрләтәләр.
Тамырҙарын һаман тәрәнәйтеп,
Тыуған ерҙә донъя гөрләтәләр.
Барыһы ла, тимен, йәшәһендәр —
(Һәр кемдең дә була бит үҙ юлы.)
Ямандары —
гибрәт алыр өсөн,
Яҡшылары —
йәнгә дауа булып.

*1989*

## Мәңге онотмаҫ күңел

(Репрессия ҡорбандарына)

Була бик ауыр минуттар
(Кемдәр кисермәй уны?!),
Шундай саҡта эстән генә
Уйлап ҡуям мин шуны:
Ярай әле: «Допросҡа!» — тип
Берәү килеп ҡысҡырмаҫ.
Бинахаҡтан кемдер һине
Атырға алып сыҡмаҫ.
Тәүбә, тәүбә!
Ә теге саҡ
Кемгә һуң еңел булған?
Ҡан көҫәүсе «даһиҙарҙың»
Тамам бит күҙе тонған.
...Шартлап торған һыуыҡта йә
Күҙ асҡыһыҙ буранда,

Тышҡа сығырға ла ҡурҡып
Йылы өйҙә ултырғанда,
Күҙ алдымдан шәүлә булып
Шул уҡ тотҡондар үтә.
Нисек кенә түҙгәндәрҙер —
Һаман иҫ-аҡыл китә.
Өҫтәрендә ҡырҡ ямаулы,
Теткеләнгән бер бишмәт.
Башта — мендәр ишараты,
Юҡ бит йүнле итек тә.
Ҡаға-һуға әйҙәгәндәр
Себер урмандарына,
Үтмәҫ балта, үтмәҫ бысҡы
Тоттороп ҡулдарына.
Уларға еңел булғанмы?!
Шуны уйлайым тағы.
(Аҙ ғына фәһем алһаҡсы
Уҙған йылдарға бағып).
...Был — «лагерҙар туҙанында»
Һис тә соҡсоноу түгел.
Миллиондарса ҡорбандарҙы —
Бер ғәйепһеҙ туғандарҙы
Мәңге онотмаҫ күңел.

*1996*

## Ил йәшәр, тел йәшәр, дан йәшәр...

Нурлана, нурлана, нурлана
Салт ҡояш аҫтында тауҙарым.
Күңелем илһамлы саҡтарҙа
Шул тауҙар хаҡында йырҙарым.

Киңәйә, киңәйә, киңәйә
Офоҡтар тауҙарға менгәндә.
Тауҙарҙан уҡталып,
хыялдар
Йондоҙҙан йондоҙға елгәндәй.
Уралып, уралып, уралып,
Тауҙарҙы аралап юл үтә.
Шул юлдан саҡ та соҡ елеүсе
Һыбайлы йөрәкте елкетә.
Ил йәшәр, тел йәшәр, дан йәшәр,
Халҡым һис һыр бирмәҫ яттарға;
Алдарҙар, Салауат, Ҡаһымдар
Тоҡомо елгәндә аттарҙа!

*1988*

## Өҫтәл эргәһендә төн оҙатып...

Сумаҙандар, һеҙгә ял бирәм мин,
Юл туҙанын иплән һөртәйем.
Бәреләһуғыла йөрөп күпме йылдар,
Һеҙҙең дә бит хәлдәр хөртәйҙе.
Күп таушалған дәфтәр-блокноттар
Өҫтәлемдән урын алһындар.
Туҡта, тәүҙә үҙем юл кейемен
Һелкеп һалайымсы яурындан.
Өс тәҙрәмдән өс ҙур ҡояш ҡарай,
Бүлмәләрҙә нурҙар бәүелә.
Оло юлдар шауы көнө-төнө
Тәҙрәләргә зыңлап бәрелә.
Ҡәләмемде тиҙерәк алайымсы,
Юл дәфтәрен асып һалайым.
Өҫтәл эргәһендә төн оҙатып,

Таңдарымды ҡаршы алайым.
Сумаҙандар, һеҙҙе бикләмәйем,
Тут баҫмаһын һеҙҙең йоҙаҡты.
Һеҙҙең менән мине сәфәрҙәргә
Күп ҡалырҙар әле оҙатып.

*1988*

## Белорет хәтирәләре

Килгән һайын сәләмләйем:
«Һаумыһығыҙ, яҡташтар,
Блюхерҙар, Мортазиндар
Ҡылыс ҡайраған таштар!»
Көнө-төнө ялҡынлана
Белорет мартендары.
Ҡитғаларҙы тоташтыра
Уның һуҙған сымдары.
Эй, Белорет, Белорет,
Һиндә илһам, һиндә ҡот.
Тауҙарыңдай күккә ашҡан
Даныңды юғары тот!

* * *

Олатайҙар урман ҡырҡып,
Күмер яндырған яҡтар.
Күпме сая егеттәрҙең
Эҙен һаҡлай һуҡмаҡтар.
Иҙел башы, Иҙел башы,
Иҙел башы — йыр башы.
Сырхауҙарға сихәт икән
Ассы һыуы, Ар ташы.

Олатайҙар руда ташып,
Ҡорос ҡайнатҡан яҡтар.
Бында йәҙрә, туптар ҡойған
Пугачев, Салауаттар.
Иҙел башы, Иҙел башы,
Иҙел башы — дан башы.
Яуҙа ауған егеттәргә
Һәйкәл кеүек һәр ташы.
Тау аралары тарая —
Үҫә ҡала-баһадир.
Юҡ ҡулынан килмәгәне —
Һәр эшкә лә ул маһир.
Иҙел башы, Иҙел башы,
Заман башҡа, заң башҡа.
Һинең яҙмышты байҡаһам,
Күп уйҙар килә башҡа...

## Ҡала тәртип ярата, тип...

Иҫәпле бында һәр минут,
Ваҡыт етмәй бер кемгә.
Эшкә, уҡыуға йүгереп
Көндәр ялғана төнгә.
Елғыуарға бында һан юҡ
(Хәйер, ҡайҙа һан булһын!
Тир түкмәһәң, ҡайһы ерҙә
Ил-йортоңа ҡот ҡунһын.)
Ҡала тәртип ярата, тип
Һөйләүҙәре хаҡ икән.
Етди халыҡ, эшсән халыҡ
Төйәк иткән яҡ икән.

*1988*

## Рухи шишмә

«Урал» гәзитен сығарыусы дуҫтарға

Тауҙар ҡуйынынан шишмә типте —
Рухи шишмә —
тынмай ағыр булһын!
Уның татын ауыҙ иткән һәр кем
Килер көнгә ҡыйыу бағыр булһын!
Әсә теле һинең биттәр аша
Сабыйҙарҙың һеңһен күңеленә.
Сәйәхәт ҡыл, «Урал», үткәндәргә,
Тарих һөйләр йырҙар, моң иленә.
Шаулы-даулы бөгөнгөнө һөйлә,
Йөрәк әрнеүҙәрен урап үтмә.
Йәштәр менән дуҫ бул,
ололарҙы
Йылы һүҙҙән, берүк, мәхрүм итмә.
Сал ағайҙар, ҡусты, һеңлекәштәр,
Мең фатиха ҡыуған юлығыҙға!
Рухи яңырыу тигән йылъяҙманың
Тәүге бите һеҙҙең ҡулығыҙҙа.

*1988*

## Урал тыныс таң ҡаршылай икән...

Мәшәҡәтле донъя...
Кисә кис тә
Һуңлап ҡына эштән бушаным.
Мендәремә һеңдем,
иртәгәмә —

Кешеләрем, һеҙгә ышанып.
Иртән иртүк,
һикереп тороу менән,
Радионы борҙом: ниҙәр бар?
Урал тыныс таң ҡаршылай икән...
Рәхмәт инде һеҙгә, дикторҙар!

*1985, 1990*

## Ғүмерҙең дә йәйе, көҙө булһын...

Мең хыялдар, мең хәүефтәр менән
Күтәп алам мин дә һәр бер яҙҙы.
Шунан, ахыры, бөтә шомланыуым
Ашағанда тулҡын ҡомло ярҙы.
Уйым-уйым ғына тулҡынланып,
Ярҙар тулып аға яҙғы һыуҙар.
Ҡарҙар иреп бөтәр,
һыу тартылыр,
Тик бөтмәҫ тә инде болоҡһоуҙар.
Яҙғы һыумы ғүмер тигәндәре?
Һайрап ҡына китер һандуғасмы?
Яҙын япраҡ ярыр,
ә көҙ еткәс,
Шаулап япраҡ ҡойор бер ағасмы?
Ни булһа ла булһын. Тик яҙҙарым
Имен генә килеп, имен китһен.
Ғүмерҙең дә йәйе, көҙө булһын —
Емештәре берүк бешеп етһен.

*1996*

## Мин әсендем уйлап үткәндәрҙе...

Түшәлеп тә ята йәшел япраҡ
Һарылары менән аралаш.
Енләнгән ел
　　　　　　　шауҙырҙатып ҡоя
Ниндәй икәненә ҡарамай.
Өйөрөлтөп ерҙән күтәрә лә,
Әллә ҡайҙа әйҙәп баҫтыра.
Тәбиғәттең ҡылыҡ-ҡылмышына
Оҙаҡ ҡарап торҙом аптырап.
Енләнгән ел...
　　　　　　　Тәбиғәттең ярай
Үҙ ҡануны, ҡырыҫ булмышы.
Мин әсендем уйлап үткәндәрҙе,
Кешеләрҙең хәтәр яҙмышын.

*1989*

## Онотмаһын ине

Мул ризыҡ һирәк тейгән саҡта
Кемебеҙҙең әйткән булманы:
«Килер ерен мәүлә киң ҡылһын,
Үҙем туйҙым, күҙем туйманы».
Мәүлә түгел, һаман шул үҙебеҙ
Ҡара тирҙәр түгеп ил менән
«Килер ерен» инде киң ҡылғас һәм
Муллыҡ менгәс табын түренә,
Күп ризыҡҡа «күҙебеҙ туйып» китте,
Үҙебеҙ һайланабыҙ, наҙлыбыҙ.
Быныһы әсе, быныһы сөсө тибеҙ,

Тикшерәбеҙ майлы, майһыҙын.
Аслы-туҡлы үҫкән йәштәштәрҙең
Ҡорһаҡ та бар инде бер сама,
Ҡайһы береһе ил ғәменән ситтә,
Ҡорһаҡ өсөн йәшәй — шул яман.
Техникаға егеп отҡорлоҡто,
Еребеҙҙән муллыҡ тиргәндә;
Йәштәр — йәштәр инде,
тик үткәнде
Онотмаһын ине күргәндәр.

*1985, 1991*

## Байназар

Мәшһүр бейеүсе, ҡурайсы һәм йыраусы
Йәнғәле ағай Вәхитов сығарған яңы көй
өсөн махсус яҙылған шиғыр

Ҡурыуҙының итәгендә,
Ағиҙел туғайында,
Йәшәй Байназар ауылы
Борон-борон борондан.
Ҡарттар бында салт аҡыллы,
Эшкә тилбер йәштәре.
Шуға ла бит йәйен-ҡышын
Гөрләп бара эштәре.
Байназар ҡыҙҙары һылыу,
Янып тора йөҙҙәре,
Эштә, йырҙа, бейеүҙә лә
Һынатмайҙар үҙҙәрен.

Һары таңдан йүгерә-атлай
Улар эшкә баралар.
Ә кистәрен йыр-моңдары
Алыҫтарға тарала.
Ҡурыуҙының итәгендә,
Ағиҙел туғайында,
Йәшәй Байназар ауылы
Борон-борон борондан.

*1991*

## Буяуҙар

Төрлө матур буяуҙарҙы
Күреп кемдәр һоҡланмаған.
Кершән яҡҡас,
                    ҡайһы ҡыҙҙың
Күңелдәре хушланмаған.
Ҡунаҡ көтһәк, байрам етһә,
Иң тәүҙә буяу эҙләйбеҙ.
Сағыуҙарын, матурҙарын
Ҡайҙан табырға белмәйбеҙ.
Иҫке-моҫҡоно яңыртып,
Ялт иттереп ҡуя буяу.
«Быйыл ремонт шәп үтте!» — тип,
Китә шунан күҙ буяуҙар.
Һеҙҙе кемдәр уйлап тапты,
Эй буяуҙар, тим, буяуҙар?

*1991*

3 – 1.0090.09

## Тормош фәлсәфәһе

Ҡоро утын гөлтләп ҡабына ла
Янып бөтә. Ашың бешмәй ҡала.
Һим утындар тандыр ғына яна,
Ә ялҡыны ҡыҙыуыраҡ була.
Һим утындан баҙрап ҡуҙҙар ҡала,
Ҡороһо яна көлгә ҡалғанса.
Әммә башта ҡороһон ҡабыҙалар,
Һимерәктәре ҡыҙып янғанса.
Усаҡҡа яҡҡан килендәрҙән һора —
Ниндәй утын кәрәк ҡасаныраҡ?
...Кешеләр ҙә шулай түгелме һуң:
Берәү — яйыраҡ, берәү — сапсаныраҡ.
Быныһы һәйбәт, тегеһе шәп түгел, тип,
Яһамайыҡ тоҡос һығымталар.
Ваҡытына ҡарап
мөһимлеге —
Һәр кемдең дә үҙенең урыны бар.

*1989*

## Тәүге ҡар

*Александр Галкиндан*

Ергә тәүге ҡар төштө —
Аҡҡош ҡанатын йәйҙе.
Әйтерһең, бөгөн ер шары
Ап-аҡтан күлдәк кейҙе.
Барлыҡ ҡый аҫта ҡалды,
Ерем өҫтө тап-таҙа.
Тик ҡояш ҡына, нур бөркөп,
Ҡаранан ямау һала.

Күп тә ятманы,
шулай ҙа
Донъя хәҙер ағыраҡ.
...Үҙем тәүге ҡар булһамсы,
Ятһамсы оҙағыраҡ.

## Һәр Яңы йыл — ыуыҙ ғына сабый

Хуш аяғын тотто тағы бер йыл,
Йөҙөн йыртмай ғына оҙатайыҡ.
Үпкә һүҙ ҙә, үкенес тә барҙыр,
Тик уларҙы бөгөн ҡуҙғатмайыҡ.
Әлмисаҡтан бирле нисек килгән,
Шулай килде инде, шулай үтте.
Ҡаш йыйырмай ғына ҡаршылайыҡ —
Ҡапҡабыҙға өр-яңыһы етте.
Һәр Яңы йыл — ыуыҙ ғына сабый,
Уны буй еткереү — беҙҙең бурыс.
Йылмайтыу ҙа беҙҙән, илатыу ҙа,
Илатмайыҡ, берүк, үҫһен тыныс.
Холоҡ-фиғелеме?
Бәй, уныһы
Үҙебеҙҙә нисек — шулай булыр.
Атай, әсәй нисек — бала шундай,
Иманлының ғына йөҙө нурлы.

## Бына тағы яҙҙар етте

Бер буранлап, берсә тынып
Йәнә бер ҡыш үтеп китте.
Миҙгелдәрҙең иң гүзәле —
Бына тағы яҙҙар етте.

Инә ҡаҙ ҙа тайшан-тойшан
Өйгә инеп сыҡҡан булды.
Мөйөштәге ояһына
Инеп бер аҙ ятҡан булды.
Юҡ, йомортҡа һалмай әле —
Етер ваҡыт, һалмай ҡалмаҫ.
Һалыр ҙа ул, баҫыр ҙа ул
Көнө-төнө,
                    һис йыбанмаҫ.
Көйшәп ята ала һыйыр,
Ҡойроҡ сәнсеп саба быҙау.
Арып-талып ҡайтҡан ҡоштар
Эй дәртләнеп йырын һуҙа.
Ҡар иреп, һут йыя баҫыу,
Быйыл кемдәр сәсер икән?
Ҡотайырмы колхозсылар?
Ә фермерҙар йәлсерме икән?
...Бына тағы яҙҙар етте,
Унан йәйе, көҙө килер.
Маңлайыңда тир кипмәһә,
Ер муллыҡты үҙе бирер.

## Ҡайтырмын арыш бешкәндә...

Сөмкә* йырҙалары тулып,
Ҡар һыуҙары аҡҡанын,
Ҡауландарҙы шыптырҙатып,
Йәш ҡыяҡтар ҡалҡҡанын

---

*Сөмкә — *ауылым эргәһендәге бәләкәй генә инеш һәм шул исемдәге ялан. Халыҡ «Сумкә» ти ҙә ҡуя. Телгә иғтибарһыҙ йәштәр «Сумка» ти ҙә, нишләп ундай исем ҡуштылар икән, тип аптырай.*

Тыңлап яттым —
хозурлыҡтан
Хистәр ташҡан саҡ ине.
Күңелдә ай-йондоҙ түгел,
Барыбер тыуған яҡ ине.
...Сөмкә йырҙаһы бөгөн дә
Ашып ташҡандыр инде.
Йырсы ҡоштар
«тыуған ер» тип
Һағынып ҡайтҡандыр инде.
«Онотҡандыр был» тимәгеҙ,
Быйыл да ҡайта алмам.
Сөмкәмдең моңдарын тыңлап
Ярында ята алмам.
Әлегә тыуған яғыма
Юл төшмәҫ һымағыраҡ.
Ҡайтырмын арыш бешкәндә,
Бәлки, бер аҙ һуңғараҡ.
Көтәлер Сөмкә буйында
Йәшереп киткән серҙәрем.
Сығалыр яҙ ҡыяҡ булып,
Ҡурпы булып көҙҙәрен.

## Сыҡтыҡ алыш майҙанына

Таптыҡ тарих биттәренең
Шомлоларын, ҡараларын.
Ҡаната-ҡаната һыҙырып астыҡ
Ил тәненең яраларын.
Беҙ табынған күпме һәйкәл
Сүплектәргә осто инде.
Беҙҙең ҡондан шыртлаусылар

Шып-шым артҡа боҫто инде.
Тарихтағы ҡара биттәр
Ҡалыр инде ҡара көйө.
Ҡан ҡатһа ла, йәш кипһә лә,
Яраларҙың ҡалыр йөйө.
Ышыҡ ерҙә яра ялап
Ятыр заттан түгел дә беҙ.
Еште ҡыҫып, сыҡтыҡ алыш
Майҙанына бөгөн дә беҙ.
Алыш бара үҙебеҙҙең
Наҙанлыҡ, үжәтлек менән,
Нәфсе һәм еңмешлек менән,
Мин-минлек, ҡурҡаҡлыҡ менән...
Үҙебеҙҙе еңеү-еңмәү
Үҙебеҙҙән торор инде.
Үҙен еңә алған ғына
Илде үҙгәртеп ҡорор инде.

*1988*

## Ҡуйма юл!

Шыплап тейәп Бөрйән ағастарын
Төрлө яҡҡа тая КРАЗ-дар.
Мәйет сыҡҡан өй шикелле ҡала
Шыр яланғас тауҙар, ҡыраҙдар.
Кем таламай беҙҙең урмандарҙы,
Яйын табып уны кем һатмай?!
Сытыр-сатыр, түңгәклектәр аша
Ҡоштар оса ҡуныр ер тапмай.
«Байҙыҡына» йомарт дәү түрәләр
Ағастарҙы биргәс гектарлап,

Өлгөрөмдәр,
                    кем уҙарҙан килеп,
Урмандарҙы һаман ботарлай.
Ҡоро-бушҡа киткән беҙҙең ағас
Көмөш булып кемгә тамырын
Белә-күрә Бөрйән халҡы һаман
Ҡарап ҡала күҙен талдырып.
— Райондың хужалары — беҙ! — тип
Ирәйешеп ултыра түрәләр.
Бойороҡ үтәй улар
                    һәм урынын
Һаҡлау хәстәрлеген күрәләр.
Шәм шикелле ҡайын, ҡарағайҙар
Ағыла ла ситкә ағыла.
«Ас бөрйәндәр» тигән дан күтәрҙек,
Нимә көтәбеҙҙер тағы ла?!
Иҫеңә кил, ағай,
                    сәмлән, ҡустым,
Һуҡыр бойороҡтарға кәртә бул!
Екереүҙәрҙән ҡурҡып күп йәшәнек,
Етте!
        Хәҙер быға ҡуйма юл!

*1990*

## Өсһыу

### 1. Ырғыҙлы

Уйсан ғына аға Ырғыҙлы-һыу,
Быуаттарҙың йыуып юшҡынын.
Устарыма алып уртлағайным,
Тешкә үтте һалҡын таш тыны.

Уйым-уйым ғына туғайҙарҙы
Урман, тауҙар ҡамай бар яҡтан.
Услап һипкән баҡыр аҡсамы ни:
Һуҡмаҡтарҙа көҙгө япраҡтар.
Алыҫтағы яҡын дуҫтай күреп
Килдем һиңә, сапсан Ырғыҙлы.
Тарих менән күҙгә-күҙ осрашып,
Торам әле бына яңғыҙым.
Күпте күргән ил инәһе кеүек,
Һөйләп һүҙең бөтмәҫ һинең дә.
Ярҙарыңа ҡағылып-ҡағылып үткән
Замандарҙың эҙе бөгөн дә
Күҙ алдында ята. Ана, быуа,
Ана, завод торған урындар...
Эшҡыуарҙың туймаҫ нәфсеһен һин
Тартҡанһың бит борон-борондан.
Һин беләһең, Өсһыу[1], ике быуат
Элек булып үткән хәлдәрҙе.
Ярҙарыңа һинең күпме халыҡ
Әйҙәп килтерелгән мәлдәрҙе.
Ҡарғалынан, Ҡазан яҡтарынан
Килгән рустар, килгән татарҙар.
Тауҙар төпкөлөндә ҙур эш башлап,
Фон Сиверс[2], бәлки, отор ҙа...
Ә бит йөҙәрләгән крәҫтиәнгә
Тыуған ерен ташлап китеүе,
Байҙы байытам тип, сит-ят ерҙә
Ауыр эштә көн-төн интегеү
Еңел булмағандыр. Ә эш ҡыҙған:
Быуа быуып, завод ҡорғандар.
Өс йөҙ ылау руда ташый киткән,

Күмер өсөн урман ҡырғандар.
Гудок тауыштарын олпат тауҙар
Күптән инде йотҡан, оноҡкан.
Быуа ярып аҡҡан Ырғыҙлы ла
Бала ярға ҡайтҡан, һайыҡҡан.
Ошо ярҙар һаҡлай Кинйә эҙен,
Һаҡлай Пугачевтың эҙҙәрен.
Ғәле батыр[3] килеп төйәк тапҡан
Һәм көйләгән татар көйҙәрен.
Алтын булып тәүҙә тамғандыр ҙа
Ырғыҙлының таҙа баҡыры,
Юҡ, Сиверс, барыбер, ҡотаймаған,
Аҙаҡ тамам бөлгән бахырың.
Ағын һыуҙай аҡҡан заманалар,
Алмашынған күпме быуындар.
Күпме яуҙар үткән ошо ерҙән...
Тамам еңгәс кенә ҡыҙылдар,
Ырғыҙлының яры тынып ҡалған,
Ләкин тормош тыныу беләме?
Тағы меңәрләгән кеше килгән,
Алып илдең оран-сәләмен:
«Ағас кәрәк, бик күп ағас кәрәк
Ишембайҙа ҡала һалырға!
Вышкаларға нефть ташыу өсөн
«Көньяҡ тимер юлы»н һуҙырға!»
Юҡ, тынмаған, халыҡ менән бергә
Ырғыҙлы ла төптән егелгән.
Гүйә, бөтә илгә оло һынау
Етеп килгәнлеген ул белгән.
Һынау еткән. Ошо Ырғыҙлынан
Ағып төшкән һанһыҙ ағастар,

Һалдар булып, көнбайышҡа аҡҡан,
Приклад булып ингән һуғышҡа.
Яу үткәс тә, емерелгән, янған
Күпме ҡала, күпме ауылды
Төҙөшкәнһең үҙ ағасың менән
Бөтә Рәсәй менән бер булып.
...Уйсан ғына ağа Ырғыҙлы-һыу
Быуаттарҙың йыуып юшҡынын.
Устарыма алып уртлағайным,
Тешкә үтте һалҡын таш тыны.

### 2. Алтынбей

Ҡалын-ҡалын тауҙар ҡуйынынан
Сығаһың да уйнап-юрғалап,
Ырғыҙлының тығыҙ толомона
Үреләһең ебәк таҫмалай.
Меңәр-меңәр йыллыҡ ағышыңда
Ниҙәр күрҙең икән, Алтынбей?
Ағышыңдай серле исемеңә
Ни йәшерҙең икән, Алтынбей?
Йоҡоларҙан яҙған төндәремдә
Буйҙарыңды һинең буйланым.
Тыуған ерем, халҡым үткәненән
Оҙон-оҙон уйҙар уйланым.
Уй йүгерттем бейҙәр заманына,
Исемең аҡлар бейҙәр тапманым.
Яҡыныраҡ килеп, Арыҫлан[4] ҡарттың
Һуҡмаҡтарын тағы байҡаным.
Барыһы ҡалған йылдар төпкөлөндә
Ер аҫтында ятҡан алтындай.
Шатлыҡ, әллә хәсрәт йәше булып

Эй ағаһың, тынмаҫ Алтынбей!
Алыҫтарға китһәм, сылтырауың
Ҡолағыма салынып йыр булып.
Уйлап-уйлап башым етмәне һис,
Исемдәрең ҡалды сер булып.

### 3. Бәләкәй йылға

Һаумы, Бәләкәй йылға —
Ырғыҙлының һылыуы!
Ҡыш та һине күреп үттем,
Боҙ уйғайны йылыуың.
Яҙ айында тағы килдем
Тыңларға кәкүк моңон,
Умырзаялар күрергә,
Оҙатырға ҡар һыуын.
Сөптөр-сөптөр сөптөрләйһең,
Гөлдөр-гөлдөр гөрләйһең.
Сабыйҙарса, үҙ телеңдә
Әллә ниҙәр һөйләйһең.
— Мин — Бәләкәй, — тиһеңме?
— Мин — Кинйәкәй, — тиһеңме?
Хәҙер һиңә көй көйләйем,
— Юҡ, кәрәкмәй, — тиһеңме?!
Улай булһа, аша баҫып
Үттем-киттем, Бәләкәй!
Минең көйҙө тыңламағас,
Һин дә миңә кәрәкмәй!
Аша баҫтым.
Ах, мин баттым!
Йығылмай ҡалдым саҡ-саҡ.
Таяна төштөм алдыма —

Терһәктән үҙле балсыҡ!
Селтерәп көлә Бәләкәй.
— Юҡ, мин бит таянманым!
(Йомшаҡмы тип, балсығыңды
Услап ҡына ҡараным.)
Һаман көлә... Аяҡтарҙы
Мин көскә алдым тартып.
(Хәҙер был саҡлы мәтене
Таҙартырға ҡалайтып?!)
Һин шаян да икәнһең,
Һин уҫал да икәнһең;
Ярҙарыңды умырып
Ҡалай ашап бөткәнһең!
Йә инде, күрешәйек,
Йә инде, килешәйек.
Мин аяҡтарҙы йыуайым,
Тын ғына һөйләшәйек.
Сөптөр-сөптөр сөптөрләй,
Гөлдөр-гөлдөр гөлдөрләй,
Сабыйҙарса, үҙ телендә
Әллә ниҙәр ул һөйләй.
— Боғасының[5] ейәне —
Мин — Бәләкәй, — ти микән?
— Ырғыҙлының һылыуы —
Мин — Кинйәкәй, — ти микән?
Күп һыуҙарҙың араһында,
Эйе, һин бик бәләкәй,
Өләсәйең Ағиҙелгә
Тамсы булыр Кинйәкәй.
Юрамайым,
Һиңә һис

Бүтән яҙмыш кәрәкмәй.
Алҡын йылғаларҙың башы —
Һин — бөйөкһөң, Бәләкәй!
Килке-килке килеп киткән
Күпме быуын ярыңа.
Тағы күпме килер әле —
Һин шаһитһың барына.
Мин дә бер быуын вәкиле,
Кем һуң һинең алдыңда?
Бер миҙгелдә һайрап китер
Ҡош булһамсы талыңда.

*1984*

---

[1]Өсһыу — *Бөрйән районы Ырғыҙлы ауылында Ырғыҙлы йылғаһына тағы ике йылғасыҡ — Алтынбей һәм Бәләкәй йылға (уны Бәләкәй тип йөрөтәләр) ҡушыла.*

[2]1756 – 1774 йылдарҙа Ырғыҙлыла граф Карл Фон Сиверс төҙөткән ҡеүәтле баҡыр иретеү заводы эшләгән. Ул ҡайһы бер йылдарҙа 80 мең ботҡа тиклем саф баҡыр биргән.

[3]Ғәле батыр — *Ҡарғалыла һабантуйҙа көрәш кәндә бер турәрәк кешенең билен һындыра «һуҡ кас», Ырғыҙлы заводына ҡасып килгән. Һуңынан Мәҡсүт ауылында тороп ҡалған. Бөгөнгө Галиндар шунан таралған.*

[4]Арыҫлан ҡарт — *Кинйә Арыҫлановтың атаһы Арыҫлан ҡарт Алтынбей баш алған тауҙарҙа ерләнгән, тиҙәр.*

[5]Боғасы (Пугачев) — *Ырғыҙлы эргәһендәге мөһабәт тау исеме.*

## Шул көнгәсә бер шашаһы...

Ташты, тулғанды даръялар,
Болғанды һыуҙар тағы.
(Була һыуҙарҙың тулғаныт,
Болғаныт алыр сағы.)
...Ярына ҡайта йылғалар,
Үтте ярһыу миҙгелдәр.
Күҙ ҡамаштырыр гөлдәрҙе
Иркәләй ҡырҙа елдәр.
Тик күңелдең урынына
Ултыраһы бар әле,
Шул көнгәсә бер шашаһы,
Бер тулайһы бар әле.

*1991*

## Хәтерләүҙәр

Яҙҙар етһә, Кесе Нөгөш
Атылып-атылып ағыр ине.
Шыйтыҡ талдар оялып ҡына
Һырғаларын тағыр ине.
Ҡарты-йәше, бала-саға
Булыр ине яр буйында.
Асылһа тау түбәләре,
Гөрләр ине кис уйындар.
Сәсрәп торор ине таҡмаҡ,
Йәш-елкенсәк бейер ине.
Мут ағайҙар хат тотторот
Теңкәләргә тейер ине.

Тиңдәштәрем араһында
Бер телсәр ҡыҙ булыр ине.
Шуны күрһәм, әллә нишләп
Йөрәккәйем тулар ине.
...Һыҙландырып иҫкә төшә
Бала саҡтың шул көндәре.
Етте, етте, былай ҙа бит
Тулып ашты күңелдәрем.

*1989*

## Ҡайһылай ҙа оҡшаш, имеш...

Бик ҡараған юҡ ине кис
Ҡояш байыштарына:
Ҡайһылай ҙа оҡшаш, имеш,
Минең һағыштарыма.
Йә бөләңгерт кенә алһыу,
Йә ҡандай ҡыҙыл икән.
Утлы тиһәң, ундағы ут
Ҡуҙлымы, ҡуҙһыҙмы икән?
Бөләңгерт кенә алһыу мәл
Бала сағым түгелме?
Балалыҡ менән хушлашыу
Әллә һиңә еңелме?
«Ҡандай ҡыҙыл» тигәс тә һин
Ҡан-фәләнде уйлама.
Ҡан ҡыҙған саҡтар ҙа барҙыр,
Ҡан-йәш түгеп илама.
Офоҡта янған уттарҙы
Күҙәтәм ғәжиз ҡалып:
Берсә үткән йылдарыма,
Берсә алға уҡталып.

…Бик ҡараған юҡ ине кис
Ҡояш байыштарына:
Ҡайһылай ҙа оҡшаш икән
Минең һағыштарыма…

## Таңдағы күҙ йәшең менән…

Таң алдынан дауыл ҡупты,
Талдар туланы.
Төндә йәшен яраланы,
Ә һин… иланың.
Таң алдынан дауыл ҡупты,
Ә төн тын ине.
Таңдағы күҙ йәшең менән
Алйыттың мине.
Хәтерләнем ошо таңды
Күп йылдар уҙғас.
Нишләйем һуң, йәшлек үҙе
Бер дауыл булғас…

*1990*

## Аңламаның…

Мин әрләнем, һин үпкәләп киттең.
Хаҡлымын да кеүек. Ҡыйын да.
Аңламаның.
                    Әрләп әйткәндә лә,
Тик яҡшылыҡ ине уйымда.
Шунан бирле,
                    юлда ике юлдаш
Ҡапыл аймылышып ҡуйғандай,

Күңелемдә һаман көҙөк йөрөй,
Йылытам тип,
өтөп алғандай.

*1993*

## Эй, ни яман, ни яман?

Үҙ өйөбөҙҙө үҙебеҙ
Туҙҙырабыҙ, ватабыҙ.
Барыбыҙ «аҡылландыҡ» —
Шашыныпмы-шашабыҙ.
Эй, ни яман, ни яман?
Аҡылын эскән ул икән.
Ап-айныҡтар ғауғалашһа,
Иң яманы шул икән!
Үлгән атай ямаҡ булған,
Яңыларға һан да юҡ.
Сеймәлгәнде сисеп бирер
Олатай ҙа янда юҡ.
...Инде хәҙер нишләргә?
Тура килеп тормаһын, тим,
Терһәктәрҙе тешләргә.

*1988*

## Толҡа тапмай, юлды тағы...

Ап-аҡ ялын сайҡап, шыйлап
Оса һепертмә буран.
(Ел аҫтында булһа әгәр,
Бөтөнмө кәртә-ҡураң?)

Ҡарлы ел киҫә күҙемде —
Буранға ҡаршы барам.
Толҡа тапмай, юлды тағы
Һеҙҙең яҡтарға борам.
Хәтерләйем этеп-йыртып
Һепертмә бурандарҙы,
Ошо юлдан икәү бергә
Елкенеп уҙғандарҙы.
Еңмешләнеп,
йәнәш уҙған
Эҙҙәрҙе эҙләп барам.
Тик уларҙы күптән инде
Юйған һепертмә буран.

*1988*

## Иҫкә төшһөн үткән көндәр...

Ал яулығың көнгә элмә,
Көнгә элмә, көн ашар.
Ул да уңһа, өтөп алыр
Ялҡындарға кем оҡшар?
Ябын алһыу яулығыңды,
Шул бик аса йөҙөңдө.
Алма битең, ал яулығың
Арбай минең күҙемде.
Ал яулығың елпелдәтеп,
Бер йылмайып үт әле.
Иҫкә төшһөн үткән көндәр,
Уй төйөнөн һүт әле.

*1992*

## Ахыры, бешкән алманы...

Алма баҡсаһына индем,
Алмалар бешкән саҡта.
Матур ҙа, һутлы ла була
Алмалар беҙҙең яҡта.
Алмағасына үрелеп
Бер алма ла алманым.
Ахыры, бешкән алманы
Мәңгелек тип уйланым.
Алмағастан өҙөлөп төштө
Ҡыҙарып бешкән алма.
Бешкән алмаларҙы өҙмәй
Өҙөлөп төшкәнсә ҡалма.

*9.10.92*

## Тик сисә алмабыҙ, ахыры...

Күрәһең, яҙмыш шулайҙыр:
Осраштыҡ, ҡауышалманыҡ.
Ярым-йорто вәғәҙә менән
Бер-беребеҙҙе алданыҡ.
Ҡарап ҡалдың.
Күҙҙәреңдә
Әсе һағыш, моң тулы.
Уттарға ла, һыуҙарға ла
Һалдың мине бер юлы.
Йылдар үтер.
Уйҙарыбыҙ
Йәшлеккә ҡайтҡан саҡта,

Ваҡыт-ваҡыт уфтанырбыҙ
Икебеҙ ике яҡта.
Үҙебеҙсә тағатырбыҙ
Ҡалған ғүмер йомғағын.
Тик сисә алмабыҙ, ахыры,
Яҙмыштың шул йомағын.

*1992*

## Оҙата барһын гәлсәр сыңдары

Оло юлдар инде ҡарайған,
Геүләп үтеп тора машина.
Күләүектәр ҡала һикереп,
Яҙға ҡаршы барам, ашығам.
Юл ситендә ҡалын-ҡалын көрт,
Саф ынйынан селтәр ябынған.
Һәр аҙымда тоям яҙ тынын,
Һәр ынйыла ҡояш ҡабынған.
Әле унда, әле һул яҡта
Ынйы селтәр төшә сайралып.
Селтер-селтер гәлсәр сыңдары
Моңдарыма килә уралып.
Алыҫ әле, алыҫ юлдарым,
Юлдарымда юлдаш моңдарым.
Күләүектәр ҡалһын һикереп,
Оҙата барһын гәлсәр сыңдары.

*1986, 1991*

## Ҡотлайым мин

Ҡайһы яҡҡа ҡараш төбәһәм дә,
Ҡояш елпей алтын ҡаурыйын.
Ете диңгеҙ, ете тау артынан
Алып ҡайтты ҡоштар яҙ йырын.
Алаңғыртта ҡорҙар туй үткәрә —
Уларҙа ла ғишыҡ зәхмәте.
Шыңғырата көләп йөрөй ҡыҙҙар —
Барыһы ла яҙҙың ҡөҙрәте.
Нур һемереп тиртә йылғаларым,
Ер асыла йылы быу бөркөп.
Һабан турғай инде йыр башлаған,
Умырзая ҡаплай тау битен.
Ерем, халҡым, илем,
бөгөн һеҙҙе
Ҡотлайым мин ошо яҙ менән!
Ҡотлайым мин сағыу ҡояш менән!
Яҙҙар шулай килһен, тим, гелән!

*1962, 1989*

## Әммә юҡҡа...

Аҡман-тоҡман етһә, хәтер
Барлай кәбән төптәрен.
Әммә юҡҡа,
кеше хәҙер
Алдан күрә хәстәрен:
Аҙбар башы тулы бесән —
Эше бөткән буранда.
Ә малдары, тышылдашып,
Көйшәп ята аранда.

*1980*

## Йәшәй икән әле имәндәрем

Шундай ҡырыҫ яҙ ҙа булыр икән:
Ҡырау өттө имән бөрөләрен.
Эй шул саҡта, эскәйҙәрем янып,
«Күлдәгемә һыймай» йөрөүҙәрем!
Ҡара көйгән имәнлектән үттем,
Ҡайҙан килде ҡапыл ҡырауҙары?!
Айҡалдырҙы күңел даръяларын
Ололарҙың шомло юрауҙары:
«Килә торған инде ир башына
Имәндәргә килгән ауырлыҡтар.
Имен генә булһын берүк донъя,
Бәндәләргә бирһен сабырлыҡтар».
Голфстримдың шифа тынын бөркөп,
Ағылып та килде шул саҡ болот.
Тыныу-туҡтау белмәй, көнө-төнө
Йылы ямғыр яуҙы ҡойоп-ҡойоп.
...Күрше ағай бер көн әйтеп ҡуйҙы:
«Терелә бит имән бөрөләре!»
Эй шул көндө, шатлығымдан алйып,
«Күлдәгемә һыймай» йөрөүҙәрем —
Йәшәй икән әле имәндәрем!

*1986, 1992*

## Туғайҙа

Бала саҡтан өҙөлөп яраттым мин
Туғай буйын, ҡоштар тауышын.
Тыңланым мин сихри бер моң итеп
Шылтыр-шылтыр шишмә ағышын.

Бала сағым!
Әллә татлы төш һин,
Әллә өндә бары ла үттеме?
Хыялдарға күмелеп,
йүгерә-атлап,
Уҙған йылдар алып киттеме?
Бына бөгөн, үткер салғы йөкмәп,
Тағы килдем туғай буйына.
Ҡоштар йыры, тау шишмәһе моңо
Ҡушылып аҡты салғым сыңына.
Өйрөлтә һелтәп, һыҙырып һалам
Күгүләндең тығыҙ ерҙәрен.
Һелтәгәндә, гүйә, күренеп ҡала
Ялан аяҡ йөрөгән эҙҙәрем.
Туғай, туғай —
сәңгелдәгем минең,
Бейек тауҙар һине уратҡан.
Шул тауҙарға үрмәләгән саҡта,
Бирсе миңә көс һәм ҡанаттар!

*1967, 1989*

## Тик күңелгә көн дә...

Бөгөн ысыҡ ҡалай мул төшкән,
Һуҡмаҡтарға гөлдәр эйелгән.
Таңғы томан бер аҙ өшөткән
(Өҫкә лә бит йоҡа кейелгән),
Беҙ ҡайтабыҙ — ике диуана —
Бер пинжәкте икәү ябынып.
Күңелдә нур, күңел ҡыуана,
Китмәҫ тимә ялҡын ҡабынып.

Салынмаҫҡа ине ят күҙгә
(Көтөү ҡыуа телсәр еңгәләр),
Аптырамай улар мут һүҙгә,
Күҙ ҙә астырмаҫтар, күрһәләр.
...Йылдар үтер.
Бәлки, бер заман
Йәшлек хисе бер аҙ һүрелер.
Тик күңелгә көн дә ошо таң
Ҡояш кеүек ҡарар үрелеп.

*1965, 1991*

## Сағандар

Ҡояш күҙен әле яңы асҡан,
Иҙел иҙрәй аҡһыл томанда.
Тауға менәм.
Текә һуҡмаҡ буйлап
Теҙелгәндәр баҙыҡ сағандар.
Аяҡтарым тайһа, аумаһын тип,
Сағандарым миңә ҡул һуҙа.
Етәкләшеп тауға үрмәләйбеҙ,
Һиҙелмәй ҙә ҡала бар ыҙа.
Шулай инде...
Саған менән минең
Юлым уртаҡ борон-борондан.
Ата-бабам минең улар менән
Туғанлашҡан яуҙар юлында.
Салауаттың аҫыл егеттәре
Ирек даулап яуға сапҡанда,
Сит яуҙарҙы ҡыуып Ҡаһым түрә
Парижғаса етеп ҡайтҡанда —

Сағандарҙан юнған осҡор уҡ бит
Дошман йәнен ҡыйып барыусы;
Батыр ирҙәр, баҙыҡ сағандар бит
Тыуған ерҙе ҡурсып ҡалыусы.
Тау битенә, текә һуҡмаҡ буйлап,
Теҙелешеп баҫҡан сағандар.
Уралыма һиҙгер һаҡсы булып
Мәңге шулай тороп ҡалғандар.
Ҡояш һаман юғарыға үрләй,
Сағандарым тора тын ғына.
Елдәр иҫһә, ҡапыл һағая ла,
Шыбырлаша башлай шым ғына.
Ҡоштар әле яңы телгә килә,
Иҙел иҙрәй аҡһыл томанда.
Тауға менәм.
Аяҡтарым тайһа,
Ҡул һуҙалар миңә сағандар.

*1964, 1990*

## Инде кәбән һалабыҙ беҙ

Хәтерләргә генә ҡалды
Күбә тарттырған саҡтар.
Ҡайҙарҙа баш һалды икән
Беҙ менеп елгән аттар?..
Салғы тоторлоҡ булғас та,
Беҙ ҙә башланыҡ бакуй.
Артта үлән үҫһә үҫте,
Эҙебеҙ ҡалды буй-буй,
Тәүге йыйған эйеремдәр,
Күбәләр алыҫ ҡалды.

Бала саҡ, үҫмер йылдарҙы
Ай күрҙе, ҡояш алды.
Инде кәбән ҡоябыҙ беҙ
Эреле-ваҡлы күбәнән.
Ашығабыҙ.
                    Яуыуы бар,
Ҡояш өтә түбәнән.
Ҡулдарҙа — күкрәк һәнәге,
Күңелдә — эш ҡомары.
Эстән генә теүәлләйбеҙ
Ни юҡлығын, ни барын.
Ҡарап-ҡарап ҡуябыҙ беҙ
Инде ос һәнәгенә.
Сыҙарлыҡмы, юҡмы икән,
Һынаған юҡ әлегә.
...Күкһел томандар артында
Кәбәндәр ҙә ҡалырҙар.
Ҡайһыһын кем ҡойғанлығын
Бер ҡарауҙан танырҙар.

*1985, 1992*

## Мәүлиҙә

Сыҡҡас бакуй баштарына,
Янып бирҙем салғынды,
                              Мәүлиҙә!
Һин һиҙмәнең, үҙем белдем
Янып йөрөгән сағымды,
Янып йөрөгән сағымды,
                              Мәүлиҙә!
Тындарымды өрһәм әгәр,

Шаурап кибер бакуйҙар,
Шаурап кибер бакуйҙар,
Мәүлиҙә!
Бары һиңә генә бәйле
Минең яныу-ярһыуҙар,
Минең яныу-ярһыуҙар,
Мәүлиҙә!
Туҫтаҡ менән ҡымыҙ һондоң,
Һыуһындарым ҡанманы,
Һыуһындарым ҡанманы,
Мәүлиҙә!
Тағы ҡасан бесән етер,
Түҙер әмәл ҡалманы,
Түҙер әмәл ҡалманы,
Мәүлиҙә!

*1986, 1991*

## Төнгө уйҙар

Уйҙарымды ҡаты мендәр итеп,
Йоҡлай алмай ятам әле лә.
Мең-мең йылдар, юлдар, Кеше булып
Күҙ алдымда донъя бәүелә.
Кешелектең алыҫ үткәненә
Алып китә уйҙар ташҡыны.
Баҙрап тора тарих төпкөлөндә
Мәңге һүнмәҫ яуҙар ялҡыны.
Кеше Кеше булып йәшәһен тип,
Бирер өсөн Ергә Ер төҫөн,
Аҙмы быуын яуҙа ҡанын ҡойған,
Ер биҙәгән биреп бар көсөн.
Быуаттарҙы әйҙәп Кеше килә,

Шатлыҡ, ҡайғы килә оҙатып.
Шатлыҡтары нурҙар һибеп үтһә,
Ҡайғы үтә йөрәк һыҙлатып.
Үткән юлың, Кешем, еңел түгел,
Киләсәгең килмәй бик еңел.
Ҡая-таштар өнһөҙ ята ла бит,
Ә кешеләр ҡая-таш түгел.
Көндө төнгә, төндө көнгә ялғап,
Уйлай Кеше бәхет турында.
Бәхетенә тиңһеҙ һәйкәл итеп
Тормош ҡора күпме урында.
Тормош ҡора...
Ә бит күпме әҙәм
Шул тормошто була ватмаҡсы.
Улар хатта, уйынсыҡ туп төҫлө,
Бар Ер шарын утҡа алмаҡсы.
Уйҙар, уйҙар миңә йоҡо бирмәй,
Инде, ана, офоҡ ҡыҙара.
Баҡсаларҙа ҡоштар уянды ла,
Сәләмләшә сыр-сыу үҙ-ара.
Үтте ләме төн тип, ышанмайса,
Мин тәҙрәгә бағам аптырап.
Тыуып килгән яңы йыр шикелле,
Таң һыҙыла һаман яҡтыраҡ.

*1964, 1988*

## Ай, шул әтәс ҡалай тертләтте

Айлы төнгә моңло юлдаш булып,
Тағы торам Иҙел ярында.
Күңел күҙем күреп етмәгәндең
Тойоп белгем килә барын да,

Эш кейемен ауыл күптән сискән,
Урамдар ҙа инде һил ҡалған.
Үләндәргә — ысыҡ,
                    ағастарға,
Серем итмәк булып, ҡош ҡунған.
Фани донъя менән аулаҡлап бер
Серләшергә күптән ниәт бар;
Ғүмер нисек үтә,
                    нисегерәк
Үҙгәрәләр икән донъялар?
Тынлыҡ... тынлыҡ...
Туҡта, ҡолағыма
«Суп! Суп!» иткән тауыш салына.
Әһә, белдем: был бит һыу өҫтөнә
Таш ишелеп төшә ҡаянан.
Аяҡ аҫтын талғын дерелдәтеп,
Трактор үтте утын баҙлатып.
Эштән һуңлап ҡайтҡан ошо егет
Кемдәрҙә икән хистәр ҡуҙғатты?!
Тағы тынлыҡ.
Күпкә түгел, имеш,
Ҡаршылағы тауҙа:
«Һа-аҡ!» та «һа-аҡ!».
Эй, меҫкенкәй, Һуҡ бит
                    өмөт өҙмәй,
Һаҡты эҙләй тауҙар аралап.
Ҡыуаҡлыҡта ниҙер ҡыштыр-ҡыштыр,
Ниндәй мәхлүк икән быныһы?
Ахырыһы, ул унда эш башҡара —
Аҙыҡ эҙләй үҙенә ымһынып.
Баш ҡалҡытһам, тауҙарҙа нур уйнай,
Шунда оса бөтә булмышым.
Юҡ, нур түгел, ахыры, хыялымдың
Шул һырттарҙа сағыла балҡышы.

Ҡапыл ҡараңғылыҡ.
Был ни хикмәт?
(Айҙың тулған сағы табаҡтай.)
Ҡараһам, күк буп-буш,
айғынам да
Батҡан, ҡалҡмаç бөгөн ҡабаттан.
Һалҡынса ел шул саҡ ҡолағыма
Ниҙер әйтеп китте шыбырлап.
Ауыл осондағы ике өйҙөң
Ҡапҡалары ҡуйҙы шығырҙап.
«Һау бул!» — тине егет әллә кемгә,
Тауышынан таный алманым.
Ахыры, унда йәштәр, көндәгесә,
«Һаҡлағандыр» төнөн ҡапҡаны.
Шул минутта әтәс һөрән һалды,
Ай, шул әтәс ҡалай тертләтте.
Гүйә миңә: «Аңғар, төнөң үтте,
Яңы көнөң етте,
Ғүмер шулай үтә», — тип әйтте.

*1975, 1989*

## Бабай, тауҙар һинең һымаҡ

Бабай, тауҙар һинең һымаҡ:
Тешен ҡыҫа, дауыл булһа...
Балҡып тора ҡайҡайышып,
Таштарына ҡояш ҡунһа.
Бабай, тауҙар һинең һымаҡ:
Күргән берен һөйләп бармай.
Йәне, тәне йәнселһә лә,
Ут сәсрәтә, йәш сығармай.
Бабай, тауҙар һинең һымаҡ:

Күрәләр һәр аҙымыңды...
Рухтарына лайыҡ булһаң,
Ҡалдырмаç һис яңғыҙыңды.
Бабай, тауҙар һинең һымаҡ:
Ил хәстәре
                күкрәгендә.
Тик уфылдап ҡуя ҡай саҡ,
Ер ярып күк күкрәгәндә.

*1976, 1991*

## Ә һиндә?

Тау битенән үткән ҡыя һуҡмаҡ,
Ҡаршы таллыҡтағы һандуғас,
Сәскәләрҙең дымлы керпектәре,
Беҙ ултырып киткән һандыҡташ;
Изге хистәр ҡошо — мөхәббәттең
Тәүге тапҡыр ҡанат елпеүе;
Шул һуҡмаҡтың беҙҙе осраштырып,
Ҡауыштырмай алып китеүе —
Иҫтән сыҡмаç, ләкин телдән осмаç,
Мәңгелек сер минең күңелдә,
Ә һиндә?..

*1970*

* * *

Елдәр еләç, елдәр еләç,
Елдәр сәләм килтерә.
Гүйә, шулар күңелемдең
Бөрөләрен бүрттерә.

Донъямдың мөйөшө китек —
Һинең хаҡта уйлайым.
Күңелемде баҫмаммы тип,
Хаттар яҙып ҡарайым.
Урғылып торған хистәрҙе
Һыйҙырып булмаҫ хатҡа.
Үҙең килһәңсе был яҡҡа,
Бөрөләр бүрткән саҡта.

## Ергә һин тыуған өсөн

Юҡ, һин түгел май сәскәһе,
Түгел күҙҙөң алмаһы ла.
Һин тиклем үк булмағандыр
Матурлыҡтың аллаһы ла.
Әкиәттәге һылыу ҡыҙҙар
Бер исемле булыр ине.
Бөтә заман кешеләре
Һине генә белер ине.
Тик бер генә әкиәтсе лә
Өлгөрмәгән һине күреп.
Донъя шулай биҙәнгәндер
Тыуаһыңды һинең белеп.
Һинең күҙгә оҡшар өсөн,
Күлдәр зәңгәр булғандыр ул.
Йөҙөң нурлы булһын өсөн,
Ғаләм нурға тулғандыр ул.
Ҡояшы батһа, ай ҡалҡа,
Ҡояшы ҡалҡһа, ай бата,
Һандуғасы моң тарата,
Күксиндәре сәскә ата —

Барыһы ла һинең өсөн!
Барыһы ла һинең өсөн!
Тик ергә һин тыуған өсөн!
Тик ергә һин тыуған өсөн!

*1966, 1990*

## Әсә күҙҙәре

Сатнап торған һыуыҡ тынды ҡура,
Үҙәктәргә үтеп ел өрә.
Ҡайтып барам тыуған ауылыма,
Минән алда уйҙар йүгерә.
Бейек-бейек тауҙар киҫеп ята
Мин үтәһе урау юлдарҙы.
Бар тәнемде ҡапшай һыҙғырыҡ ел,
Һыуыҡ өтә ҡолаҡ, ҡулдарҙы.
Күҙҙәр тондо тамам, тәҡәт бөттө,
Туңам, ахыры, барған көйөмә.
Тап шул ваҡыт уйҙар, йүгерек уйҙар
Ҡайтып етте тыуған өйөмә.
Тыуған өйөм...
Ике яҡты тәҙрә
Ҡарап тора ҡайтыр яғыма.
Тәҙрәләрҙән күҙен алмайынса
Унда әсәм мине һағына.
Әсәм көтә.
Гүйә, елдәр тымды,
Сатнап торған һыуыҡ ҡаҡшаны.
Йәнгә йылы инде,
Ҙур тауҙарҙы
Тыуған тупһам итеп атланым.

*1963, 1990*

## Яна икән һиндә, тик һиндә

Атланып та ярһыу аттарға,
Һыр бирмәç тә өсөн яттарға,
Атай-олатайҙар яуҙар сапҡан ер,
Уттар йотоп, бәхет тапҡан ер —
Һуҡмаҡтарҙа даға эҙе бар.
Иҙел генә кисмәç ир булмаç,
Ир-егеттәр етмәç ер булмаç,
Тик баш эймәй яҙмыш еленә,
Ҡайта ирҙәр тыуған иленә —
Ҡарттарҙың бит шундай һүҙе бар.
Һинән ситтә булған саҡтарҙа
Һыр бирмәнем былай яттарға.
Ғүмер юлын бушҡа һүтмәнем,
Тик күңелгә, һиҙҙем, етмәне
Тыуған яғым — әсәм ҡосағы.
Атай-олатай ятҡан изге ер,
Һиндә генә тамырым ерегер.
Күп усаҡтар күрҙем еремдә,
Яна икән һиндә, тик һиндә
Йәнгә йылы бирер усағым!

*1965, 1992*

## Ғүмер юлым үтә тау битләп

Ҡайһы ергә барып сыҡһам да,
Тауҙар, тауҙар мине уратҡан.
Берсә һажлап, берсә тын ғына
Йә янымда, йәки йыраҡта
Тора улар,
Ҡайҙа баçһам да,
Нимә эшләһәм дә, күҙәтеп.

Ял итергә ятһам, тәҙрәнән
Ҡарай улар хатта йөҙәтеп.
Тауҙар минән нимә көтә икән?
Өмөттәрен аҡлап булһасы!
Ғүмер юлым үтә тау битләп,
Таймай ғына атлап уҙһамсы.

*1966, 1992*

## Донъя иркен күренә

Сәскәләрҙе яу һөрөмө япҡанда,
Йылдар ҡара болот булып аҡҡанда,
Мин атланым ерҙә тәүге аҙымды.
Шулай башлап киттем ғүмер яҙымды.
Тауҙар, тауҙар ине минең яҡ-ягым,
Моңдаш, юлдаш булды тауҙар һуҡмағы.
Зарланманым һуҡмаҡ текә саҡтарҙа
(Текә һуҡмаҡ була таулы яҡтарҙа),
Шул һуҡмаҡтар илтте тауҙың үренә,
Ә бит үрҙән донъя иркен күренә.

*1961*

## Ә таң шундай аяҙ

Үкһеп үтте төнөн ҡара болот,
Сапты елдәр уны ҡамсылап.
Ә таң шундай аяҙ, һауалар саф,
Ҡуш тәҙрәнде иреп ас ҡына —
Оло донъя үҙе күкрәгеңә
Башын һалыр ғашиҡ ҡыҙ һымаҡ,

Күҙҙәреңә ҡарар. Керпегендә
Йәш бөрсөгө торор йымылдап.
Өмөтләнеп, эстән хәүефләнеп,
Бар яҙмышын һиңә тапшырыр...
Өмөттәрен әгәр алдай ҡалһаң,
Бар үткәнен һинән таптырыр.

## Юлдар

1

Ҡайҙа барһам, юлдашым бар,
Алға әйҙәй шул ғына.
Алға әйҙәй, тынғы бирмәй
Икһеҙ-сикһеҙ юл ғына.
Тыуған өйөм тупһаһынан
Шул саҡырып сығарҙы.
Сығарҙы ла минән алда
Алып китте уйҙарҙы.

2

Юлдар, юлдар,
                        һеҙгә нисә быуын
Ауа-түнә сыҡты тәүге ҡат?
Тормош йөгөн һөйрәп,
                        хәлдән тайып,
Өнһөҙ-тынһыҙ үтте һуңғы ҡат?
Ҡара урмандарҙан тәүге тапҡыр
Ҡасан, кемдәр уҙған юл һалып,
Тәзе һыҙып үткән һәр бер түңгәк
Һөйләп тора, тыңла туҡталып.
Ата-бабам утын-бесән йөгөн
Арыҡ атҡа тейәп яртылаш,

Йәйен-ҡышын ошо юлдар буйлап
Йөгөн этеп үткән артынан.
Ялбыр имән, һырғый ҡарағайҙар
Бер тамырҙан үҫкән был яҡта.
Ирек даулап яуға сапҡандарҙың
Эҙен һаҡлай һаман һуҡмаҡтар.
Күптәнме ни,
Саҡ бауыры ҡалҡып,
Тормош күркен тойған улдарҙы,
Туҙанына бутап хыялдарын,
Ут эсенә илтте юлдары.
Юлдар, тимен,
Ғәйепләмә юлдар
Ҡайтмағанға күптәр өйҙәргә?
Шул уҡ юлдан Еңеү тантанаһы
Ҡайтты лаһа балҡып йөҙҙәрҙә.

3

Ғәрәсәтле саҡта тыуғандар —
Беҙ булманыҡ һуғыш ҡырында.
Окоптарҙа түгел, өйҙәрҙә
Ҡалтырандыҡ ҡышҡы буранда.
Күрмәнек беҙ утлы дауылды,
Ҡанһырауын тотош илдәрҙең:
Тик йөрәккә һеңде ғүмергә
Ыжғырыуы әсе елдәрҙең.

4

Үҫтек.
Юлға сыҡтыҡ.
Байтаҡ ара
Сыбарланған беҙҙең эҙ менән.

Ялан аяҡ, ташлы тауҙар аша,
Көләс йәки бойоҡ йөҙ менән
Аҙ үтмәнек тар һуҡмаҡтар буйлап,
Йә туҙанлы оло юлдарҙан,
Тормош йөгөн тартып, тиргә батып
Болотло йә сыуаҡ йылдарҙа.
Беҙҙең тәндәр ялан аяҡ аша
Үҙ йылыһын юлға һеңдергән.
Шуға беҙгә юлдар йылы, яҡын —
Юлдар юлдаш беҙгә ғүмергә.

5

Ана, ҡара,
                    ҡаршы тау битендә
Төркөм-төркөм йәштәр күренде.
Йөрәктәрҙә дәртле хис ҡуҙғытып,
Бар тирә-йүн йырға күмелде.
Бесәнселәр икән.
                              Салғылары
Ялт-йолт уйнап бара ҡылыстай.
Көн дә шулай иртән китәләр ҙә
Ҡайта улар киске ысыҡта.
Ҡылыс, тигәс, күҙ алдымдан үтте
Утлы-ҡанлы йылдар сабышып.
Йылдар аша, гүйә, яңғырап китте
Атлыларҙың «Ур-ра!» тауышы.
Тертләп ҡуйҙым.
Әллә был тауышты
Ҡолаҡтарым яңылыш ишетте:
Шул «Ур-ра-а!»ла олатайҙың тауышын
Айырғандай булдым нисектер.

6

Дауылдарҙың юлын бүлер өсөн,
Яҡлар өсөн Кеше яҙмышын,
Йәштәштәрем руда сығара,
Ҡорос ҡоя цехта ярышып.
Нефтселәр, ана, ер майын
Арттыралар илдә көн һайын.
Баҫыуҙарҙа иген өлгөрә —
Минең йәштәш ҡулы, моғайын.
Атлар өсөн иркен еребеҙ,
Баш өҫтөндә — зәңгәр күгебеҙ.
Йондоҙҙарға илсе ебәрҙек,
Ерҙә генә ҡалыр түгелбеҙ.

7

Эңер төштө.
Йәштәр, пар-пар булып,
Клубтарға табан ашыға.
Гармун телгә килде,
йыр яңғырай,
Тау артынан тулған ай сыға.
Шишмә буйҙарында күпме тирәк
Ғашиҡтарҙы көтә һағынып.
Бөгөн тағы нисә йөрәк хисе
Һөйөү булып ҡанат ҡағыныр...
Күҙҙәр еткәс, тағы күпме юлдар
Туй залына барып тоташыр.
Һәр бер өйгә, ихлас күңелдәргә
Юлдар күпме бәхет, йыр ташыр...

*1962, 1992*

## Һөйөү булып тамды

Матурлығын тыуған ҡырҙарҙың,
Ҡая йырып аҡҡан һыуҙарҙың
Тик китаптан уҡып белмәнем.
Йән-тән биргән изге еремде —
Бөрйән тигән гүзәл илемде
Матурлыҡтар өсөн һөймәнем.
Биштәремде артып иңемә,
Маңлай тирен һөртөп еңемә,
Үркәс-үркәс тауҙар артылдым.
Юл оҙон, тип ҡотом османы,
Ел-ямғырҙан ҡурҡып боҫманым,
Күңел һаман алға тартылды.
Олпат тауҙар
бөтмәҫ көс булып,
Эскән һыуҙар
моң һәм хис булып
Үтеп инде йөрәк түремә.
Бөтә һағыш,
булған бар шатлыҡ,
Әсе тирем менән ҡатнашып,
Һөйөү булып тамды еремә.

*1966, 1992*

## Бир ҡулыңды, йәштәш!

Эй шаулай ҙа шаулай ҡарағай,
Ағыла ла ағыла болоттар.
Күңелдәргә ниңә гел генә
Шом һалалыр шундай минуттар.

Беҙ күрмәгән ниҙәр бар икән?
(Донъя байтаҡ ҡына күрһәтте.
Һүнеп барған күпме усаҡҡа
Тынды өрөп ялҡын үрләттек.)
Бир ҡулыңды, йәштәш,
юлдарҙы
Үтәйек беҙ иңгә-иң терәп.
Юлдаштарың барҙа юл ырай,
Маҡсаттарға етеү тиҙерәк.
Юл йөктәрен уртаҡ бүләйек,
Талһа, тигеҙ талһын иңбаштар.
Алда күпме уттар һүндереп,
Дөрләтәһе күпме усаҡтар!

*1975, 1992*

## Тауҙарыма киләм...

Аҙмы ни ул донъя мәшәҡәте...
Тормош булғас, була бары ла.
Ниҙәр, кемдәр китмәҫ күңеленде —
Күңел түгел, таш та ярыла.
Тауҙарыма баҡһам, күңел балҡый,
Хыялдарым ҡаға ҡанатын.
Шуға ла бит, эсем бошҡан саҡта,
Тауҙарыма киләм йән атып.

*1966*

## Күҙе була үрҙә, ҡояшта

Ҡабарынып ҡалҡҡан ҡаяларҙың
Баштарында бөркөт балаһы
Күҙләп ята үҙе тишеп сығыр
Болот менән оя араһын.
Кеше лә бит, уйлап ҡарағанда,
Нәҡ шул бөркөт инде тәү башта:
Сәңгелдәктә ятҡан сағында ла
Күҙе була үрҙә, ҡояшта.

*1965*

## Үкенестәрем ҡалһын үҙемдә

Күҙҙәреңде, берүк, ситкә борма,
Күрмәмешкә, берүк, һалышма.
Һиҙеп торам: һин бит әллә ҡасан
Танып алдың мине тауыштан.
Мин бит һине ятҡа һанамайым,
Әүәлгесә күңелем шар асыҡ.
...Һин ситләшкәс,
мин дә эҙләйһем юҡ
Ҡабат яҡынайыу сараһын.
Ҡасан ғына —
кәрәк саҡтарымда
Алдарымда бейеп йөрөнөң.
Эс серҙәрен минең һауғаныңда
Әүлиәгә һин бит тиң инең.
...Был да минең кеүек әҙәмдер, тип
Алданыуым тәүгә түгел дә.
Ғәйепләргә һине һис уйым юҡ,
Үкенестәрем ҡалһын үҙемдә.

# Өфөм

1

Күрҙем һине төрлө саҡтарында,
Күрҙем һине төрлө саҡтарымда.
Булғаным бар шаулы залдарында,
Торғаным бар урам саттарында,
Күкрәгемә һыймаҫ шатлыҡты,
Күңелде өйкәп торған ваҡлыҡты
Өнһөҙ генә баштан кисереп,
Шиғыр юлдарына күсереп.

2

Хайран ҡалып һинең нурҙарыңа,
Ғашиҡ булып моң һәм йырҙарыңа,
Теҙгендәрен өҙөп ҡасҡан тайҙай,
Йүкәләрең сәскә атҡан айҙа
Мин килгәйнем һиңә тауҙарҙан,
Их, ул йылдар хәҙер ҡайҙарҙа?..
Йылдар үтә. Йылдар — болоттар.
Иҫтә ҡала бары минуттар.

3

Үҙ моңдарын, үҙ зауығын йырлап,
Таштарыңа үҙ һырҙарын һырлап,
Үтә торҙо ваҡыт сыңлап, зырлап,
Һин илһамың менән күңел нурлап,
Күҙ алдында үҫтең, үҫтерҙең
Минең затты, минең тиҫтерҙе.
Уйҙарыңдың борҙоң ағышын,
Уртаҡлаштың шатлыҡ, һағышын.

4

Тыңлап һинең моңдо, йырҙарыңды
Һәм һемереп ғилем нурҙарыңды,
Беҙ көс-гәйрәт һиндә йыйған сакта,
Ҡайыштарҙы ҡыҫып быуған сакта,
Баҡсаң биҙәп үҫкән һәр ағас,
Урамыңда ятҡан сәкматаш
Ҡабатланы тарих һүҙҙәрен
Һәм күрһәтте уның эҙҙәрен.
Сәмреғоштоң ҡайырып тот тырнағын,
Ҡайтып төшкән һағынып үҙ тупрағын,
Ҡарашын — уҡ, офоҡто ян иткән,
Быуаттарҙы әйҙәр Салауат
Әйтте беҙгә шунда аманат.
Шул аманат — беҙгә пар ҡанат.
Аманатҡа хыянат — яманат.

5

Өфөм, Өфөм, алыҫ юлдар урап,
Юлдарымдан оҙон уйҙар уйлап,
Баҫтым тағы урам таштарыңа,
Күҙ йүгерттем тирә-яҡтарыма;
Һылыу ҡыҙҙай икән һин һаман
(Ғашиҡ егет әле мин һаман),
Ҡараштарың ниндәй иркәләй,
Тик... сәскәһен ҡоя йүкәләр...

6

Ете ырыуҙың етмеш төйәгенән,
Аҡ күңелле халҡым йөрәгенән,

Һин осорған сая бөркөттәрҙән —
Донъя йөгөн тартҡан егеттәрҙән
Һиңә, Өфөм, сәләм килтерҙем,
Үткәндәрҙе баштан кисерҙем.
Үкенерлек түгел үткәндәр,
Көйөнөрлөк түгел көткәндәр:
Тел осонда йырлар йырҙарым бар,
Булған һайын һиндә, баш ҡалам,
Гүйә, ғүмер яңы башлана.
Күңел — тыуып килгән ай һымаҡ,
Үҙем — теҙген өҙгән тай һымаҡ.

*1964, 1992*

## Ҡайтмайынса шунда мин үҙем

Хат яҙырға тыуған яғыма
Ҡәләм алған һайын ҡулыма,
Күҙ алдыма баҫа тауҙарым,
Йәйеләләр туғай, ҡырҙарым;
Тулҡындарын ҡағып ташына,
Йылғаларым еләә ҡаршыма.
Әйтерһең дә, көтөп торғандар —
Шаулай башлай ҡалын урмандар.
Яландарым миңә һүҙ ҡуша:
«Күрәһеңме, арыш баш ҡоҫа!»
Яҡташтарҙың күрәм үҙҙәрен:
Һөртә-һөртә маңлай тирҙәрен,
Мыҡты ирҙәр, шаян еңгәләр,
Йәш-елкенсәк — барыһы бергәләп
Ҡайыра һелтәп бесән сабалар,
Тауҙай итеп кәбән һалалар.

Эш өҫтөндә булған шау-шыуҙар,
Төртмә һүҙҙәр, салғы яныуҙар
Ҡолағыма салына йыр булып,
Тойғоларым таша урғылып.
Туҡта-туҡта, күңелем, бер аҙ түҙ,
Ә тегендә ниндәй ҡара күҙ,
Ҡарай-ҡарай тауҙар яғына,
Кемде икән өҙөлөп һағына?
Бергә уйнап үҫкән малайҙар
Миңә ҡарап бармаҡ янайҙар:
«Һине көткән беҙ ҙә бар әле,
Сәләм яҙмай ғына ҡара әле!»
Кемгә төбәп хаттар һалһам да,
Кемгә генә сәләм яҙһам да,
Тынысланмаҫ инде күңелем,
Ҡайтмайынса шунда мин үҙем.

*1960, 1992*

## Хәҙер беҙ йылтлап уҙабыҙ

Борма юлдар, билғау булып,
Тауҙарымды ураған.
Оҙонмо, ҡыҫҡамы улар —
Кем тағатып ҡараған?!

Майһыҙ арбалы заманда
Юҡ кеүек ине осо.
Хәҙер беҙ йылтлап уҙабыҙ
Машиналарҙа осоп.

*1966*

## Ҡыуыштарҙың хужалары ҡайтһын

Ыуарама килеп,
һиҙмәгәнбеҙ:
Көн һүрелеп көҙгә ауышҡан.
Бесәнселәр ҡайтҡан,
аҡландарҙа
Етемһерәп ҡалған ҡыуыштар.
Ямғырҙарҙа күшегеп,
йолҡҡоланып,
Сабыр кисереп хәсрәт-нужаһын,
Кеше тауышын, салғы сыңын һағынып
Көтөр улар, көтөр хужаһын.
Имен генә килһен килер йәйҙәр,
Билбыуарҙан үҫһен күгүлән.
Ҡыуыштарҙың хужалары ҡайтһын,
Усаҡ яҡһын иртән,
кис менән!

*1985, 1990*

## Һары ялҡын ялмағанда

Урмандарҙа —
һары ҡойон —
Һирпелмәҫме сарпыуы?
Ҡарап торам,
йөрәгемдең
Саҡ-саҡ тыйып ярһыуын.
Урмандарҙа —
һары ялҡын —
Ялмамай үтмәҫ инде.
Янып барған йөрәгемде
Дөрләтмәй китмәҫ инде.

Шундай миҙгелдәр еткәндә
Бер уйланмай ҙа булмаç.
Һары ялҡын ялмағанда
Һағышланмай ҙа булмаç.

*1968, 1992*

## Кисерегеҙ!

Тағы бер йыл алтын көҙөн туйлай,
Янып тора урман буйҙары.
Ләкин икенсе туй уйға һала
Буйға еткән һылыу ҡыҙҙарҙы.
Ә мин инде,
кейәү-егет булып,
Туй түрҙәрен, ахыры, биҙәмәм.
Тик туйҙарҙа,
онотолоп китеп,
Балдыҙҙарға ҡуйһам ҡаш һикертеп,
Ҡәйнештәргә мут һүҙ һөйләһәм,
Аҙаҡ... тыйнаҡ ҡына көрһөнһәм,
Кисерегеҙ!

*1968, 1992*

## Аҙаҡ ҡолаҡҡа салынып...

Тәбиғәттең бола сағы —
Туй атҡарған өй кеүек.
Яҙ, йәй моңо,
табындарҙа
Һыҙылып тынған көй кеүек.

Алыҫая, һеңеп ҡала
Күңелгә яҡындары.
Аҙаҡ ҡолаҡҡа салынып,
Тилертә торғандары.

*1979, 1989*

## Йәшәһен ошо ғәҙәт

Боларыуҙан туҡтап көндәр,
Ҡарҙар яуып, һыуытҡас;
Һуйылаһы мал һуйылып,
Тейәктә ит тыныҡҡас;
Бала-саға хәбәр һала
Өйҙән өйгә йүгереп:
— Һуғым ашына барығыҙ,
Һуңлай күрмәгеҙ берүк!
Ҡунаҡтар килә,
хужалар
Әйҙүкләп ҡаршы ала.
Әгәр кемдер килмәй ҡалһа,
Хужа хәтере ҡала.
Мәрәкә һүҙ таба һәр кем,
Шунан китә ялғанып.
Ил көнөнән башланған һүҙ
Урап сыға донъяны.
Ҡаҙанлыҡтан ишетелә:
— Ит тураусы — табыштыр.
Йә, оялып торма, килен,
Унан-бынан ҡабыштыр.
Табындарға иң тәүлә

Боҫрап килә тултырма.
(Тултырманы ауыҙ итмәй,
Ауыҙ асып ултырма!)
Берәү мут һүҙ ысҡындырһа,
Геү итеп ҡала табын.
— Йә, барынса етешегеҙ! —
Хужалар ҡыҫтай тағы.
Туҫтаҡ-туҫтаҡ һурпа килә,
Ҡатығы, әсе ҡорот.
(Тирләгәнсе һурпа эсһәң,
Бар сырхауыңды онот.)
Ашау-эсеү фарыз түгел,
Бер ултырыу — бер ғүмер.
(Шул мәжлесте маҡтап аҙаҡ
Өйҙән өйгә һүҙ йөрөр.)
Һый-хөрмәттән ҡунаҡтар ҙа,
Хужалар ҙа ҡәнәғәт.
Муллыҡ, йомартлыҡ билдәһе —
Йәшәһен ошо ғәҙәт!

*1980, 1990*

## Ташҡа тамыр йәйгән сауҡалар

Көҙҙәр етһә, ҡая күкрәгендә
Шәм шикелле яна ҡайындар.
Сабыуҙарын ел сайҡаһа,
гүйә,
Аҡ таштарҙы ялмай ялҡындар.
Ҡолас етмәҫ ҡайын түгел улар —
Ташҡа тамыр йәйгән сауҡалар.

Төç ташламаç тол еңгәләр һымаҡ,
Ғүмергә йәш көйө ҡалалар.
Ел-дауылдар менән ҡосаҡлашып,
Бейей-бейей сулпы сыңлатып,
Янып йәшәй.
Ҡороһа, сауҡа көйө
Ҡапыл ҡорой, йөрәк һыҙлатып.

*1974, 1990*

## Тулап ҡуйҙы ҡапыл йөрәгем

Офоҡтарҙа көйрәй болоттар,
Томбойоҡтар ойой ятыуҙа,
Һытылырҙай булған алмалар,
Сиңерткәләр ярһып йыр һуҙа.
Йәшел әле, йәшел ағастар,
Күҙен ҡыҫа гөлдәр ҡояшҡа.
Йылы туҙандарын борҡотоп
Саба юлдар, саба алыҫҡа.
Һөйөнөп мин донъя йәменә,
Атлағанда юлдан тын ғына,
Күрәм, алмағастан өҙөлөп,
Һарғылт япраҡ төштө шым ғына.
Тик бер япраҡ…
Әйтсе, алмағас,
Һарғылт япраҡ кемдең бүләге?
Һин өнһөҙһөң,
ниҙер һиҙенеп,
Тулап ҡуйҙы ҡапыл йөрәгем.

*1968, 1991*

## Була икән йылғаның да...

Ҡыҙ иңенә һибелеп төшкән
Бөҙрә-бөҙрә сәс һымаҡ,
Аҡ сабаҡтарын сорғотоп,
Сағыу нурҙарҙа уйнап;
Ҡараһаң, күҙ сағылйытып,
Таштан ташҡа һуҡлығып;
Яҡын барһаң, һыу сәсрәтеп
(Беләм уның шуҡлығын),
Шаршыларҙа шарлап аҡҡан
Нөгөшкәниҙер булған:
Ҡарашына әллә үпкә,
Әллә моң-һағыш тулған —
Өнһөҙ-тынһыҙ, нурһыҙ ғына
Йыуа һалҡын таштарын.
Була икән йылғаның да
Уйға ҡалыр саҡтары...

*1985, 1989*

# Сатирик миниатюралар

### Ҡайһы бер көй эшкәртеүселәргә

Таз-тоз иткән тауыш килгәс,
Әйтте миңә танышым:
«Тыңла, ана, һандуғастың
Эшкәртелгән тауышын».

* * *

Дуҫ артисҡа әйттем:
«Ролеңдә
Яһалмалыҡ бер аҙ һиҙелә».
Яуап бирҙе:
«Ысын кеше түгел,
Образ ғына бит ул үҙе лә».

## Рәссам ауыҙынан

— Табаҡ битле, ялбыр ҡашлы,
Шеш ҡабаҡлы ҡыҫыҡ күҙ
Булһа әгәр — башҡорт була.
Башҡа милләт — башҡа һүҙ.

## Бер шағирға

Шиғырыңдың башы — башҡа,
Уртаһы — үҙенә башҡа.
Аҙағы һис инмәй башҡа,
Бер һүҙем юҡ шунан башҡа.

## Елғыуарға

Өп-өр яңы джинсаңдың төбөн
Тырышып-тырышып кисә ямай инең.
Бөтөн кейем кейеп йөрөүеңде
Ғәрлеккәлер, ахыры, һанай инең.
Шул ыштаның төбө, аңғармаҫтан,
Ысынлап та, тишелеп ҡуйһа бер көн,
Ямап кейә белмәҫһең, тип ҡурҡам —
Һүҙ әйтмәйем бүтән, бөттө-бөттө...

*1992*

# Таңдан торған кеше...

Балҡып тыуған саҡта яҙғы таңдар,
Күңелдәргә нурҙар яғылғанда,
Сырт-сырт итеп бөрө сатнағанда,
Барса ҡоштар түгелеп һайрағанда,
Йоҡлап ҡалһам,
көнгә, кешеләргә,
Үҙ-үҙемә нисек күренермен?!
Ғәрлегемдән тиргә батырмын да,
Үҙ тиремде үҙем һеңдерермен.
Көлөп тыуған саҡта яҙғы таңдар:
Күгүләндәр нурҙа йыуынғанда,
Бал ҡорттары кәрәҙ һылағанда,
Баҫыуҙарҙа башаҡ ем йыйғанда,
Йоҡлап ҡалһам, ҡалай үкенермен,
Ғәфү итә алмам үҙ-үҙемде.
Кешеләргә ҡыйып ҡарай алмам,
Көндән йәшерермен мин күҙемде.
Көҙҙәр еткәс, ергә көн килгәндә,
Комбайндар баҫыу иңләгәндә;
Бәрәкәткә тейенеп, көр күңелдәр
Муллыҡ, туҡлыҡ көйөн көйләгәндә,
Йоҡлап ятһам, нисек сыҙармын да,
Йәшәйем тип нисек әйтермен һуң?
Мин — бер киҫкә ул саҡ,
кәрәкһеҙ таш,
Йәнем ҡатҡан, тимәк, йөрәгем туң.
Өмөт тулы ҡышҡы һил таңдарҙа
(Сасҡауҙарҙан бер аҙ арынғанда):
Ап-аҡ ҡарҙан күҙҙәр сағылғанда,
Түлләгәндә малдар арандарҙа,
Йоҡлап ҡалһам,
ырыҫ урап үтер,

Яманатым сығыр ил телендә.
Иҫәпкә һан булып ҡалырмын тик,
Әсе төйөр йөрөр күңелемдә.
Беләм, таңдар һәр саҡ көлөп тыумаҫ,
Ойоҫҡотор буран, ямғыр ҡойор.
Ләкин таңдан торған кеше барыбер
Һәр иртәнең хозурлығын тойор,
Тойор!

*1989, 1992*

## Баҫыр әле саған ҡаршыбыҙға

Туҡ башаҡтар башын ергә эйһә,
Һары алһа саған япрағын,
Аңғар,
            ваҡыт юлын дауам итә —
Ҡапҡабыҙҙы шаҡый көҙ тағы.
Һөйөүеңдең нуры тоноҡланһа,
Ташлап китһә әгәр яҡының,
Тимәк, һинең күңел түрҙәреңә
Үрмәләне көҙҙөң һалҡыны.
Күҙҙәреңдең ҡоросо ҡайтһа бер саҡ,
Салланһалар сикә сәстәрең,
Аңғар,
            ваҡыт юлын дауам итә —
Был да ғүмер көҙөнөң эштәре.
Ләкин, көҙ тип, бик бойоҡма, дуҫҡай,
Йәшәр кәрәк әле теттереп.
Баҫыр әле саған ҡаршыбыҙға,
Индәренә яҙҙы күтәреп.

*1966, 1988*

## Ял туҙғытып килә ярһыу атым

Көткән сана юлы төштө бына,
Еләм һиңә ярһыу толпарҙа.
Ирендәрҙе рәхәт ҡытыҡлайҙар
Тейер-теймәҫ ирегән шул ҡарҙар...
Йүшәләрҙән
буйсан сауҡаларҙың
Һырғалары төшкән эйелеп.
Гүйә, һыу юлынан ҡыҙҙар ҡайта,
Көйәнтәгә парлап ҡаҙ элеп.
Ҡарһылыу ҙа, ахыры, туй көтәлер —
Аҡландарға йәйгән кейеҙен.
Ә Ҡыш бабай тауҙар ҡыҙыралыр,
Кейектәрҙең эҙләп һимеҙен.
Тракторҙар килә баҫыу иңләп,
Һуҙылып ҡала ап-аҡ бураҙна.
Өлгөр елдәр ошо эҙҙәр буйлап
Һырындылар һалыр бер аҙҙан.
Донъя йәмле, донъя гәмле бөгөн,
Күңел татый һөйөү һағышын.
(Һөйөү һағыштары татлы икән,
Әгәр көтһә алда ҡауышыу.)
Ял туҙғытып елә ярһыу атым,
Яҡынайтып беҙҙең араны.
Ҡышҡы юлдың көмөш туҙандары
Йондоҙҙарға оса таралып.

*1980, 1992*

## Бөрйәнем

Швейцария тиҙәр Бөрйәнемде
Һәм «икенсе» тип тә ҡуялар.
Ошо «икенсе»не ишеткәндә,
Йөрәгемдә дауыл ҡуҙғала.
Әле лә аҙ түгел тауҙарымда
«Швейцария» эҙләп йөрөгәндәр.
Берүк, заман, шундай әҙәмдәрҙе
Алыҫ йөрөт әле Бөрйәндән.
Мең йылдарҙы һалып баш аҫтына,
Тарих серем итә Шүлгәндә.
Ә ниндәйҙер ғилем әһелдәре
Капованы* эҙләп килгәндәр.
Бында — Бөрйән!
Әле уҡылмаған
Эпопея һәр бер һуҡмағы.
— Экзотика! — тимә,
шул тарихты
Булдыра алһаң, уҡы туҡталып.
Тауҙары таш түгел,
уҡмашҡандар
Әсе тирҙән,
ҡандан,
күҙ йәштән.
Монарланып ятҡан Юрматауҙың
Һәр киртләсе — изге бер кәштә.
Мәсем менән Баҙал күкрәгенә
Уйылып ҡалған Һәүбән эҙҙәре.
(Һуҡмаҡтағы һәр бер дағa эҙен
Мин үбергә әҙер теҙләнеп.)

---

*Атаҡлы Шүлгән мәмерйәһен «Капова пещера» тип йөрөтөүселәр бар.

«Швейцария» тиҙәр.
Юҡ, Бөрйән был —
Оло Уралымдан бер сатҡы.
Шул сатҡыны күрә алһа ғына
Ултыртыр ул түргә ҡунаҡты.

*1974, 1992*

## Донъя менән һөйләшеү

Донъя, донъя, ауыр һине аңлауҙары,
Уй-даръяның осон осҡа ялғауҙары.
Бер уйлаһаң, һин дә донъя, мин дә донъя,
Еңелме һуң һиңә мине аңлауҙары?
Яҙ, йәйең бар, көҙҙәрең бар, бар ҡыштарың,
Ә мин, Кеше — яҙ, йәй, көҙ ҙә, ҡыш та үҙем.
Бар һыуҙарың, тал-тирәгең, бар ҡоштарың,
Ә мин һыу ҙа, тал-тирәк тә, ҡош та үҙем.
Үткәнең дә, бөгөнгөң дә минең башта.
Киләсәгең — ул бит минең күрәсәгем.
Һин кисерер шатлыҡтар ҙа, хафалар ҙа —
Йыр-моң итеп йөрәгемә үрәсәгем.
Эй, һин, донъя, беләһеңме шуны,
юҡмы —
Кеше булыу тик донъяға килеү түгел.
Ә мин беләм, күреп торам, һиҙеп торам —
Донъя булыу алғайымға елеү түгел.
Керпек ҡаҡҡан арала ла мең төрләнеп,
Һин еләһең мәңгелеккә, мин осамын.
Ҡайһы ваҡыт минең күҙҙе һин асаһың,
Ә ҡайһы саҡ һинең күҙҙе мин асамын.
Һинең дә бит, минең кеүек, бөтмәй эшең.
Һинең дә бит ҡайһы ваҡыт күңел китек.

Әллә мине Кеше итеп һин күтәрҙең,
Әллә һине мин күтәрҙем Донъя итеп?

*1970, 1990*

## Ҡыңғырау сыңы

### 1

Нөгөш буйҡайҙары сағыл-сағыл,
Тай-тулаҡтар уйнай сағылда.
Сыңлап ҡына тора ҡыңғырауҙар...
Сәңгелдәктә ятҡан сағымдан
Ҡабатланмаç моңло бер йыр булып,
Ҡыңғырау сыңы һеңгән ҡаныма.
Ат ялына буйым еткән мәлдән,
Йүгәнемде тотоп ҡулыма,
Ат эҙләргә сыҡтым һәр таң һайын,
Ысыҡ ярып бүçкә билемдән.
Ҡыңғырауҙар сыңлай...
Әйтерһең дә,
Еңел һөйәк йәп-йәш килендәр,
Сылтыратып үрмес тәңкәләрен,
Өтә баçып һыуға баралар.
Әйтерһең дә,
хистәренә бирелеп,
Йыр башлаған береһе аранан.
Ҡыңғырауҙар сыңлай...
Йөрәгемдә
Бер шатлыҡ, бер һағыш тыуҙырып.
Ат эҙләйем туғай-тауҙар гиҙеп,
Уйым менән йылдар ҡыҙырып.

2

Атлы башҡорт күпме михнәт күргән,
Ниндәй өмөт булған йырында;
Ниндәй ниәт менән яуға сапҡан —
Һөйлә миңә, ҡыңғырау, барын да.
Тауҙан тауға елгән ата-бабам
Баҫмаҡлатып йылғыр йылдарҙы.
Ҡайһы тау һуҡмағы онотһон һуң
Уҡ-һаҙаҡлы яугир улдарҙы?!
Илем! Халҡым! Ирек!
Шунан башҡа
Нимә өсөн улар йән атһын?!
Арыҫландай ирҙәр йөрәгендә
Ниндәй теләк ҡандар ҡайнатһын?!
Алыҫ походтарҙа ял иткәндә,
Башҡорт улы йырҙар йырлаған.
Килер көнө, тормош тураһында
Төн йоҡламай уйҙар уйлаған.
Алыҫ ҡалған ескә билкәйенең
Моңло йыры һымаҡ иркәләп;
Улын көтә-көтә көтөк булған
Әсәләрҙәй теләп аҡ теләк,
Ҡыңғырауҙар һаман сыңлап торған...

3

Ут-һыуҙарҙы кисеп, ир-егеттәр
Яу яланын йыуып ҡан менән;
Ҡыуанысын аҡбуҙ толпар итеп,
Еңеп ҡайтҡас илгә дан менән,
Сағылдарҙа,
тауҙан тауға шаңдап,

Иртә-кисен бер моң сыңлаған:
Ҡурайҙарға ҡушылып,
ҡыңғырау шулай
Башҡортомдоң гимнын уйнаған.

4

Һаман елә заман...
Бер быуынға
Икенсеһе килә алмашҡа.
Ярышалар, көн-төн тырышалар
Береһенән-береһе ҡалмаҫҡа —
Геүләп тора Нөгөш туғайҙары...
Атлы халҡым бөгөн — ҡанатлы.
Беҙ ирекле хәҙер, тик һаман да
Ил яҙмышы өсөн яуаплы.
...Тракторҙар гөрләп ер һөрәләр,
Алда — шаулы һабан туйҙары.
Тик
ниңә һуң әле аттар менән
Ҡыңғырауға ҡайтты уйҙарым?

5

Туйға барған саҡта алдан елгән
Ат ҡынамы — аттың алтыны!
Аҙмы аттар
йылдар ауырлығын
Беҙҙең менән бергә татыны?!
Быуаттарҙы аша атлағанда
Аттар булды иң ҙур таяныс.
Яу ҡырында ауған арғымаҡтар,
Хәтерләүе һеҙҙе аяныс.

Бөгөн дә бит халҡым
ал-ял белмәй,
Ил ҡотайтҡан бөтә яҡтарҙа
Машиналар менән бер ҡатарҙан
Заман йөгөн тарта аттар ҙа.
...Иртә-кисен Нөгөш буйҙарында
Ҡыңғырауҙар сыңлай һаман да.
Ҡыңғырау сыңы, бишек йыры булып,
Һулҡ-һулҡ тибә йөрәк ҡанымда.

*1970, 1991*

## Ошо оло, изге исемдәргә

Сит ауылға барһам, кешеләре
Ҡаршы ала юрап, төҫмөрләп:
«Туҡта, кем был?
Әллә... хәҙер беләм —
Кемгә инер...» — тигән төҫлөрәк.
Һәр яңы ер — уҡылмаған шиғыр,
Ашыҡмайса барам урамдан.
Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына сәләм бирәм
Ҡарттар эргәһенән уҙғанда.
Улар, әллә танымаҡсы булып,
Теклəп-теклəп миңә ҡарайҙар.
Танымаҕас:
— Улым, ҡайһы ауыл,
Кем улы? — тип минән һорайҙар.
Ауылымды, атайымды әйтәм,
Ә ҡарттарым ниҙер хәтерләй.
Шунан әйтеп ҡуя бер генә һүҙ
Күңелемде әсир итерҙәй:

— Беләм! —
Өҫтәй:
— Һәйбәт кеше ине!
Унан китә: шундай... шул йылда...
Йәки бергә ут-һыуҙарҙы кискән,
Йә ултырҙаш булған табында.
...Ауылымды, ғәзиз атайымды
Ҡуйғаны юҡ бер кем яманға.
Ошо оло, изге исемдәргә
Минең исем дә бит ялғанған...

*1970, 1989*

## Түбәнлектән өҫтөн булайыҡ!

Күңел яҡын иткән кешең менән
Бер һөйләшеп ултырыу — бер ғүмер.
Тел әйтмәһә, ҡараштарың һөйләй
Янған йөрәктәрҙең бар серен.
Шуға ла бит
моңһоу минуттарҙа
Бер-беребеҙҙе эҙләп табабыҙ.
Хушлашҡанда һәр саҡ
ҡул ҡыҫышып,
Шундай фатихала ҡалабыҙ:
«Даръя кискән саҡта,
элеккесә,
Балаҡтарҙы төрөп тормайыҡ.
Түбәләрҙән аҫта булғанда ла,
Түбәнлектән өҫтөн булайыҡ!»

## Әйе, «тегеләр» беҙ

Атлауҙары еңел, күңелдә моң,
Һәр башаҡты ҡапшай күҙҙәрем.
Был бит минең
ут-билсәндәр йолҡоп,
Ҡул ҡанатып ҡайтҡан ерҙәрем.
Туҙанлы юл телгән ошо ялан
Таный микән һуң был «ағайҙы»?
Иҫләй микән
ялбыр ыштан кейгән,
Күн табанлы шыйтыҡ малайҙы?
Мин иҫләйем.
Юҡ-юҡ, беҙ иҫләйбеҙ
Йылдай көндө, ҡаҡы өйрәһен.
(Үҙе туйһа, күҙе туймай ҡалған
Малайҙарҙың мин тик берәүһе.)
«Тора алайыҡсы!» — тиҙәр баш өҫтөнән
Выжлап үтеп барған торналар.
Торамы ни ғүмер?..
Балалыҡ та
Йылдар монарына сорналған.
Теҙелешеп килә комбайндар,
Штурвалда кемдәр?
Сеү, туҡта!
Ниңә анау алдан килгәненең
Ауыҙҙары еткән ҡолаҡҡа?
— Һаумы-ы!
— Нихә-әл!
Был көр ир тауышы
Үҙе ят та, үҙе таныш та.
«Осраштылар. Һуң тегеләр бит», — тип
Шыбырлашты, гүйә, арыштар.

Эйе, «тегеләр» беҙ, ошо ерҙә
Йүгерә-йүгерә утау утаған.
Көнө буйы — билсән,
төндәрендә
Ярыша-ярыша йондоҙ һанаған.
«Тегеләр» беҙ —
ошо яландарҙан
Ризыҡ ейгән күндәм малайҙар
(Әҙәм рәтле донъя көтәйем тип,
Бил талдырмай бөгөн ҡайҙарҙа).
...Ҡайтып киләм.
Яланымдың бөгөн
Тыны иркен, тауыш көр икән.
Иренмәгән әҙәм алдарына
Ҡалас булып ятыр ер икән!

*1970, 1989*

## Үтмәһәм шул һуҡмаҡтарҙы

Ҡаяның ҡаҡ ҡабырғаһы —
Тик илектәр үтер һуҡмаҡ.
Йәбешә-шыуа барам шунан,
Романтик, имеш, ахмаҡ!
Аҫта Иҙел.
Айҡалмай ҙа,
Сайҡалмай ҙа, тып-тын ята.
Саҡ эләгеп ҡалам ҡай саҡ —
Арҡамда һалҡын тир ҡата.
Һәр таш еге йөҙгә бәрә
Мәңгелектең һалҡын тынын.
Йөрәктәрем өшөп ҡуя

(Үҙем генә беләм быны),
Шылдырған һайын аяҡты,
Ваҡ таш ҡубып, оса түбән.
Иҙел уны «суп-суп!» итеп
Йотоп ҡына ята, күрәм.
Шыуып китһәң,
таш ни, һин ни…
Сат йәбешәм таштарыма.
Йәнгә ҡалай яҡын улар,
Оҡшаш йөҙөк ҡаштарына
Һылыу ҡыҙ бармағындағы.
Илек йылғырлығы менән
Дауам итәм юлды тағы.
Был ҡаяны урап үткән
Оло юлдың барын беләм.
Үҙем һаман таш ектәрен
Ҡулым менән һанай киләм,
Сөнки, беләм, хушһынмаҫмын
Таулы-ташлы был яҡтарҙы;
Булмаһа илек һуҡмағы,
Үтмәһәм шул һуҡмаҡтарҙы.

*1966, 1990*

## Әйтер һүҙем

Шиғыр һөйләй сыҡһам сәхнәләргә,
Ҡаушап ҡалам. Зиһен тарҡала.
Берсә яныып манма тиргә төшәм,
Йә һалҡын тир сыға арҡанан.
Йөҙҙәр, күҙҙәр миңә төбәләләр,
Улар көтә, улар һынайҙар.
«Ҡиәфәте ниндәй, нисек баҫҡан,

Ни әйтер», — тип, ахыры, уйлайҙар.
Тәүәккәлләп, ярай, һүҙ башлайым,
Күңелемдә бары бер теләк:
Һүҙемде үҙ итеп, икеләнмәй,
Ҡабул итһә икән һәр йөрәк.

1

Ил әсәһе — инәй, апайҙарым,
Ил солтаны — бабай, ағайҙар,
Өлгөр, зирәк ҡыҙҙар, егеттәрем,
Ҡыҙыҡ көтөп торған малайҙар,
Ни һөйләйем икән мин һеҙгә,
Нимә яҡын һеҙҙең күңелгә?
Асайыммы әллә һеҙҙең алда
Саңлы, ҡанлы тарих биттәрен.
Ирек юлындағы ҡара упҡын —
Һарайҙарҙың ватып биктәрен,
Тиргә мансып аҫау айғырҙарын,
Ир-егеттәр яуға сапҡанын;
Батша, баяр, кантон-маҙарын
Гүргә тығып, илгә ҡайтҡанын
Һөйләйемме һеҙгә?
Улай тиһәң,
Яңы булмаҫ төҫлө һүҙҙәрем.
Күреп белеүселәр һирәк тә,
Уҡып белә күптәр үҙҙәре.
Ас, ялангас илде туйҙырам тип,
Бөтәйтәм тип, атай, әсәйҙәр,
Елкә сейләндереп, ус ҡабартып,
Һөйрәгәнен бөтә Рәсәйҙе
Заводтарға, шахталарға табан,
Ҙур телемле баҫыу юлына;

Муллыҡ һеңгән саҡты
эшсе менән
Крәҫтиәндең ҡатҡыл ҡулына
Һөйләр инем...
Ҡот-бәрәкәт килгәс ил-йортҡа,
Кинәнгәндә иркен тормошҡа;
Бабай булғас теге ағайҙар,
Олатай булған теге бабайҙар,
Донъя йөгө бөккән өләсәйҙәр,
Көн-төн бил яҙмаған әсәйҙәр,
Килен йомшап,
йомшаҡ түрендә
Ҡәҙер-хөрмәт күрер көнөндә,
Көпә-көндөҙ күктәр күкрәүен,
Яу һөрөмө илде япҡанын,
Ил тотҡаһы — бабай, ағайҙарҙың
Иңдәренә мылтыҡ аҫҡанын;
Йәш ҡыҙҙарҙың шинель кейгәнен,
Малайҙарҙың һабан һөргәнен,
Аттай егелеп эшләп йөрөгән
Әсәй-өләсәйҙәрҙең күргәнен
Һөйләр инем...
Тик кәрәкмәҫ кеүек,
Урынһыҙҙар кеүек һүҙҙәрем.
Ул заманды әллә
залдағылар
Оноткан тиһеңме үҙҙәре?!

2

Юҡ, һөйләйем әле мин һеҙгә
Үҙебеҙҙең быуын турында.
Йәнебеҙҙән яҡын еребеҙҙең
Яҙмышы бит уның ҡулында.

Ярты донъя иген иккәндә,
Ә яртыһы яуға киткәндә,
Ергә килгән быуын — беҙ инек,
Ҙур ауыҙ ҙа ике күҙ инек.
Ерем, әсәм, ҡарағыҙсы, бөгөн
Күпме йөктәр беҙҙең елкәлә.
Ерем, әсәм, теләгеҙсе аҡ юл,
Ҡаршы алмай юлдар иркәләп...
Арбадромлы илде аэродромлы
Иткән кеүек өлкән быуындар,
Беҙ бит уны космодромлы иттек,
— Даешь, — тибеҙ, — сикһеҙ йыһанды!
Йәштәштәрем, ҡарағыҙсы, беҙҙең
Яурындарға йыһан таяна.
Бер һелкетеп ҡуйһаҡ ҡулбашты,
Күктә күпме йондоҙ уяна...
Ә йәштәшем һаман уйлана.
Уйланмаҫлыҡмы ни —
Ер яна.
Һаҡ бул, йәштәш,
һаҡ бул, замана,
Тере
ҡан көҫәүсе диуана
Илдән илгә йөрөй бөгөн дә
Ҡулына тотоп утлы торонбаш.
Илдәренән яҙып,
ғазап сигеп
Һәләк була күпме ғәзиз баш.
Океандар аша оран һалам:
Эй, йәштәштәр — Ерем улдары,
Бөтәбеҙ бер булып,
шаҡарайыҡ
Шул иблистең имәнес ҡулдарын!

3

Йөҙҙәр, күҙҙәр миңә төбәлгәндәр,
Улар көтә, улар һынайҙар:
Ҡиәфәте ниндәй, нисек баҫҡан,
Ни әйтер тип, ахыры, уйлайҙар.
Ил әсәһе — инәй, апайҙарым,
Ил солтаны — бабай, ағайҙар;
Өлгөр, зирәк ҡыҙҙар, егеттәрем,
Ҡыҙыҡ көтөп торған малайҙар,
Һеҙгә әйтер һүҙем тик шул ғына:
Талмаҫ булһын һәр саҡ ҡулығыҙ!
Һуңғы бомба юҡ ителгәнгәсә,
Һәр берегеҙ уяу булығыҙ!

*1966, 1990*

## Моңһоу саҡта йәнем

Кискән саҡта Нөгөш шаршыларын,
Тая-тая баҫтым таштарға.
Йоҡо төҫө тағы күрмәм инде —
Уйҙар осто тыуған яҡтарға.
Мундай буйы кәкүк моңдарына
Сумған микән әле бөгөн дә.
Күкһел тауҙар алыҫ ҡалһа ла бит,
Йыр-моң булып йәшәй күңелдә.
Моңһоу саҡта йәнем тыуған яҡтың
Ҡуйынына ҡайтып һыйына.
Юшҡындарын йыуып,
шунда ғына
Өмөт, сафлыҡ менән туйына.

*1977, 1986*

## Ғүмер йомғағымды тағатып...

Һыулауына елгән боландай,
Ауылыма ҡайтам йөрәкһеп.
Тының менән тартып алырҙай,
Йән иретер ниндәй төйәк һин?!
Тау һырттары буйлап һуҙылған
Бала саҡтың офоҡ сиктәре.
Байтаҡ инде, байтаҡ үткәнгә
Шул шаршауҙың өҙөп ептәрен.
Эшләр эшем, үтер юлдарым
Ҡайһы тошҡа барып етһә лә,
Байҡар офоғомдоң сиктәре
Ниндәй һырттар аша үтһә лә,
Онотмамын: улар башланған
Тыуған өйҙән, тыуған тупһанан.
Ғүмер йомғағымды тағатып,
Ғәзиз тупһам ятыр уртала.

*1963, 1988*

## Ауыл остарында зыяраттар...

Ауыл остарында зыяраттар,
Үткән һайын шулар янынан,
Мин мең тапҡыр был донъянан китәм,
Һәм мең тапҡыр тыуам яңынан.
Әруахтар  рухы алдында гел
Мең гәйепле тойоп үҙемде,
Мин башымды түбән эйеп үтәм,
Күтәрергә ҡыймай күҙемде.
Кемдәрҙеңдер
үҙе генә белгән

Хәсрәттәре, беләм, булғандыр.
Йән дауаһы тапмай, эстән һыҙып,
Яна-көйә донъя ҡуйғандыр...
Ваҡытында килеп бер йылы һүҙ
Әйтә алмай ҡалдым, һуңланым.
Янығыҙҙан үткән һайын шуға
Баҫа алмам выждан дулауын.
Ауылым остарында зыяраттар...

*1984, 1992*

## Рәшит Ниғмәти ҡәбере янында

Ергә ҡарап күҙ шәмәрткән болоттар.
Күңел бойоҡ,
Торам ойоп,
Батып ҡайғыға.
Етем ҡалған балаларҙай, ағастар,
Өңшәйешеп,
Бөршәйешеп,
Балауыҙ һыға.
Ҡапыл ярып күктә болот тауҙарын,
Йәмләндереп,
Йәнләндереп,
Ҡояш күренде.
Юҡ, был һинең шиғырҙарың, йырҙарың
Эркелешеп, теҙелешеп
Телемә килде.

*1966*

## Тиҫтерҙәрҙең арабыҙҙан...

*Шағир һәм журналист*
*Ғәли Ильясов иҫтәлегенә*

Шаулы Өфө урамынан
Барғанда шәп-шәп атлап,
Ҡапыл ғына күреп ҡалдым:
Ғәли килә бит ялтлап!
— Һаумы! — тип ҡул һуҙғас ҡына,
Аңғарҙым: бүтән егет!
Иҫемә төштө ҡылт итеп:
Ғәли күптән үлде бит!
Асҡан ауыҙ асыҡ ҡалды,
Һалынып та төштө ҡул.
Тиҫтерҙәрҙең арабыҙҙан
Китеүе, ай, ауыр шул...

## Баҡһаң, ул да минең кеүек...

*Филология фәндәре кандидаты*
*М. Минһажетдинов иҫтәлегенә*

Бер-беребеҙҙе күптән белдек,
Күп тапҡырҙар осраштыҡ.
Ауыҙ асып һөйләшмәнек,
Тик күҙгә-күҙ ҡараштыҡ.

Ҙур дәрәжә, олпат буй-һын,
Пәйғәмбәрҙәр ише бит!
Һүҙ ҡушырға ҡыйманым шул,
Мин — бәләкәй кеше бит.

Бер саҡ ишеттем бер хәбәр:
«Ул нишләп эре икән?»
...Баҡһаң, үҙе минең кеүек
Ябайҙарҙың бере икән.

## Үҙең һаман йөрөйһөңдөр төҫлө...

*Мөхтәр Сәғитов иҫтәлегенә*

Һин халҡыңдың ижад хазинаһын
Берәм-берәм күҙҙән кисереп,
Аҫыл өлгөләрҙе өрөп-һөртөп,
Хәтер китабыңа күсереп,
Һаман юлда, аҫыл уйҙа булдың,
Армыттарын илдең айҡаның.
Ил-йортоңдоң тәрән тамырҙарын
Бөгөнгөнән ҡарап байҡаның.
...Һинең йыйған хазиналар, ана,
Йымылдашып ята нур сәсеп.
Үҙең һаман йөрөйһөңдөр төҫлө
Нурҙар йыйып, нурҙар өләшеп...

## Әйтеп ҡуйҙың...

*Яҙыусы Үзбәк Сирбаев иҫтәлегенә*

Мин Бөрйәндә ҡая бүләк иткәс,
Сабыйҙарса ихлас ҡыуандың.
Ә аҙаҡтан, шул ҡаяға ҡарап,
Оҙаҡ ҡына торҙоң, уйландың.

Әйтеп ҡуйҙың:
«Ҡая мәңгелек бит,
Беҙҙең ғүмер — иҫкән ел генә.
Ҡай тарафтан урап, ҡасан, ҡайҙа
Баҫылырын уның кем белә?
Ярай ҙа бит,
                япраҡ еле булып,
Шул ҡаяға ҡағылып үтә(а)лһам.
Ҡаҡ ҡаяла үҫкән ҡайындарҙың
Бөрөләрен асып китә(а)лһам...»

## Көн йөҙөндә көлтә нур һүнде

*Шағир һәм ғалим*
*Вафа Әхмәҙиев иҫтәлегенә*

Съезға* тип килдем ҡанатланып,
Дуҫ-иштәрҙе килдем күрәм тип.
Төҫ ташламаҫ ғәзиз Өфөмдөң
Ҡараштары ниңә һүрән тик?
Ниңә икән, осраған берәһе
Күҙҙәремә тура ҡарамай?..
Солтангәрәй әйтте шыбырҙап:
«Вафа китте беҙҙең аранан».
...Баш осонда торҙоҡ Бикбай менән,
Ауыр уйҙар баҫты иңдәрҙән.
Ниңә әжәл иртә ҡул һала һуң
Һинең кеүек аҫыл ирҙәргә?
Илгә әйтер күпме һүҙең ҡалды —

---

*Съезға — *1983 йылдың октябрендә, Башҡортостан яҙыусыларының IX съезы алдынан, Вафа Әхмәҙиев вафат булды.*

Дуҫтарыңдың күңел дауаһы.
Тау юлына бергә сыҡҡайныҡ бит,
Һинһеҙ генә хәҙер бараһы.
...Өфө йүкәләре япраҡ ҡойҙо,
Көн йөҙөндә көлтә нур һүнде.
Балаларың, ҡатының ғына түгел,
Беҙ ҙә йәтим ҡалдыҡ ул көндө.

*1983*

## Әҙәп барҙа — иман бар

Рәхмәт, һылыу!
Йыш-йыш ҡына осрап,
Ҡыйып үтһәң дә һин юлымды,
Һис үпкәм юҡ —
күнәктәрең тулы —
Йөрөгән ерҙәремдә мин уңдым.

* * *

Буш күнәкле ҡыҙый,
оялып ҡына,
Көтөп тора минең үткәнде.
Рәхмәт уға!
Әҙәп тигән нәмә
Әсә һөтө менән һеңгәндер.

* * *

Килде замана: ирҙәр ҙә
Оҫтарҙы һөйләп ғәйбәт.

Бисәгә лә, ирҙәргә лә
Һәйбәт түгел был ғәҙәт.

* * *

Осрашҡанда, ҡыуанам тип,
Шарылдама, ҡуйсәле.
Ихлас булһаң, ипләп күреш,
Ипле һүҙең ҡушсәле.

* * *

Һаулыҡ һорашмай,
алмай ҙа,
Уҙа, хатта ҡарамай ҙа.
Кешеләр әйтә: «Бахырың,
Ауырыйҙыр был, ахыры».

* * *

Кешеләрҙән саҡ ҡына ла тартынмайса,
Ауыҙыңды арандай асаһың да,
Ҡалтыранып, сайҡай-сайҡай башыңды,
Иҫнәйһең һин көллө ғәм араһында.
Ауыҙыңа, боронғолар әйткәнсә,
Шайтан инмәҫ, уныһынан һин ҡурҡма.
Ояла белмәү үҙе шайтандан яман,
Ана шуны бер ҡасан да онотма.

* * *

Ата-әсә һүҙе булмаҫ яманға,
Ҡаштарыңды төймәй генә тыңлап тор.

Аша атлап сыҡмаҫ борон тупһаңды,
Ҡайҙа нисек баҫырыңды уйлап тор.

* * *

Кесе һүҙен тыңлап бөт,
Оло һүҙен бүлдермә.
Уйламайса һүҙ әйтеп,
Берүк кеше көлдөрмә.

* * *

Һынсыл кеше күп күрер,
Күрер ҙә эскә йомор.
Күргән берен һөйләүсенең
Исеме «һөмһөҙ» булыр.

* * *

«Кеше күңеле — ҡара урман» да,
Гел ҡараға юрама.
Күңелемде белгең килһә,
Һин кешенән һорама.

* * *

Олпатлыҡты күрһәтмәй
Мәжлестә түрҙә булыу.
Ил алдында күтәрә
Илгә изгелек ҡылыу.

*1985, 1992*

## Айырылһам һинән...

Йым-йым уйнап ҡояш нурҙарында,
Ҡар һыуҙары сылтырап аҡҡанда;
Тулҡын-тулҡын килеп хис ташҡыны
Күңел ярҙарына ҡаҡҡанда,
Яҙҙарыңды күреп һис туйманым,
Һис туймамын, тыуған яҡҡайым.
Ҡабат-ҡабат ҡайтам йәшлегемә,
Һутҡа тулышҡанда аҡ ҡайын.
Болондарҙа салғы сыңлатҡанда,
Тос бөртөктәр емгә тулғанда;
Урман төпкөлөндә япраҡтарға
Ашҡан ҡорттоң* балы тамғанда,
Йәйҙәреңде күреп һис туйманым,
Һис туймамын, тыуған ергенәм.
Боҙло океандарҙы кисер инем
Һине күрер өсөн бер генә.
Салт ҡояшлы көндәр,
айлы төндәр
Алтын ялын сайҡап елгәндә,
Ишекте шар асып,
хужаларса,
Тупһаларҙан муллыҡ ингәндә,
Көҙҙәреңде күреп һис туйманым,
Һис туймамын, ғәзиз бишегем.
Мәңге һине данлар, һине йырлар,
Һиңә генә ғашиҡ кеше мин.
Иртә-кисен йомшаҡ бурандарҙа

---

*Ашҡан ҡорт — *ағас ҡыуышына ҡунған (солоҡ-ҡа түгел) күс. Бал уңған йылдарҙа, ағас ауышыраҡ та булһа, ҡыуышлыҡ тулып, балы аҫҡа тамып тора.*

Алһыуланып биттәр янғанда,
Өмөт нуры һибеп күңелдәргә,
Бурап-бурап ҡарҙар яуғанда,
Ҡыштарыңды күреп һис туйманым,
Һис туймамын, тыуған яҡҡынам.
Йоҡоларҙан яҙам, толҡа тапмай,
Айырылһам һинән саҡ ҡына.

*1984, 1992*

## Кескәй ауыл оло илдең...

Уйҙар менән кире ҡайтһам
Бала сағыма,
Аҙмы алһыу иҫтәлектәр
Күҙгә салына:
Ана ғына, итәк менән
Балыҡ һөҙгәнем.
Чапай булып, һыңар ҡуллап,
Һыуҙа йөҙгәнем.
Дошман яуы — кесерткәнлек
Алғанда ҡамап,
Мин инем ағас ҡылыслы
Баһадир һалдат.
Ялан аяҡ йүгерә-йүгерә
Йыйҙыҡ ҡаҡылар.
(Телемдә бит шул үләндең·
Һаман таты бар.)
Һарына, ҡымыҙлыҡ эҙләнек
Тауҙар ҡыҙырып.
Түҙҙек,
шырлыҡ бит-ҡулдарҙы
Бөтһә һыҙырып.

Мәңге шулай ҡалыр һымаҡ
Ине бала саҡ.
Мәңге шулай ҡалыр һымаҡ
Ине тыуған яҡ.
Күпме генә юл үтелгән,
Артҡа әйләнһәм.
Ә шулай ҙа тыуған ауылым
Ниндәй үҙгәргән.
Йәнле өйҙән
өй урыны
Күберәк ине.
Хәҙер өр-яңы урамдар
Ҡаршылай мине.
Малдары көр,
игендәре
Туҡ башаҡлылар.
Ҡулдар тилбер,
ә күңелдәр
Әйҙәй яҡшыға.
«Иш янына — ҡуш!» — тип тибә
Һәр кем йөрәге.
Кескәй ауыл —
оло илдең
Арҡа терәге.

*1966, 1990*

## «Онотмағы-ы-ыҙ!»

Станцияла маневр паровозы
Эй ҡысҡырта, төндө тертләтеп.
Ошо паровоздың ҡысҡыртыуы
Йөрәгемде ҡалай тетрәтте.

Һызғырышып елә электровоздар,
Йылт-йылт итеп ҡала уттары.
Тик паровоз
йылдар төпкөлөнән
Саҡыра, ахыры,
көтә дуҫтарын.
Йылдар төпкөлөнән һөрән килә:
«Онотмағы-ы-ыҙ!»
Юҡ-юҡ, онотмам.
Тарих ғәфү итмәҫ, әгәр ҙә мин
Был һөрәнде бөгөн онотһам.
Был һөрәндә —
уҙған йылдар шауы,
Бөйөк еңеүҙәрҙең ялтлауы;
Миллиондарҙың бүленеп ҡалған йыры,
Дары еҫе, туптар шартлауы.
...Һызғырышып елә электровоздар,
Рельс һығып үтә составтар.
«Онотмағы-ы-ыҙ!» тигән һөрән килә
Вагондарға эйәреп йыраҡтан.

*1970, 1989*

## Ағиҙелдә боҙ киткәндә

Ҡыштыр-ҡыштыр бәрелеп ҡаяларға,
Аҡтарылып боҙҙар аҡҡанда
Баҙап ҡалдым,
әллә ни юғалтып,
Әллә ниҙәр ҡапыл тапҡандай...
Ҡыуыша-ҡыуыша аҡты айҙар, йылдар,
Ниҙәр килеп, ниҙәр китмәне...
Йөрәк аша үткән минуттарҙың

Береһе лә эҙһеҙ үтмәне.
Ҡыуаныстар булды,
онотолоп,
Тай-тулаҡтар кеүек туларлыҡ.
Тик шатлыҡтар ҡыҫҡа ғүмерле шул,
Баҫты һағыш —
өнһөҙ иларлыҡ.
«Һуңынан» тип күпме эштәремде
Ҡалдырҙым мин ошо ярҙарҙа.
Ҡала барҙы, онотолдо улар
Ҡатлам-ҡатлам туңған боҙҙарҙай.
...Ҡыштыр-ҡыштыр бәрелеп ҡаяларға,
Аҡтарылып боҙҙар аҡҡанда
Баҙап ҡалдым,
әллә ни юғалтып,
Әллә ниҙәр ҡапыл тапҡандай...

*1984, 1992*

## Тик усаҡтар ғына

Яҙ ҡаршылай тағы тыуған ауылым,
Һыпыра-һыпыра маңлай тирҙәрен.
Колоннаға баҫҡан һалдаттарҙай,
Сабыр ғына тора өйҙәре.
Ауылдаштар бөгөн нур телендә,
Йыр телендә генә һөйләшә.
Ҡаҙан аҫтарында усаҡ яна,
Ә ҡар һыуы тора йәнәшә.
Йәш килендәр ҡаға торонбашты,
Сәсрәп-сәсрәп китә осҡондар.
(Тыуған йорттоң изге усаҡтарын
Дөрләтһендәр һәр саҡ был ҡулдар.)

Татыу тормош өйгә хужа булһын,
Яҙ ашыҡһын үҙенең юлынан.
Тик усаҡтар...
Тик усаҡтар ғына
Ҡалмаһындар толдар ҡулына.

*1965, 1991*

## Була көндәр...

Була көндәр:
Күңел таңдан
Йырлап уяна.
Ғәжәп бер ни ҙә юҡ кеүек,
Ә ул нурлана.
Һыҙылып сыға йөрәктән
Иң аҫыл көйҙәр.
(Йөрәктән моң һыҙылғанда
Кәрәкмәй һүҙҙәр.)
Ундай көндө йөҙөң асыҡ,
Эштәрең ырай.
Күңел күҙең бөтәһен дә
Яҡшыға юрай.
Була көндәр:
Күңел таңдан
Болоҡһоп тора.
Сәбәбеме?
Йә, һин уны
Аңлатып ҡара.
Ундай көндө йөрәк һыҙлай,
Һыҡтай күңелең.
Кемдәр кисергән —
беләлер
Еңел түгелен.

...Күңелдең дә барҙыр, ахыры,
Үҙ булмыштары:
Барҙыр моңайыр саҡтары,
Һайрар ҡоштары...

*1982, 1990*

## Иҫкәртәлер йылдар килеше лә...

Ҡышҡа ҡарап килмәй хәҙер йәйҙәр,
Миҙгел түгел, һәр көн үҙенсә.
Кистән
 баҙрап йондоҙҙары янһа,
Ҡойоп ямғыр яуа иртәнсәк.
«Былтыр был ваҡытта...» тигән сама
Тура килмәй хәҙер самаға,
Хатта арба егеп торғанда ла
Күҙ һалмайса булмай санаға.
...Һәр миҙгелдә беҙҙең эш етәһе,
Уй-ниәттәр тағы ҙурыраҡ.
Иҫкәртәлер йылдар килеше лә:
«Сосораҡ бул, Кешем, сосораҡ!»

*1985*

## Шыршыҡайым

Энәләрең дә ҡойолған,
Ботаҡтарың һынған.
Сүплектәрҙә ятаһың һин,
Тик ҡаҡ һөлдәң ҡалған.

Донъяла яҙ тантанаһы —
Бөтә нәмә көлә.
Урманда, шыршы төбөндә
Морон төртә үлән.
Тик һин генә мәхрүм, мәхрүм
Йәндән, йәмдән, наҙҙан.
Күрһәң ине, ана, ҡалай
Гөрләп килә яҙҙар…
…Бар ине бит, бар ине бит
Ҡәҙерле саҡ һинең:
Ҡупшы залдарҙың түрендә
Ялтлап тора инең.
Әйләнәңдә күбәләктәй
Өйөрөлдө парҙар.
Хистәр ташты,
вәғәҙәләште
Мәңге һөйөр йәрҙәр.
…Һинең урман ҡосағында
Яҙ ҡаршылар сағың.
Күргән һайын һине, күпме
Йәнем әсер тағы…

*1964, 1992*

## «Булды!»

*Хирург Рәхим Вәлиуллинға*

— Эй Хоҙайым, үлә инде,
Күҙен дә асмай, ҡара әле!
— Туҡта-туҡта, шыңшымай тор,
Бында Рәхим бар әле,

Күрһәтәйек!
...Күрһәттеләр,
Уйға ҡалып ултырҙы.
«Тәүәккәлләр кәрәк!» — тине.
Күңелдәрҙе тултырҙы!
...Онотолдо шахмат, балыҡ —
Ял булманы булмағас...
Тағы бер нур һүнер ерҙә,
Әҙерәк кенә һуңлаһаң.
«Алыш та бар, биреш тә бар!» —
Скальпель ҡулда инде.
Рәхимме, Ғазраилмы —
Башҡа юл юҡ: «Кем — кемде?!»
Бер һүҙҙән ер шартлар төҫлө —
Тын да алмай ултырҙыҡ.
Рәхим сыҡты: «Булды!» — тине, —
Күңелдәрҙе тултырҙы!

*1987*

## Төш

*Әҙәбиәт уҡытыусыһы*
*Лира Яҡшыбаеваға*

Йәйге баҡса. Шыйыҡ томан.
Бер өйҙә ултырабыҙ.
Нимәгәлер әҙерләнеп,
Китаптар аҡтарабыҙ.
Арабыҙҙа — ҡара ҡатын
(Ултыра шунда һүҙ тыңлап).
Әллә таң был, әллә кис был —
Уттар күренә йымылдап.

Өйҙән сыҡтыҡ,
ыңғайланыҡ
Икебеҙ ике яҡҡа:
Һин — урманға, мин — тауҙарға
Баҡса артында ятҡан.
Өндәгесә, теләп ҡалдым:
— Уңһын беруҡ юлдарың!
Илеңә, халҡыңа тарат
Йөрәгең ялҡындарын!

*1991*

## Төнгө аҡланда

*Ҡәләмдәшем Сабир Шәриповҡа*

Ҡаҡҡыла әле, Сабир, усаҡ утын,
Тигеҙ генә янһын, ҡуҙы төшһөн.
Бер шартына килгәс, килһен әйҙә:
Тәмле булып беҙҙең ҡурҙаҡ бешһен.
Көҙгө төн дә шулай булыр икән —
Йондоҙҙары ҡалай баҙрап яна.
Хозурланып ошо гүзәллеккә,
Ултырабыҙ һүҙҙе һүҙгә ялғап.
Ниҙән генә һүҙҙе башлаһаҡ та,
Уй-ниәттәр беҙҙең гел бер сама.
Булмыштарға ҡарап,
дәрт тә, сәм дә
Үҙебеҙгә күрә, тим, тап-таман.
Ижад халҡын талант, талантһыҙға
Бүлеп сығыу түгел һис эшебеҙ,
Ә шулай ҙа ғәҙелдәрҙән-ғәҙел
Бизмәндәргә һалыныр заттан бит беҙ.

Дәрт тә, дарман да бар саҡта, тимен,
Күкрәкләйек тиҙерәк кәбәндәрҙе —
Ҡайһы ғына заман үҙ итһен һуң
Илке-һалҡы йөрөгән әҙәмдәрҙе?!

*1986, 1992*

## Иҫәнһеңдер, тимен...

*Зөфәр Вәлитовҡа*

Бормасала бер ус ручка тора,
Берәм-берәм алып ҡарайым.
Ҡаралары кипкән. Ете төн бит,
Ни әмәлен инде табайым
Хат-сәләмем ослап ҡуйыр өсөн?..
...Туҡта-туҡта, анау кәштәлә
Тағы берәү ята түгелме һуң?
Ҡалдырғайның онотоп, иҫтә(ә)ле.
Һин киткәне бирле уны бер кем
Тотҡаны юҡ ине, ҡайҙа(ә)ле:
Ҡулға алдым, ҡағыҙыма һыҙҙым,
Бына бит, әй, һаман яҙа(ә)ле.
Инде күптән эҙе-юлы юҡ тип,
Көйрәп-көйрәп йөрөгән сағымда,
Ручкаң яҙғас, әй ҡыуанып киттем,
Осратҡандай, ҡулың ҡыҫҡандай.
...Әй тынғыһыҙ заман, аҙым һайын
Хәүеф-хәтәр, иҫең китмәле!
Кисерә күр берүк, күренмәгәс,
Әллә ниҙәр уйлап бөткәйнем,
Иҫәнһеңдер тимен, кисерә күр...

*1994*

# Инсебикә

(Поэма-баллада)

Бөрйән районындағы Яңы һәм Иҫке Собханғол ауылдары араһында, Ағиҙел буйында, бер хәтәр ҡая бар. Уны «Инсебикә ҡаяһы» йәки «Инсебикә ташы» тип йөрөтәләр. Легендала һөйләнелеүенсә, Яңы Собханғол (Янһары) ауылынан Инсебикә исемле йәш ҡатын, көнсөл һәм ҡанһыҙ иренән ҡасып китеп, ошо ҡая башына килеп ултыра һәм, иренең ҡамсы тотоп ҡаяға менеп килгәнен күреп, Ағиҙелгә ташланып һәләк була.

1

— Булды, бабай!
— Туҡта, ҡабаланма,
Бынау яҫмарҙы* ла ал әле;
Шуны ныҡлап тапа.
Бына тағы
Ос сыбығын алып һал әле.
Йәтешләп һал.
Кәбәнеңдең башын
Елдәр осорорлоҡ булмаһын.
Ваҡыт әрәм итеп,
ҡабат-ҡабат
Килеп ыҙаларға ҡалмаһын!
Бөтәһе лә булды.

---

*Яҫмар — *бер күтәрем бесән.*

Мин бил яҙып,
Ҡаш өҫтөнә ҡуйҙым ҡулымды:
Тонйорап та ҡояш батып бара,
Киске тынлыҡ биләй болондо.
Төштөм.
Тирле елкә, арҡаларҙы
Әсеттерә бесән әүрәүе.
Ҡалай рәхәт шул саҡ,
түгә-түгә
Әсе айран эсеп ебәреү.
— Ҡайтабыҙмы, бабай?
— Йөрөмәбеҙ,
Ат утлаһын төнгө һалҡында.
Йонсоп китте хайуан,
эш үткәндер,
Юл да түгел бигүк яҡындан.
Иртән иртә менән ана теге
Ялан ситен һелтәп ҡайтырбыҙ.
Атты тышап киләм,
сәй йәһәтлә,
Бер аҙ тамаҡ ялғап ятырбыҙ.
...Сөрөк киҫкә быҫҡып серәкәй ҡыуа,
Беҙ ҡыуышта — йәйге йәннәттә.
Ат бышҡырып ҡуя,
ҡыңғырау сыңлай,
Салҡан ятып йөҙә ай күктә.
Кипкән үлән тешләп һаман ятам,
Инсебикә-ташта — ҡарашым.
Нисәнсе ҡат инде уҡталамын
Беләйем тип шуны һорашып.
— Бабай!
— Нишләй?
— Ысын булды микән,

Имеш, ошо бейек ҡаянан
Ҡасандыр бер,
ну, бик элек инде,
Инсебикә һыуға ырғыған?
— Аһ-аһ!
Ысын булмай,
Өләсәйем
Һаман һөйләр ине, бахырың,
Юллай барып осона сығыр ине,
Ғәжәп бит ул әҙәм тамыры.
Сығышы менән беҙҙең ауыл бит ул,
Сая ҡыҙҙар булған элек тә.
Һаман да шул гәҙелһеҙлек инде —
Тиккә осмай тауҙан кейек тә...
Әкрен генә бабай һөйләп бирә,
Баҫа алмай әрнеү тойғоһон.
Сал тарихтың мүкле төпкөлөнән
Инсебикә ҡарай бойоғоп.
Бабай тынды.
Ахыры, ойоп китте,
Тик мин генә оҙаҡ уйландым.
Ә иртәнсәк, гәжәп бер төш күреп,
Иләҫләнеп килеп уяндым.

2

Өндәгесә, имеш, мин йүгерҙем
Һыу инергә Иҙел буйына.
— Йәһәтерәк йөрө, — тине бабай, —
Ату һаман һуңға ҡалына.
Килеп етер-етмәҫ, төрлө яҡҡа
Атып бәреп тирле кейемде,
Дыуамал-ярһыу менән төшөп киттем

Шомборҙатып кисеп Иҙелде.
Эре-эре, ҡырлы-ҡырлы таштар
Ҡалай тайғаҡ, яра табанды.
Бына тағы, ҡәһәр һуҡһын икән,
Оло ташҡа килеп абындым.
— Әлә-ә-әй! — тип ҡалды таш,
Бына хикмәт,
Йәне була микән таштың да?..
Күҙ һалғайным, йым-йым итеп ята
Бер ап-аҡ таш аяҡ аҫтымда.
Һыу өҫтөндә киске шәфәҡ уйнай,
Әйтерһең дә, ялҡын ҡабынған.
Һәрмәләнеп, теге ғәжәп ташты
Мин күтәреп алдым яй ғына.
Аһ-аһ!!!
Һыу өҫтөнә сыҡҡас,
Таш тигәне-ем...
— Кем һин, һылыуым?
(Өнөммө был, төшмө,
Мөмкин микән
Ерҙә быныдай хәлдең булыуы?!)
Бер ҡыҙ икән дә ул.
Эй, егеттә-ә-әр!!!
Ҡарап ҡапыл күҙһеҙ ҡалырһың,
Ҡосағында ireп юғалырһың,
Ғәзиз йәнкәйеңдән яҙырһың!
— Әйтсе, һылыуым, һин кем?
— Инсебикә!
— Китсе! Инсебикә — ҡая ул!
— Ҡая?!
— Эйе, ана!
— А-а-ай!!!
Иҫтән яҙҙы...

(Йөрәккәйем, был ни, сабыр бул!)
Алып сыҡтым уны яр башына,
Ҡоро ергә һалдым һаҡ ҡына.
Ярай, ятып торһон,
мин дә бер аҙ
Хәл алайым, тәндәр һыныҡҡан.
Ләкин өлгөрмәнем ултырырға,
Эргәләге өйкөм таллыҡта
Хәбәр һалды ҡоштар:
— Инсебикә тере!!!
Ҡапыл шул тауыштан
Бар әйләнә-тирә
Һиҫкәнеп уянды.
Бар туғай үләне
Күҙенә йәш алды.
Гөлдәр тажын йомдо,
Белмәйем, ниңәлер.
Тымыҡ ел әллә ни
Һораны инәлеп.
Инсебикә-таштан
Үрелеп ай баҡты.
Ә Иҙел, буҫығып,
Илай-илай аҡты...

3

Ҡыйып ҡулға алғайным да
Ҡыҙҙың сәс толомдарын,
— Ебәр! — тине, һикереп торҙо,
Ҡалманы быуындарым.
— Һеңлем, һеңлем!
— Нимә, һеңлең?!
Ут сәсте ҡара күҙҙәр.

Бер ҡыҙға, бер ергә баҡтым,
Ярҙам көткәндәй ерҙән.
...Инсебикә ҡапыл миңә
Ҡараны ла тултырып,
Эйелеп ҡаплаған булды
Яланғас аяҡтарын.
Яулығын эҙләне микән,
Һәрмәне башын, битен.
(Ҡарап торам был хәлдәргә
Аптырап, иҫем китеп.)
Башын ҡалҡытмай һүҙ ҡушты:
— Һин кем, егет, ҡайһы ырыу?
Әллә берәй мосафирмы
Донъя гиҙгән ҡаңғырып?
— Юҡ,— тинем мин,—
Атым-затым
Ил телендә яҡшынан.
Ил хәстәре менән тулы
Иңемдәге башҡынам.
— Исемең кем?
— Илһөйәр мин.
— Нишләп уяттың мине?
— Һалҡын төштө, ерҙә ятып,
Өшөп ҡуймаһын тинем.
— Теге ҡайҙа?
— Кем ул —"Теге"?
— Яманһары ҡартты әйтәм,
Күрмәнеңме әллә бая,
Баҫтырып килеп еткән.
Ҡаршы ҡаянан ниндәйҙер
Төн ҡошо тауыш бирә.
Йәш муйылдар, үрелешеп,
Күктән ай нуры тирә.

Ниңәлер бөгөн һауанан
Йондоҙ ҙа йыш атыла.
— Инсебикә!
Ул өндәшмәй.
Ахыры, минән тартына.
Ҡыҙҙың биленә ҡул һалдым
(Мин дә егет тә баһа!),
Ул ялтанды:
— Бына-бына,
Был ни эшләүең, аһ-аһ?!
— Ғәфү ит?!
— Минме?
— Эйе!
— Ғәфү үтен һин Айҙан,—
Ана бит, ул ҡарап тора.
Тартын бер аҙ Хоҙайҙан!
— Бөттө, бөттө!
— Шулай тиген,
Никахлы ҡатын бит мин.
Һөйөшөргә, ҡауышырға
Бөткәнме ни үҙ тиңең?..

4

— Инсебикә һылыуым, Инсебикә,
Нишләп бында килеп юлыҡтың?
— Ҡуй һорама, егет, былай ҙа бит
Күңелдәрем күлдәй тулышты.
Төш мәлендә үк юлға сыҡтым даһа,
Нишләп былай төнгә ҡалдым һуң?..
Ә яулығым, ситектәрем ҡайҙа,
Уларҙы мин ҡайҙа һалдым һуң?

— Һеңлем, тимен, һеңлем, Инсебикә,
Яңғыҙ-яфан ҡайҙа юлландың?
— Нөгөш яҡтарынан килгән ҡыҙ мин,
Атам бай малына алданды.
— Ә Яманһары ҡайҙа һуң?
— Яманһары-ы??? Аһ!!!
Ҡапыл тертләне һылыуым,
Йыланға баҫтымы ни?!
Сәскәгә тип һонған ҡулын
Кесерткән саҡтымы ни?!
— Һеңлем, тимен, Инсебикә,
Тынныслана төшсәле.
Былай ҙа бит әллә ниңә
Киткәнһең бит өшәнеп.
— Ул килер, ҡуй, ебәр мине,
Һис бараһым юҡ ҡабат!
Кеше көйөнсә ул йортта
Мал булаһым юҡ ҡабат!
Ир ҡулында ҡайыш ҡамсы,
Ҡаралай көйә тәнем.
Шул тамуҡта тағы күпме
Сыҙаһын минең йәнем.
Бисәләре, бурҙаймы ни,
Көнө-төнө абалай.
Шул көндәштәр, кеше яллап,
Үлтерергә самалай.
Иргә — төндә бар, көндөҙ — юҡ,
Йәнем һис толҡа тапмай.
Кем һуң мине ҡурсалаһын,
Ярлы заты — йәтим тай...
Тауыш тынды. Өшөп киттем,
Әйләнеп күҙ һалдым

Һәм... терт итеп ҡалдым:
Ул — юҡ.
— Инсебикә-ә!!!
Ҡаяларҙан
Ҡайтты шаңдау ғына.
Хәүефләнгән кеүек, ҡапыл
Елеп таң яғынан
Елдәр үтте,
                һыу өҫтөндә
Бәүелә аҡһыл томан.
Ҡамыштар ниҙер бышылдай,
Иҙел үкһей һаман...

5

Ҡояш билбау буйы ауалауға
Эште бөтөп, бына беҙ ҡайттыҡ.
Ҡаршыбыҙға бер ҡыҙ һыуҙан килә,
Биҙрәләрен нурҙа уйнатып.
Ынйыбикә, имеш,—
                          бабайымдың
Кинйә ҡыҙы ана шул инде.
Быйыл унды бөтөп,
                          БДУ-ға
Инеп ҡайтҡас, ҡалай һөйөндөк.
Хәҙер уны оҙатырға сығам,
Былай ҙа әле оҙаҡ көттөрәм.
Юлы үтә унын самолетта
Инсебикә-таштың өҫтөнән.

*1971, 1992*

## Ҡарағай

Ҡая ситендә
үҫә ҡарағай,
Тамыр-тырнаҡтар
йәбешкән ташҡа:
“Өйөрөлә ҡойон,
йәшен уҡтала,
Ни яҙған икән
был ғәзиз башҡа?”
Дауылдар олой,
тартып йолҡорҙай,
Аҫҡа атырҙай
табып бер яйын.
Тауға һыйынып,
ташҡа тотоноп,
Үткәрә төнөн,
ҡаршылай таңын.
...Ҡая ситендә
үҫә ҡарағай,
Ағыла йылдар,
үтә быуаттар.
Таңдар атҡанда
һәр энәһендә
Йымылдай нурҙар,
йылмая таштар.

*1986, 1992*

## Тимерлектә ут уйнатып...

Тимерлектән —
                    осҡон булып,
Космодромдан —
                    йондоҙ булып
Осоп тора йылдар.
Йөрәктәрҙе —
                    йөрәктәргә,
Ҡитғаларҙы ҡитғаларға
Тоташтыра юлдар.
Тарих һандалына тағы
Сүкеш теймәгән һум тимер —
Яңы йылды һалдыҡ.
Заман-Тимерсе шул мәлдә:
— Нимә сүкергә? — тигәндәй,
Күҙгә ҡарап алды.
— Бары ла ҡулдан килә һинең,
Үҙең белеп сүке, — тинек,—
Тик онотма шуны:
Ерҙән ҡайғы-хәсрәт китһен,
Йылмайыу тантана итһен,
Табын булһын тулы!
— Бәхет! — тине Заман шул саҡ. —
Һүнмәгәнме беҙҙең усаҡ?
Тотоноң сүкешкә!
Аяҡтарҙы кирә баҫып,
Тимерлектә ут уйнатып,
Беҙ тотондоҡ эшкә.

*1980, 1991*

## Тирҙем, тирәм әле

Елкәндәрем кирелгән саҡ —
Йөҙҙөм, йөҙәм әле.
Ни эләгер?
Даръя төбөн
Һөҙҙөм, һөҙәм әле.
Йылымым ҡай саҡ эреле-ваҡлы
Балыҡ менән тула.
Ҡай саҡ унда тик ылымыҡ
Һәм ағас-таш була.
Барыһы ла үҙ өлөшөм —
Сабыр кисерә киләм.
Ҡапҡан һайын ҡалъя булмай —
Уны ғына беләм.
...Даръя дулай.
Елкәнемде
Кирҙем, кирәм әле.
Өлөшкә төшөр емеште
Тирҙем, тирәм әле.

*1980*

## Алҡымға ниҙер тығылды

“Бер рәхмәт мең бәләнән
Ҡотҡара”, — тигән ҡарттар.
Кәрәк саҡта бер кешенән
Мин күргән яҡшылыҡ та
Мең түгел, йөҙ мең бәләнән
Ҡотҡарҙы, рәхмәт уға!
Инде күп йылдар үтһә лә,

Эстән һөйөнәм шуға.
...Бер көн килеп тап булыштыҡ,
Күңелдәрем тулышты.
Бүлешергә әҙер инем
Хатта һуңғы һулышты.
Әммә дуҫым һүҙ башланы:
— Мин булмаһам, теге саҡ...
...Алҡымға ниҙер тығылды,
Йотоп ебәрҙем саҡ-саҡ.

*1970, 1988*

## Шундай йәштәр күп хәҙер...

Шундай йәштәр бар хәҙер:
Егете белмәй ат егә,
Ҡыҙҙары — теген тегә.
Кейгән — былай ҙа затлы,
Таңғы йоҡолар — татлы.
Әсә йөрөй һаҡ ҡына,
Тауыш-тын юҡ саҡ ҡына.
Атай
        күптән аҙбарҙа,
Бар хәстәре —
                    малдарҙа.
Ҡыҙ күҙләү ҙә бар-барын,
Егет күҙләү
                    күберәк.
Өйләнешеү булһа ла,
Өй һалыуҙар бик һирәк.
Балалар, тип, бил бөккән,
Ут йотоп донъя көткән

Атай таба йылы урын,
Квартираның ҙурын.
Әсә йәшәй ҡалтырап,
Ҡыҙ холҡона йүн юрап.
Шундай йәштәр күп хәҙер:
Күҙҙәр бары шешәлә
(Тиндәр тормай кеҫәлә),
Көн дә табыла бер “йыллыҡ”,
Һис юғында “ҡыҙыллыҡ”,
Бала күңеле — ҡалала.
Килен күңеле — далала.
Йәш кейәүҙәр тынғыһыҙ —
Өйҙә тотоп тыйғыһыҙ.
Ғилем һүҙе һәр кемдә,
Артта ҡалмай бер кем дә.
Тик ҡылған эш самалы,
Кәпәс кенә һауалы —
Шундай йәштәр күп хәҙер...

*1985, 1991*

## Аяп тормай, уйлап тормай

Яуҙы ямғыр, Ҡаяларҙы
Йыуып үтте ап-аҡ итеп.
Ҡупты дауыл. Ҡаяларға
Саң туҙанын китте һибеп...
Эй һин, донъя — ҡырыҫ еңгә,
Шаяртаһың мәңге шулай.
Ҡаяны ла, ирҙәрҙе лә
Аяп тормай, уйлап тормай.

*1967*

## «Бер төрләләр» араһында...

(М. Ғафуриға эйәреп)

«Ҙурҙар» янына һыймайым,
«Ваҡтар» янына һыям.
«Ҙур» янында ваҡланма, тип
Үҙемде үҙем тыям.
«Аҡыллылар» араһында
Үҙемде артыҡ тоям.
«Бер төрләләр» араһында
Йөрөйөм, аҡыл йыям.

## Шулай һөйөү тыуған икән...

Уйнап-көлөп бергә үҫтек,
Һинең менән бергә үттек
мәктәп юлдарын.
Һағынамын мин хәҙер ҙә,
Иҫтәремдән сыҡмай бер ҙә
алтын йылдарым.
Яҡын дуҫтар байтаҡ ине,
Иң яҡын күрҙем тик һине,
тик һине генә.
Һин һөйөнһәң, мин ҡыуандым,
Һин көйөнһәң, мин һыҙландым,
белмәнең, ниңә?
Үтә серле ҡарай-ҡарай,
Өлтөк сәсең тарай-тарай,
йылмая инең.
Булмаһаҡ та икәү бергә,
Ҡалырһың шулай ғүмергә
хәтерҙә минең.

Саҡырҙы үтәһе юлдар,
Үткәрҙем мин байтаҡ йылдар
һинән йыраҡта.
Һин йөрөнөң гел уйымда —
Ҡыуанғанда, моңайғанда,
һағынған саҡта.
Инде йылдар үткәс кенә,
Егет булып еткәс кенә
бар серен һиҙҙем:
Шулай һөйөү тыуған икән,
Шуға яҡын булған икән
күңелдәр беҙҙең.

*1985, 1992*

## Их, белмәнең...

Ауылығыҙ аша тик бер тапҡыр
Мин сайҡалып уҙҙым кузовта.
Эй, һылыу ҡыҙ, һин һыу ала инең
Юл эргәһендәге ҡоҙоҡтан.
Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына бер ҡараның,
Бер секундҡа күҙҙәр осрашты.
Мөмкинме һуң күңелеңдән юйыу
Был гонаһһыҙ моңһоу ҡарашты?!
Уҙҙым. Ҡалдың.
Ләкин уйым менән
Урап килеремде көн һайын,
Сәсең һыйпап, серҙәр һөйләремде,
Их, белмәнең, ҡыҙый, моғайын?..

*1986, 1992*

## Әйтсе, һылыу

Тын урамда йәки шаулы залда
Юлдарыбыҙ байтаҡ осрашты.
Минең күҙҙәр һиңә һирпелделәр,
Үҙем тойҙом һинең ҡарашты.
Һин дә тыйнаҡ инең,
                        мин дә ул саҡ
Түгел инем, ахыры, бик ҡыйыу.
Тик күҙҙәргә генә сыға ине
Үҙебеҙ генә һиҙгән йылмайыу.
...Бына бөгөн тағы осраштыҡ беҙ
(Сит ҡуйында инде һин күптән).
Мине күргәс, башың түбән эйҙең,
Әйтсе, һылыу, әйтсе, нилектән?

*1986, 1992*

## Ни ғәжәбе...

Тик күҙемә ҡарап, һин эҙләмә,
Һис эҙләмә һөйөү саҡҡыһын.
Мин һаҡлайым бары йөрәгемдә
Һин ҡабыҙған уттың яҡтыһын.
Бәлки, йөҙөм ҡай саҡ бойоҡ булыр,
Күҙҙәремдә осҡон һикермәҫ.
Ни ғәжәбе...
                Мине йылдар шулай
Уйсан егет итеп үҫтергәс.

## Юлым Нөгөш буйлап, барам уйлап

Зыңлап тора июль иртәһе:
Сағыу нурҙар, аҡһыл томандар;
Тәҙрәләрҙе асып ҡуйғандар,
Миңә сәфәр сығып китәһе.
Бал ҡорттары, иңкеш уянған,
Сәскә һанай күптән туғайҙа —
Эш етерлек инде был айҙа,
Күп кәрәҙҙәр һылап ҡуйылған.
Һиҙгер әтәстәрҙе тертләтеп,
Ҡарты-йәше ҡырға юл алған,
Тик урамдар ғына буш ҡалған,
Аласыҡтан төтөн үрләтеп.
Бесәнселәр туғай, болонда
Эш башлаған һары таңдан уҡ,
Тындар — ялҡын,
ҡараш — янған ут,
Шулай килә борон-борондан.
Геүләп тора ер, күк — бар донъя:
Ырамлы эш кенә уйҙарҙа,
Тынып тора әле йырҙар ҙа —
Һәр кем үҙенә бөгөн мал йыя.
Миңә сәфәр сығып китәһе:
Уйым түгел донъя малында,
Ашҡындырғыс дәрт бар ҡанымда...
...Зыңлап тора июль иртәһе.
Юлым Нөгөш буйлап, барам уйлап,
Нисә кисеү миңә сығаһы,
Балаҡ осон нисә еүешләп,
Нисә тапҡыр тағы һығаһы?..

Бына шаршы,
ай-һай ҡаты аға,
Шауҙырҙатып йыуа ҡом-ташты.
(Илһам ташҡан саҡта хистәрем гел
Ошо шаршы менән тоташыр.)
Ә түбәндә — ятыу,
төпһөҙ тиҙәр,
Йота тиҙәр, ай-һай, хаҡ микән?
Һыу төбөндә бөгөн нурҙар уйнай;
(Хыялдарым нурлы саҡ микән?!)
Ятыуҙарым, күңел төпкөлдәрем,
Һеҙ оҡшаштыр, ахыры, оҡшаштыр:
Көн болотта — төпһөҙ,
сыуаҡ саҡта
Ҡосоп ятаһығыҙ ҡояшты!
Төбө-тамыры менән ағып килеп,
Күпме ағас ҡалған ятыуҙа.
(Гүйә, улар ерҙән китһәләр ҙә,
Күңелдәрҙән китмәç батырҙар.)
Тау умырып, таш иретеп үтә
Урау-урау юлы Нөгөштөң.
(Бындай булмыш тик тау йылғаһына,
Ҡыйыуҙарға тейгән өлөштөр.)
Эт үткеһеҙ әрәмәләр ярып,
Иркен туғайҙарға йәйелгән.
Бар сүп-сарҙы йыуған,
ә ағастар
Ағым ыңғайына эйелгән.
Беләм, былар яҙғы ташҡын эше —
Ғәйрәт сәскән сағы йылғаның.
(Бар бит минең үҙемдең дә шулай
Ғәйрәтләнгән саҡтар булғаны.)

Ҡарай-ҡарай килеп,
хайран ҡалдым:
Кескәй йылға күпме эш ҡыра!
Һәр бер эшен,
юйылмаҫлыҡ итеп,
Эҙҙәренә һалып ҡалдыра.
Юл һуҙыла берсә уң яр буйлап,
Берсә һул яҡ ярға һикерә.
Тик кисеүҙе һанап кисмәгәнде
Моратына ул бит еткерә.
...Юлым Нөгөш буйлап, барам уйлап...

*1986, 1992*

## Шиғырҙарым

Дағаларҙан сәсрәп ҡалған таштай,
Юлдарымда сәселеп ҡалдығыҙ.
Аҡҡа төшмәй,
телгә килеп етмәй,
Күптәрегеҙ эстә яндығыҙ.
Шиғырҙарым — ғәзиз балаларым —
Рәнйерһегеҙ инде, һиҙәм мин.
Майҙандарҙа яңғыҙ ҡалаһығыҙ,
Туҡтап тормай ары елəм мин.
Һеҙҙән алда йөрөр исемем юҡ,
Йәшәү сәмен һеҙгә һаламын.
Әрһеҙ балалар бит, бирешмәҫтәр,
Тигән өмөт менән ҡаламын,
Шиғырҙарым — ғәзиз балаларым...

*1986, 1991*

## Күңелдәрҙе сафлап китер өсөн...

Тәүге ҡарҙан барам,
                    тирә-ягым
Саф ҡына ла бөгөн, аҡ ҡына.
Аңлап етмәҫ бер тартыныу менән
Аяҡтарҙы баҫам һаҡ ҡына.
Тәүге ҡарҙан барам.
                    Бер уйлаһаң,
Ни гәжәбе — яуа һәр йылда.
Ҡыш буйына тапап иҙербеҙ ҙә,
Ағым-ташҡын булыр бит ул да.
Ә шулай ҙа,
              тәүге ҡарҙар яуһа,
Дәрт-елкенеү килә күңелгә.
Сабыйҙарса бер осонғо килә,
Сәбәптәрен уның кем белгән.
Тәүге ҡарҙар яуа, тәүге ҡарҙар
Яба ерҙе, яба һаҡ ҡына.
Урман-ҡырға сыҡһаң, күҙ ҡамаша,
Тауыш-тын юҡ хатта саҡ ҡына.
Онотолоп тора ығы-зығы,
Онотола асыу-ярһыуҙар.
Күңелдәрең, юшҡындарын юйып,
Сафланып та ҡала аҡ ҡарҙай.
...Томалап та яуған тәүге ҡарҙар —
Янған йөрәктәргә дауалыр.
Күңелдәрҙе сафлап китер өсөн,
Килке-килке килеп яуалыр.
Тәүге ҡарҙар яуа, тәүге ҡарҙар...

## Эшләр эштәр, ай-һай, ҡалғандыр

Яуаһың да, эй, ҡар, яуаһың,
Бурап-бурап көрттәр өйәһең.
Ауырайтып һаман йүшәне,
Ағастарҙы ергә эйәһең.
Яуаһың да, эй, ҡар, яуаһың,
Иңбаштарым ап-аҡ булды инде.
Борсаҡ-борсаҡ булып шул ҡарҙар
Керпектәргә ҡунып туңды инде.
Ил яҙмышы ята иңбашта,
Йәнгә тынғы бирмәҫ уй башта,
Ә мин үҙем
юлда һаман да,
Буталышлы ошо заманда.
Кисә-бөгөн эшләр эштәрем
Ҡалманымы?
Ай-һай, ҡалғандыр...
Ҡалһа әгәр, улар өҫтөнә
Бурап-бурап ҡарҙар яуғандыр,
Эшләр эштәр, ай-һай, ҡалғандыр...

*1966, 1991*

## Ҡараштарым һеҙҙе иркәләй ҙә

Тәҙрәләрҙә гөлдәр сәскә атҡан,
Зәңгәре бар, алһыу, ағы бар.
Тамсы-тамсы йәйғор тамғанмы ни,
Төҫкәйҙәре шундай сағыуҙар.
Тәбиғәттең мәңге үҙ ҡануны:
Миҙгел ҡыуа килә миҙгелде.

Кисә генә ләйсән яуа ине,
Бөгөн бына шартлап ҡыш килде.
Бүлмә гөлө генә тоймай үҫә
Ер һулышын, күктәр күкрәүен.
Өлөштәре —
тәҙрә аша ҡарап,
Тар һауытта ғүмер үткәреү.
Тәҙрәләрҙә гөлдәр сәскә атҡан —
Төҫкә сағыу, еҫе аҙ кеүек.
Ҡараштарым һеҙҙе иркәләй ҙә,
Эскәйҙәрем көйрәй ҡуҙ кеүек...

*1986, 1991*

## Яҙҙарҙы мин көтөп алам...

Ағиҙелгә тейәлеп ҡыш
Диңгеҙгә елде.
Күңелгә һандуғас ҡунды —
Тағы яҙ килде.
Һаумы, һаумы, оло юлдың
Тәүге туҙаны!
(Юлдарымда шул туҙанды
Күпме һуланым.)
Яҙҙарҙы мин көтөп алам
Илһамы өсөн.
Яҙғы таңдар, яҙғы нурҙар —
Йәшлегем төҫө.
Яҙҙар мәңге йәшел булыр,
Мин гел йәш булмам.
Юлдарҙа туҙан баҫылмаҫ,
Мин гел һуламам.

Ерҙәге ошо яҙҙарҙы
Күреүем — бәхет!
Хәрәкәттә — бәрәкәт, тип
Йөрөүем — бәхет!
Был яҙҙарҙа — хаҡлыҡ даулар
Дәүер һулышы.
Тынғыһыҙҙарҙы иш итеү —
Юлдар булмышы.

*1970, 1990*

## Һинең эше

Ҡулдағыны ысҡындырғас,
Юҡты эҙләп ҡаңғырамын.
Машинаға һуңлайым да
Йәйәү аяҡ талдырамын.
Яҡындарҙың һүҙен тотмай
Ят юлдаштар менән ҡасам.
Аҡылдан юл яҙҙырам да
Шырлыҡтарға инеп боҫам.
Ҡайһы ваҡыт, диуаналай,
Ерле юҡҡа ҡыуанамын.
Тик... түгелеп илар саҡта
Сабыр итәм, тыйыламын.
Тайған да бар, ауған да бар,
Ҡулбаштарҙы ыуған да бар,
Бысраҡ йоҡһа, йыуған да бар.
Аптырап та ҡалам ҡай саҡ,
Әйтеп ҡуйһа берәй кеше:
«Олпатыраҡ тот үҙеңде,
Һин түгел бит минең эше...»

Үҙемде үҙем хурламайым,
Үҙемде үҙем ҙурламайым.
Юҡ-юҡ, мин бит —
Һинең ише —
Кеше!

*1988*

## «Юҡҡа-барға көйәләнмә...»

Йәй буйы йәйҙе әрләнек,
Күрмәнек тип йәй төҫөн.
Яуһа, төбө төштө, тинек,
Аяҙ булһа, һай, эҫе!
Өтөлөп-янып йөрөнөк:
Их, көнө юҡ, көнө юҡ!
Ҡул һелтәнек: игендең дә,
Үләндең дә йүне юҡ!
Һиҙмәгәнбеҙ, көҙ ҙә еткән —
Ишелеп иген уңған.
Ҡай арала болондарға
Кәбәндәр килеп тулған.
Баҡсаларҙа алма бешкән
Алланып та балланып.
Тәгәрәп ята ҡарбуздар —
Алданы йәй, алданы!
Инде тағы йүгерәбеҙ:
Бар бит йыйып алаһы.
Ырҙын табағында иген —
Бар бураға һалаһы.
Көҙҙөң тетмәһен тетәбеҙ:
— Яуа ла ебәрәсе!!!

(Ә ужымға ямғыр кәрәк,
Тик беҙ генә бәләсел.)
...Тәбиғәттең һәр миҙгеле
Аныҡ белә үҙ эшен.
Юҡҡа-барға көйәләнмә,
Үҙең өлгөр бул, кешем!

*1990, 1996*

## Тауҙарымды урап ҡайтам әле

Ҡолаҡтарым бер аҙ тынып торһон
Аҡыл һатыу, өгөт-нәсихәттән.
Ҡыуа-ҡыуа кем осона сыҡҡан?—
Ҡалып торһон бөтә мәшәҡәттәр,
Тауҙарымды урап ҡайтам әле.
Үҙем генә, аулаҡ ҡалайым бер.
Ҡайһы ошта килеп сейәлгәндер,
Уйҙарымды барлап алайым бер.
Олатайҙарҙың хәләл тире һеңгән
Солоҡтарым менән һөйләшәйем.
Гүзәллеген ерҙең йырлап туймаҫ
Шишмәләрем менән серләшәйем;
Юшҡындарҙы йәндән һыпырып ташлап,
Бер ҡайтайым әле асылыма.
Кипкән ирендәрем сыланһын бер
Япраҡ һирпкән ысыҡ тамсыһынан —
Тауҙарымды урап ҡайтам әле:
Унда күктәр шаҡтай бейегерәк,
Хыял —
сағыуыраҡ, сапсаныраҡ,
Офоҡтарың була иркенерәк.

Һил тауҙарҙың ябай ғорурлығы
Уй ағышын бора гел изгегә.
Ҡосағыңа бөтә донъя һыя,
Ваҡлыҡ, түбәнлектәр артҡа сигә —
Тауҙарымды урап ҡайтам әле,
Ҡайтам әле!

*1986, 1992*

## Тик мин генә онота алмай...

Төнөн ерҙе һалҡын ямғыр һыйланы.
Аршын ҡарҙы күк боҙ итеп һыланы.
Таңға табан шаҡырайтып ҡатырҙы,
Күрәһең, ҡыш көҙгә тырнаҡ батырҙы.
Атлай-шыуа иртән эшкә киләбеҙ.
Йығылһаҡ та, һыр бирмәйбеҙ, көләбеҙ.
Ҡапыл: «Әнә-ә-әс!» — Һөрән һалды бер малай.
Ҡолағымды баҫып торҙом бер талай.
Әсе тауыш. Шул бер малай — бот буйы —
Алдағыһын ҡыуып етмәк бар уйы.
Тая-тая, йығыла-йығыла йүгерә.
(Ул йүгерә, ә мин атлап өлгөрәм.)
«Әнә-ә-әс!»
Алдағыһы ҡарап ҡуя боролоп.
Ары китә, туҡтарға һис уйы юҡ.
Бына бер саҡ ҡыуып еттек Әнәсте.
Минең «дуҫҡа» ғәмһеҙ генә өндәште:
«Һөрән һалып ниңә, Марат, ҡысҡыраң?
Ут сыҡҡанмы әллә унда тип торам».
Мышнай-мышнай әйтте Марат:
«Былай, тик...
Парталаш бит, икәү бергә барһаҡ, тип».

Малайҙар ни, китте улар, киттеләр.
Тик мин генә онота алмай интегәм.

*1992*

## ...Донъя ҡалай шаярта

Бына хикмәт —
маҡтанылар
Бер көн мине һәммәһе:
Миндәй булдыҡлы, инсафлы
Кеше һирәк, йәнәһе.
Ҡул һуҙғандың ҡулын ҡыҫтым,
Йылмайһалар —
йылмайҙым.
Тыштан нисек булғанмындыр,
Әммә эстән моңайҙым.
Йырланылар, бейенеләр,
Һис тә бирмәне файҙа.
Осҡайны шул илһам ҡошом
Ул саҡта әллә ҡайҙа.
...Бына бөгөн бөтә донъя
Миңә һыртын ҡабарта:
Ҡырын ҡүҙҙәр, үпкә һүҙҙәр —
Донъя ҡалай шаярта.
Әммә минең күңелемдә —
Көндөң оло ҡояшы:
Ураү-ураү юлдар урап
Ҡайтты илһамым ҡошо!

*1992*

## Бабсаҡ

Улым, һиңә шундай исем ҡуштым
(Көлгәндәргә — ирек,
көлһөндәр).
Беләм, көлмәҫ
халҡым тарихын һәм
Ата-баба ҡәҙерен белгәндәр.
Яуыз көнсөллөктөң бер ҡорбаны —
Бабсаҡ* батыр кеүек батыр бул.
Ғүмер тигән тауҙы үрләгәндә,
Алдыңда гел ятмаҫ таҡыр юл.
Үҙ бәхетең, үҙ аҡылың менән
Йәшә, улым, донъя — һинеке.
Ҡылыр эштәреңә фаразым юҡ,
Тик йөрәгең булһын илдеке!

*1971, 1991*

## Егет күңеле

Киң яландарҙы тарһынып,
Ҡойон шикелле ярһыулы
Бер тай йөрөй сабып,
Шунан ҡыҙыҡ табып.
Тауҙар һыртына менеүе,
Зәңгәр офоҡҡа етеүе

* «Бабсаҡбей һәм Күҫәкбей» эпосында Ҡыпсаҡ ырыуының батыры Бабсаҡбейҙе Бөрйән ырыуы башлығы Ҡарағөләмбәт яуыздарса һәләк итә.

Бер ни түгел һымаҡ,
Тик офоҡтар йыраҡ.
Ялы, йөнө өрпәк кенә,
Ул тай үҙе өркәк кенә,
Түңгәктән дә ҡай саҡ
Ҡурҡып үлмәй саҡ-саҡ.
Тик ул ярһыған ваҡытта,
Күҙҙәрен ҡан баҫҡан саҡта,
Ғәзиз булһа башың,
Сыҡма уға ҡаршы.
Ул саба, унда көс-ғәйрәт,
Сикһеҙ донъя ята йәйрәп,
Әйҙәп алыҫтарға.
Зәңгәр офоҡтарға.
Хәүеф-хәтәр аҙым һайын,
Ята юлда көтөп яйын;
Тайҙың ни эше бар —
Уға киң донъя тар.
Ҡойон шикелле ярһыулы,
Киң яландарҙы тарһынып,
Сапҡан ул — тай түгел,
Ана шулай күңел:
Егет саҡта ярһып елә,
Тормош шау-шыуынан көлә,
Донъяла — ул ғына
Һәм сикһеҙ юл ғына.
Аҡ-ҡараны айырырға,
Тура юлға ҡайырырға
Кәрәк уға йүгән —
Аҡыл, сама тигән.

*1970, 1990*

## Хәтереңдәме?

Ситса күлдәк кейгән буйсан ҡыҙ,
Берсә шаян, берсә уйсан ҡыҙ,
Хәтереңдәме әле теге көн:
Беҙ ватҡайныҡ тәҙрә өлгөһөн?
Мәктәптә лә алдыҡ өлөштө,
Өйҙә өлөш бигерәк мул төштө.
Шаярмаҫҡа һүҙ ҙә бирештек,
Аҙаҡ икәү генә көлөштөк.
...Шул уҡ класс, шул уҡ парталар,
Стенала — сыбар карталар.
Һабаҡ уҡый отҡор балалар,
Һинең ҡыҙ һәм минең ул да бар...
Ситса күлдәк кейгән буйсан ҡыҙ,
Берсә шаян, берсә уйсан ҡыҙ,
Бер ҡайтаһы ине шул саҡҡа —
Үҙебеҙ өлгө ватҡан класҡа.

*1968, 1992*

## Тиҫтерҙәрҙән, берүк, айырма!

Ирештермә,
утыҙ туғыҙҙар беҙ,
Эйе, ҡырҡҡа берәү тулмаған.
Шуғалыр ҙа бала саҡ илендә
Өлөшөбөҙ тулы булмаған.
Тойор-тоймаҫ ҡалдыҡ барыһын да:
Атай ҡулын, әсә наҙҙарын.
Ҡыштарыбыҙ бигерәк оҙон булды,
Үтә ҡыҫҡа булды яҙҙары.
Беҙ аяҡҡа баҫтыҡ,
әсәйҙәргә,

Ағай, апайҙарға тотоноп.
(Тик ниңә һуң бөгөн ошоларҙы
Ҡайһы берәү ҡуя онотоп?)
Ҡул араһына ла иртә керҙек,
Кейемдәр ҙә ялтлап торманы.
Тыңлаусан һәм сабыр, күндәм булдыҡ,
Зарланманыҡ, аһтар орманыҡ.
Ауырлыҡтар,
　　　　　　түрҙәр уртаҡ булды,
Үр артыла һаман юлыбыҙ.
Бәләкәйҙән һис буш торғаны юҡ —
Сәсә, ура, сүкей... ҡулыбыҙ.
...Утыҙ туғыҙҙар беҙ.
　　　　　　　　　　Бер сафтабыҙ,
Сафта саҡта мин дә арымам.
Яҙмыш, яҙмыш,
　　　　　　　　һиңә шул үтенес:
Тиҫтерҙәрҙән, берүк, айырма!

*1992*

## Мин — уларға, ә дуҫтарым — миңә

*Ҡәләмдәштәргә*

Көндөҙ, кисен йәки таң тыуғанда,
Шат хистәрҙән йөҙөм балҡығанда,
Ҡапыл ғына күңелем бойоҡһа,
Йөҙҙәремә һағыш-моң йоҡһа:
— Һиңә ни булды? — тип һорама,
Тиңһенмәүгә, берүк, юрама.
Алыҫтағы дуҫтарымды бары
Юҡһынам мин ундай саҡтарҙа.

Ниҙәр уйлап, ниҙәр кисереп кенә
Йөрөйҙәрҙер ҡайһы яҡтарҙа?
Һыҡрағанда күңел ғазаптарҙан
(Була ундай ауыр минуттар ҙа),
Ҡошсоҡ-йөрәк ҡапыл ярһып типһә,
Шул ваҡытта йөҙөм балҡып китһә:
— Һиңә ни булды? — тип һорама,
Хыялыйға, берүк, юрама.
Күҙ алдымда минең баҫҡан булыр
Шул дуҫтарым бергә йыйылып.
Мин — уларға,
                    ә дуҫтарым — миңә
Йөрәген йолҡоп биреп йығылыр.

*1966, 1987*

## Күңелем тула минең яҙҙарҙа

Ниңә шулай күңелем тула икән,
Ҡарап торһам яҙғы һыуҙарҙы.
Ярһыу ташҡын, гүйә,
                    боҙҙо түгел,
Алып китә ғүмер, йылдарҙы.
Иҙел иңләп аҡҡан боҙҙар ҙа бит,
Ғүмер, йылдар һымаҡ, сып-сыбар.
Берәүһе шып-шыма,
                    берәүһендә
Ярылып-ярылып ятҡан эҙҙәр бар.
Ни генә юҡ аҡҡан боҙҙарҙа...
Күңелем тула минең яҙҙарҙа...

*1966, 1990*

## Һағындым шулай*

Алыҫта, офоҡта
Йәшен уттары, йәшен уттары.
Алыҫта, шул яҡта
Минең дуҫтарым, минең дуҫтарым.

Алыҫта, офоҡта
Ҡоштар тауышы, ҡоштар тауышы.
Күңелдә шул саҡта
Дуҫтар һағышы, дуҫтар һағышы.

Ҡоштарҙы һағынып,
Муйылдар шаулай, муйылдар шаулай.
Мин дә бит дуҫтарҙы
Һағындым шулай, һағындым шулай.

## Мәсетле дәфтәренән

### 1. Ҡарасы, ҡарасы...

Ете ят бер мосафирҙай,
Инәм һәр бер ауылға.
Ҡалдырайым тип хәтерҙә,
Күҙ һалам уңға-һулға.
Ҡарасы, ҡарасы:
Ҡарағусҡыл һылыуҙарҙың
Өтөп ала ҡарашы.
Ир-ат башта һынсыл ҡарай,
Ҡыҫа төшөп күҙҙәрен.

---

* Ғәзиз Дәүләтбирҙин көйө.

Шунан, тешен йылтыратып,
Йылмаялар үҙҙәре.
Эй, хәйләһеҙ йылмайыуҙар —
Йөрәгеңә һары май.
Ихлас һөйләшеп китәләр
Кемлегеңә ҡарамай.
Күңеленә хуш килдеңме,
Теҙә бирә хәбәрен.
Һәр берәүҙә — донъя гәме,
Һәр кемдең үҙ хәстәре.
Ауылдарҙан киткән саҡта
Яңы дуҫтар оҙата.
— Онотмаң, килеп йөрөң, — тип
Өләсәйҙәр һүҙ ҡата.
...Ҡарасы, ҡарасы:
Ҡарағусҡыл һылыуҙарҙың
Өтөп ала ҡарашы.

## 2. Йоҡлап ятмаң, өлгөрөң

Аҡ ҡырсынлы ярын өңөп,
Тын ғына аға һыуҙар.
Тауҙан тауға тулҡын ҡаға
Бойҙай бешкән баҫыуҙар.
Ҡатлам-ҡатлам яҫы ташлы
Армыттар — арғымаҡтар,
Йә яныңдан,
                    йә ялтарып,
Юртып бара офоҡта.
Урмандарға, аҡландарға
Сыҡһаң, иҫең китмәле:
Ҡорама түшәк шикелле
Бәшмәк, eләк, көртмәле!

Тәбиғәттең табыны мул,
Ауыҙ итең, өлгөрөң.
Йәй айҙары үтер-китер,
Йоҡлап ятмаң, өлгөрөң!

### 3. Устикиндә таш ҡоймалар

Устикиндә таш ҡоймалар —
Кемдәр бураны икән?..
Бураганда йорт-еренә
Бәхет юраны микән?..
Ваҡыт-даръя ағышында
Төрлө саҡтар булғандыр:
Ғәрәсәттәр ябырылғандыр,
Ҡоҙғоно ла ҡунғандыр.
Мин белмәйем,
ни күргәндер
Устикин ҡоймалары.
Таштарында нур сағыла —
Шуныһын күрҙем бары.

*1980, 1992*

## Мәрйен теҙәм

*«Ай яҡтыҡайҙары яҡты икән*
*Ултырып та мәрйен теҙергә...»*
Халыҡ йырынан

Зәлифә инәй, күҙен сек(е)рәйтеп,
Мәрйен теҙә түгеп яулыҡҡа.
Бер осонан мин дә тотоноп киттем
Ҡыҙыҡ өсөн генә,
эш юҡтан.

Өйҙә тып-тын. Беҙ ҙә һөйләшмәйбеҙ:
Инәй берҙе теҙә,
мин — биште.
Стенала иҫке сәғәт кенә
Секундтарҙы һанай келт тә келт.
Туҡһандағы әбей
туҡһан йылын
Мәрйен генә итеп теҙгәндәй.
Күтәрелеп ҡарап алған була,
Уйҙарымды минең һиҙгәндәй.
Тән зымбырлап китә. Аңлап торам
Ниндәй уйға уның батҡанын.
Бармаҡтары ниңә ҡатҡанын да,
Күҙ нурҙары ниңә ҡайтҡанын.
Барыһын да йөрәгенә йыйып,
Йөҙөн ҡуйып ыҙғыр елдәргә,
Туҡһан баҫҡыс үткән.
Шатлыҡ йәки
Ҡайғы күрмәгәндер кемдәрҙән?!
...Берәм-берәм сүпләп мәрйен теҙә,
Ҡәҙерен белә: улар иҫәпле.
Мин дә теҙәм.
Тик ул һаман — берҙе,
Ә мин биште теҙәм...
нишләптер...

*1980, 1991*

## Ышанығыҙ беҙгә, ветерандар!

Инәй, апай, бабай, ағайҙар
Китә һаман, китә аранан.

Инде нисек кенә тырышһаҡ та,
Әжәлдәрҙән булмай аралап.
Тамуҡтарҙы үткән кешеләр бит,
Уйлай китһәң, тау-таш иларлыҡ!
Ныҡлығына тау-таш һоҡланырлыҡ,
Нисек оноторһоң уларҙы?!
Фронттарҙа янды, тунды улар,
Аслы-туҡлы һабан һөрҙөләр.
Үҙҙәренә наҡыҫ телемде лә
Йәтимдәргә бүлеп бирҙеләр.
Йәшәнеләр илгә терәк булып,
Үҙҙәренә терәк кәрәктә.
Ҡотоптарҙың боҙон иретерлек
Ялҡын йөрөттөләр йөрәктә.
Ҡәҙер-хөрмәт, бәлки, етмәгәндер,
Үҙебеҙ ҙә уныһын беләбеҙ.
(Беҙ бит яҡындарҙың яҡынлығын
Күп саҡ үҙе киткәс һиҙәбеҙ.)
Һеҙҙән беҙгә изге ниәт ҡала,
Имен донъя ҡала мираҫҡа,
Беҙ ҙә уны шулай ҡалдырырбыҙ
Үҙебеҙгә килер алмашҡа,
Ышаныгыҙ беҙгә, ветерандар!

*1983, 1990*

## Ә һин беләһеңме?

Кем менән кем килеп осрашмай,
Кемдәр кемдән һаулыҡ һорашмай...
Аңғармаҫтан шаһит булған бар
(Ҡыҙыҡ итеп ҡарап торған бар),

Күрешкәнен яҡын дуҫтарҙың,
Бер-берендә гәме юҡтарҙың,
Түрә менән ябай эшсенең,
Һинең менән минең ишенең,
Аҫтыртындың, ялағай-ҡуштандың,
Үҙ тынынан үҙе ҡурҡҡандың.
Ҡул биреүҙәр — төрлө,
ҡараштар,
Һүҙ ҡушыуҙар — төрлө,
тауыштар,
Төрлө, хатта, һәр ым, ишара
(Үҙе һиҙмәй кеше — бисара!):
Көҙгөләге кеүек сағылып,
Сит ҡарашҡа шундуҡ яғылып
Ҡала уның бөтә булмышы,
Уй тоҫмалы, донъя ҡыумышы,
Күңел наҙы, керһеҙ һөйөүҙәр,
Борсолоуҙар, янып-көйөүҙәр,
Иҫәпкә — бар, һанға — юҡһың, тип
Эстән генә көлөп йөрөүҙәр
Ялтлап китә шул бер секундта.
(Тетрәнгән бар хатта шул уттан.)
...Барыһын үҙем һымаҡ күргән булып,
Әллә ҡайҙан сәләм биргән булып,
Мин дә йөрөп ятам арағыҙҙа,
Уйлап ҡуям ҡай саҡ сараһыҙҙан:
Ниндәй бәндә икән мин — үҙем?
Ә һуң беләһеңме һин — үҙең?..

*1985, 1992*

## Юлдаштарҙан уңам

Юлға сыҡһам, уйламаған ерҙән
Осрап ҡуя шундай юлдаштар:
Әйтерһең дә, бала саҡтан бирле
Йәшәгәнбеҙ булып йән дуҫтар!
Бер уйлаһаң, юлда һүҙ башларға
Күп нәмә һуң беҙгә кәрәкме?!
Етә шыла биреп урын биреү,
Бер шырпынан ҡабыҙыу тәмәке.
Алсаҡ кеше, кеше йәнле кеше
Магнит кеүек тарта үҙенә.
Күңеленә ятыр һүҙен ҡуша,
Ҡолаҡ һала һинең һүҙеңә.
Һөйләшкәндә, аңғармаҫтан ғына,
Бер урайһың ғүмер юлдарын.
Яҙмыштарың шундай оҡшаш ҡай саҡ,
Гүйә, бер әсәнең улдары.
Ҡап уртаға һалына бөтә серҙәр,
Уй-хыялдар, өмөт-теләктәр.
Шатлыҡ-хәсрәттәрҙе уртаҡлашып,
Кисерәһең бөтә йөрәктән.
...Ярай әле, юлға сыға торам,
Юлдаштарҙан уңам юлдарҙа.
Һәр беренән күңелдә нур ҡала,
Ҡул йылыһы ҡала ҡулдарҙа.

*1986, 1992*

# Һин бит миңә

*Өфөнөң 1-се интернат-мәктәбендә*
*бергә уҡыған дуҫтарыма*

Ҡарасәле, онотмағанһың, тип
Аптырап та киттең осрашҡас.
Ә мин ғажиз ҡалдым,
                    хәтерләүҙәр
Күңелемә килеп тулышҡас.
...Төпһәләрҙең сәләмәт тамырынан
Үренделәр булып ҡалҡҡайныҡ.
Йөрәкһеп тә килеп төрлө яҡтан
Өфө таштарына баҫҡайныҡ.
«Ҡырҡ атаның балаһы»н бер ояға,
Интернатым, һин бит йыйғайның.
Ете яттар инек,
                    ҡай беребеҙ
Аптырап та башта ҡалғайны.
Үҙенекен итте уртаҡ яҙмыш —
Дуҫ-туғандар булып киттек беҙ,
Ҡырҡ һуҡмаҡты бергә ҡушып үреп,
Оло юлға сығып еттек беҙ.
Илдән йыйылғайныҡ,
                    көс, хис туплап,
Ғәйрәтләнеп, илгә таралдыҡ.
Ҡайҙа булһаҡ, ниҙәр эшләһәк тә,
Юлдаш беҙгә сәм һәм саялыҡ.
...Ҡарасәле, онотмағанһың, тип
Аптырап та киттең, туғаным.
Һин бит миңә барыбер үҙем кеүек,
Үҙеңде һуң онотоп буламы?!

*1986, 1991*

## Ғәйеп итмә

Урамдарҙан ашығып барған саҡта
Танығандай булып баш ҡаҡһам,
«Сәләм!» тиһәм,
                    берүк, аптырама,
Яҡыныма һине оҡшатһам.
Ғәйеп итмә, ете ят булһам да,
Иҫәр икән тип тә уйлама.
Кем һуң әле, ҡайҙа осраттым, тип,
Уҙған юлдарыңды буйлама.
Ни хикмәттер, ғүмерем буйы шулай
Кешеләргә кешене оҡшатам.
Әллә кемдән һаулыҡ һорашһам да,
Үҙем тағы аҙаҡ шаҡ ҡатам.
Юҡ-юҡ, мин бит юрый ҡыланмайым,
Берүк, мине ғәфү ит инде.
Ят булһам да, ал һин сәләмемде,
Йә йылмайып ҡына үт инде.
Ғәжәпме ни: бер ер балалары —
Кеше бит беҙ,
                    эйе, оҡшашбыҙ.
Бер туғандар кеүек йәшәр өсөн
Тыуғанбыҙ бит, уйҙаш-моңдашбыҙ.

*1986, 1992*

## Серҙәрем — йылдар сатҡыһы

Ғүмергә һаҡлар серҙәрем
Күңел төпкөлдәремдә.
Барлап сығам
                    ҡояшлы йә
Болотло көндәремдә.

Серҙәрем — йылдар сатҡыһы —
Сағыуы, тоноғо бар.
Тик үҙемә бөтәһе лә
Берҙәй ҡәҙерле улар.
Эскәйҙәрем бошҡан саҡта,
Сағыуынан нур алам.
Тоноҡтары
ҡабат-ҡабат
Төрлө уйҙарға һала.

*1984, 1992*

## Ғүмер

Бабай, һин ҡалай ҡарт инең,
Мин — малай инем.
«Ҡарт» тиһәләр,
Һиңә ҡарап
Самалай инем.
Эй ашығып үтә йылдар,
Юҡ тыйыр сара.
Бөгөн килеп самалайым
Үҙемә ҡарап:
Теге ваҡыт һин бит минән
Булғанһың кесе.
Ул «бабайға» ҡарағанда
Мин — оло кеше.
Күргән һайын уйлап ҡуям:
Һин — шул уҡ һаман.
Икебеҙ бергә атлайбыҙ
Бер яҡҡа табан.
Айырма шул:

Һин — олатай,
Мин хәҙер — бабай.
Ул-ейәндәр аңламаç шул,
Улар бит — малай.

## Үҙемдең һәр хатаға...

Була өҙә баҫҡан саҡ —
Уй-хистәрем ташҡан саҡ.
Була яҙа баҫҡан саҡ —
Үкенеү баштан ашҡан саҡ.
Аңлағандар ҙа була,
Була аңламағаны.
Һанлағандар ҙа була,
Була һанламағаны.
Онотолоп киткәндә
Аҡыл телгә килһәсе.
«Йөҙ йылмайтҡан һәр берәү
Дуҫ булмай», — тип әйтһәсе.
Аҡыллылар саҡ ҡына
Тыйһасы өгөт һүҙен,
Үҙемдең һәр хатаға
Баш хөкөмдар — мин үҙем.

*1980*

## Ярай әле баҙлар өмөт бар

Элек тә ул шулай булды микән?—
Йылға торор һәр бер тыумыш көн.
Баҙлар өмөт, шиктәр, тоçмалдар —
Бөтәһе лә бергә, бер бөтөн.

Шундай көндәр-йылдар урала
Бер йомғаҡҡа — беҙҙең йөрәккә.
Ярай әле баҙлар өмөт бар,
Шул әйләнә таяныс-терәккә.
«Бар ышаныс һеҙҙең үҙегеҙҙә», —
Һәр тыумыш көн шуны иҫкәртә.
«Көс, нәфсегә аҡыл баш булһын», —
Уй тоҫмалы шуны эшкәртә.

*1994*

## Моңһоу шиғыр

Эшкә барам. Эштән ҡайтам тағы,
Дуҫ-иштәрҙең ҡулын ҡыҫа-ҡыҫа.
Теүәлләнгән һымаҡ булһа бер эш,
Икенсеһе алға килеп баҫа.

Көндәр, айҙар, йылдар үтә шулай,
Миҙгелдәрҙе миҙгел алмаштыра.
Йонсоу көҙөн, ҡыш саҫҡауын үтһәң,
Яҙ, йәй килеп тағы алдаштыра.

Барыһын да ҡабул итәм хәҙер
Манмай ғына хыял нурҙарына.
Яҙ — яҙ булып, йәй, көҙ — үҙ төҫөндә,
Ҡыш — ҡыш булып инә йырҙарыма.

Әллә ниңә ихлас көлгәндә лә
Һирәк кенә сыға күҙ йәштәре.
Үҙемдеке түгел, кешеләрҙең
Яҡыныраҡ шатлыҡ, хәсрәттәре.

Юлдаштарһыҙ юлға һирәк сығам —
Дыуамаллыҡ менән бик дуҫ түгел.
«Һин бит улай түгел инең һис», — тип,
Мыжып ала былай ҡай саҡ күңел.

Ни хәл итмәк,
Ярһыу тайҙар ҙа бит,
Ҡамыт һуҡһа,
бер аҙыҡҡа килә.
Һәүетемсә генә тарта йөгөн,
Елгәндә лә яйын белеп елә.
Шулай ҙа мин
ярһыу йөрәгемдең
Һүндермәйем янар вулкандарын.
Ҡапыл гөлтләп, ҡапыл һүнмәһен, тип,
Тыйыбыраҡ торам: тандыр янһын.

*1996*

## Бар мираҫым

Был таңдарҙы кемгә ҡалдырырмын?
Күңелемдең мөлдөрәмә сағы:
Кәкүк ҡайтҡан, муйыл сәскә атҡан —
Моңға тулған бөтә тирә-яғым.
Был тауҙарҙы кемгә ҡалдырырмын?
Ырыу ҡотон һаҡлар солоҡтарҙы?
Бар тереклек сарсап көткән саҡта
Шифа ямғыр түгер болоттарҙы?
Был һыуҙарҙы кемгә ҡалдырырмын —
Ағиҙелем, хисле Нөгөшөмдө?
Тормош ҡына тигән гөл-баҡсанан

Тиреп өлгөрмәгән емешемде
Кемгә ҡалдырырмын?
Һиңә булыр,
Бишектәге сабый — ил ырыҫы!
Инселәрһең һин дә сабыйыңа,
Хозур килеш һаҡла — шул бурысың!
Минән ҡалыр ҡусты, һеңлеләрем,
Ағай, апай, һеҙгә өндәшермен:
Таңым, тауым, моңом, һыуҙарымды
Барығыҙға тигеҙ өләшермен!
Йөҙ йыл йәшәр инәй, бабайҙарым,
Бер үтенес булыр һеҙгә минең:
Өлгөрмәһәм, ғәҙел генә итеп
Өләшегеҙ донъя гүзәллеген,
Бар мираҫым тик шул ғына булыр...

*1989, 1997*

## *Иҫтәлектәр, бағышлауҙар*

### Күңелем үҫте...

Бер төркөм яҙыусылар менән Бөрйән районында йөрөп ҡайттыҡ. Был төбәктә рухи донъябыҙ йәнлелеген, милли дәртте тойоп, күңелем үҫте.

Бөрйәндә Самат Ғәбиҙуллин тигән шағир йәшәгәнлеген ишетеп белә инем. Шағирҙы үҙ тыуған тупрағында, үҙ халҡы менән аралашҡанда күреү илаһи күренеш икән. Ул үҙ илендә һәр кешене, һәр ташты, һәр һуҡмаҡты белә, уны ла һәр кем үҙ итеп таный. Халыҡсан шағирҙар ғына ошондай танылыуға эйә булаларҙыр...

Мостай КӘРИМ
*(«Совет Башҡортостаны», 1989 йыл, 20 октябрь)*

# Шағир урамы

Ҡәләмдәшемдең 1967 йылда донъя күргән «Тауыш килә тауҙарҙан» китабын ҡарап ултырам да берсә аптырайым, берсә һоҡланам: ғәжәп кеше булған икән дә Самат. Үҙе ябай ғына, сабыйҙарса бер ҡатлы, тиҙ генә яраланып барыусан, сибек... Ә шиғырҙарында ана ниндәй:

*Дауылдарға күкрәк киргән*
*Ҡаяларҙың ише мин.*
*Теләһәм, бөтә йыһанды*
*Дер һелкетер кеше мин...*

Әйтергә кәрәк, Самат Ғәбиҙуллиндың эскә йәшерелгән сая холҡо, ҡыйыулығы, батырҙарға хас тәүәккәллеге шиғырҙарында сатнатып әйтеп бирелгән. Уларҙағы баҙыҡ образдар, сағыу биҙәктәр, ярһыу хис-тойғо Саматтың үҙе лә тормошта шундайын бер ғәйрәтле, батырҙарса фиғелле, олпат баһадирҙыр тип уйлата. Бына ҡайҙа шиғриәттең ышандырыу көсө, арбар хисе!

Элегерәк (1965—1968) күрешә йөрөһәм дә, уның менән ныҡлап, яҡындан танышыу минең ғаиләм менән Бөрйәнгә уҡытырға барғас булды. Район үҙәге Иҫке Собханғолда уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһендә осраштыҡ.

Мин Бөрйәнде һорашам (миңә бында йәшәргә, эшләргә бит әле!), ә уны Өфө яңылыҡтары ҡыҙыҡһындыра: «Ҡәләмдәштәр ни хәлдә? Ниндәй яңы китаптар сыҡты?..» Һөйләшеп һүҙ бөтмәне, кәңәшмә үтеп тә китте. Айырылышыр алдынан Самат эшләп йөрөгән район гәзите редак-

цияһына инеп сыҡтыҡ. Ул миңә үҙенең уҙған (1967) йылда ғына сыҡҡан тәүге китабын бүләк итте. Автографын әле ҡат-ҡат уҡыйым: «Ҡәҙим дуҫ! Бергә-бергә үтһен ғүмерҙәр. Ят күрмәһен беҙҙе ят күҙҙәр. Самат. 25.08.68.»

— Исеме ниндәй бит әле китабыңдың! — «Тауыш килә тауҙарҙан!» — тип һоҡланыуыма ул, ғәҙәтенсә һаран ғына йылмайҙы ла:

— Уҡып сығырһың. Эсендә шиғырҙары ниндәйҙер әле... Әйткәндәй, шиғырҙарыңды гәзиткә ебәр әле. «Әҙәби бит» бирербеҙ. Һинең Бөрйәнгә эшкә килеүеңде шуның менән билдәләрбеҙ, — тип ҡуйҙы.

Ә китаптағы шиғырҙары шәп ине. Авторҙың шымыраҡ бер кеше булыуы, тышҡы йөҙ-ҡиәфәте шиғырҙарҙың юғарылығын билдәләмәй шул.

*Урал менән халҡым шуға бөгөн*
*Ер йөҙөндә берҙәй һөйкөмлө:*
*Урал горур, минең халҡым кеүек,*
*Халҡым горур, Урал шикелле!*

Бына был — шағир Самат Ғәбиҙуллин, шағирҙың ысын йөҙө, ә тормош-көнкүрештәге, донъяның ығы-зығыларында ҡаҡҡыланған-һуҡҡыланған ябай, үтә бер ҡатлы Самат түгел.

Шиғырҙарында ул, ысынлап та, үҙенә оҡшамағансараҡ батыр ҙа, ҡыйыу ҙа, ауан да. Әле тәүге китабы сыҡмаҫтан байтаҡ алда «Ленинсы» гәзитенең «Шиғыр блокноты»нда уның бынамын тигән бер шәлкем шиғырҙары (ун алты шиғыр!) донъя күрҙе. Шул шәлкемгә дөйөм

исем биргән шиғри юлдарҙы беҙ, БДУ студенттары, ятлап алып, һөйләп йөрөнөк:

*Эй, йөрәгем — янған усаҡ,*
*Ҡас ышыҡтан, сыҡ асыҡҡа!*
*Елпеп торһон заман еле*
*Һәм шаңдаҡ бир тирә-яҡҡа...*

Беҙ Бөрйәнгә эшкә килгәндән алып Самат беҙҙе ташламаны. Байназарға килгән һайын йә мәктәпкә, йә беҙ йәшәгән туҡалаҡ ҡына мәктәп өйөнә инер ине. Ул һүҙендә торҙо: минең бер шәлкем шиғырҙарымды «Ҡунаҡ булып килмәнем мин Бөрйәнгә» тигән дөйөм баш менән «Таң» гәзитенә бирҙе. Һәм артабан да ай һайын «Әҙәби бит» махсус сығарылышын уҡыусыларға еткереүҙе ул ғәҙәткә индерҙе, йолаға әйләндерҙе. Тап ошо осорҙа районда әҙәби мөхит яҡшырҙы, башлап яҙышыусы ҡәләм тибрәтеүселәргә иғтибар артты. Әҙәби түңәрәк эшләп китте. Башланғыс ижадымда мин дә әүҙемләшә төштөм.

Самат «Таң»да шиғырҙарҙан тыш йәмғиәт тормошона ҡағылышлы теге йәки был материалдар яҙыуымды һорап, яңылыҡтарҙы һорашып мәктәпкә шылтыратып торҙо. «Ана шуны тиҙ генә яҙып ебәр, Ҡәҙим!» — тип үтенә. Һорауын бер-ике көн эсендә үтәй һалып, материалды ебәреүем була, ул балаларса ҡыуанып йәнә шылтырата, ихлас рәхмәтен белдерә. Уның ҡыҙыҡһыныу даирәһе лә ваҡыт үтеү менән төрләнә, киңәйә барҙы. Минән ул йәнә халыҡ ижадына, тел хикмәттәренә ҡағылышлы материалдар ҙа һорап алып баҫтырҙы. Байназар урта

мәктәбендә уҙғарылған төрлө әҙәби сараларҙы, кластан тыш эштәрҙе, кисәләрҙе лә Самат йыбанмай гәзит биттәрендә яҡтыртып барҙы.

Беҙ Бөрйәндән күсеп киткәнгәсә килеп йөрөнө ул, беҙҙе ташламаны. 1970 йылдың йәйендә, беҙ ҡапыл ғына күсеп китеп барғас, был хәлгә ышанмай, Байназарға килеп, беҙҙе эҙләп йөрөгән. Уға беҙҙең бушап ҡалған өйҙө асып күрһәткәндәр. Шунда ғына Самат беҙҙең Бөрйәндән китеүебеҙгә ышанғанлығын хатҡа яҙҙы...

Хат тигәндән, Саматтың миндә байтаҡ хаттары һаҡлана. Уларҙың барыһында ла унын миңә ҡарата булған ихласлығы, эскерһеҙлеге, дуҫтарса тоғролоғо ярылып ята.

1996 йылдың 3 авгусында Бөрйәндә (Шүлгән мәмерйәһенә барышлай) осрашыуыбыҙҙа мин уға үҙемдең «Рух яҙыуы» китабымды биргәс, шундуҡ кире һондо: «Бәттәс, автограф яҙ! Нисек инде буш бирәһең?» — тине. Унын күҙҙәре һағышлы, ҡарашы уйсан ине. Шундай йәл булып китте Самат, йәшлек саҡтары иҫкә төштө. Хәҙер минең алда торған Самат инде олоғайған, ныҡ бирешкән, һаулығы ҡаҡшаған кеше. Ә ул саҡта уға ни бары 57 йәш ине. Һаулығы насарайыу сәбәпле, ул эшләмәй, Иҫке Собханғолдағы фатирында бер үҙе, пенсияға ғына йәшәп ята.

Донъяның яңы ғына аҡҡа төрөнгән мәлендә — ҡыш башында беҙ Сабир Шәрипов менән икәүләп йәнә Бөрйәнгә Самат янына килдек. Уны Яңы Мөсәт ауылында апайҙарында эҙләп таптыҡ. «Көнөбөҙ» тип исемләнгән өр-яңы китабын ҡулына алғас, күҙҙәренән йәш тәгәрәне унын: «Алты йыл көттөм мин һине!» — тип ке-

нә әйтте дуҫыбыҙ. Ысынлап та, уның «Сыңлар ҡылдарым» (1990) китабынан һуң алты йыл үтеп тә киткән икән шул... Шунан, үҙенең ныҡ тулҡынланыуын көскә тыйып, беҙҙе өйгә сәй эсергә саҡырҙы...

Ҡышҡы көндөң ғүмере ҡыҫҡа. Самат дуҫыбыҙ беҙҙе оҙатырға сыҡты. Һөйләшеп һүҙ бөтмәне, айырылаһы ла килмәй.

Яуыр-яумаҫ, иренеп кенә ҡар һибәләй. Көн йылы, тымыҡ. Шөкөр, бурандарға алыҫ әле. Ауыл янындағы мәңге туңмаҫ Ҡаранйылға, боҙ селтәрҙәр менән ҡаймаланған ярҙарына сыңсың һуғылып, ҡышҡа һис кенә лә иҫе китмәй, кинәнеп аға ла аға. Гүйә, ер битенә сал тарихын яҙып бөтөп, бөгөн ул шиғыр яҙа. Бөрйән данын илгә күтәреүсе арҙаҡлы улдарының береһе — Самат Ғәбиҙуллинға маҡтау йыры — мәҙхиә яҙа һымаҡ тойолдо миңә Ҡаранйылғаның ҡыш башындағы был дәртле ағышы...

Был беҙҙең шағир Самат Ғәбиҙуллин менән һуңғы осрашыуыбыҙ булды.

## Шағир урамы

*Ҡәләмдәшем Самат Ғәбиҙуллиндың*
*яҡты иҫтәлегенә*

Ҡобайырҙар иле,
Ҡурай иле,
Күле «Йылҡысыҡҡан» — күргәнгә.
Бабсаҡ ҡәбере.
Серле Шүлгән... Хатта
Шағир урамы бар Бөрйәндә.

Эйе, унда шағир урамы бар,
Ҡаяларға башын терәгән.
Терәмәгән —
Йүгереп килә лә ул
Тулҡындарға төшөп тирбәлә.
«Самат урамы» ул — шишмә ише:
«Баҙал»дарҙан алып көс-ҡеүәт,
Ҡорғаҡ күңелдәргә килеп ҡоя,
Ҡайнар тойғо, тилбер хис тейәп!

Бөрйән урмандарын һиҫкәндереп,
Уятып Мәсем, Юрма тауҙарын,
Тауыш килә — тау шишмәһе сыңы —
Ҡаяларҙан шаңдау ауҙарып...

Сал Бөрйәндә «Самат урамы» бар,
Ҡаяларға башын терәгән.
Терәмәгән — йүгереп килә лә ул
Ағиҙелгә сумып тирбәлә...

Йыр-моңло ил.
Шиғри хискә бай ил —
Мең йыр, мең һүҙ, мең төҫ йылмая...
Ғәжәп булыр ине:
Шул Бөрйәндә
Шағир урамы ла булмаһа!

*2002*

Ҡәҙим АРАЛБАЙ,
шағир, Салауат Юлаев исемендәге
Дәүләт премияһы лауреаты

## Шағир хаҡында «ипле» һүҙ

Самат ағай хаҡында яҙыу теләге менән ҡулға ҡәләм алғас та, уның бер шиғри дүрт юллығы иҫкә төштө:

*Осрашҡанда, ҡыуанам, тип*
*Шарылдама, ҡуйсәле.*
*Ихлас булһаң, иплэп күреш,*
*Ипле һүҙең ҡушсәле...*

Күктәргә күтәреп шапырыныуҙы үҙһенмәҫ, шул уҡ ваҡытта илтифатһыҙ һүҙҙе лә хушһынмаҫ, тураһын әйтеп, тура ҡарап һөйләшергә ярата ине ағай үҙе.

«Ипле һүҙ»емде бала саҡ хәтирәләренән башлағы килә. Ауылда беренсе булып тигәндәй, университеттың көндөҙгө бүлеген тамамлап, Өфөнән ҡайтҡан егеттең беҙҙең етенсе класҡа башлап дәрескә килеүе һаман да хәтерҙә. Йәш кешенең үҙен нисек тоторон, ниндәйерәк эш ҡушырын, шуға ҡарап талапсанмы, уҫалмы булырын алдан самалап, бик оҙаҡ шыпшым ултырған инек шул саҡта. Һан яғынан күп булмаһаҡ та, тәжрибәһеҙ уҡытыусыны сығырынан сығарырлыҡ шаян малайҙар бар ине арабыҙҙа. Шуларҙың «һынау»ын артыҡ шаушыуһыҙ үтте ағайыбыҙ. Беҙгә ҡарата уның бер «миһырбанһыҙлығы» булды: уңайы тура килгәндә рәхәтләнеп көлөргә ваҡыт бирмәй торғайны. Тел, әҙәбиәт дәрестәрендә ундай мәлдәр тыуып ҡына тора: йә берәй уҡыусының ҡыҙыҡ һорау-яуабы, йә әҙәби геройҙарҙың мәҙәге... Уҡытыусыбыҙ үҙе ҡапыл яңғыратып көлөп

ебәрә лә, беҙ аңғарып, ауыҙ асып өлгөргәнсе, шып туҡтай, ә инде көләргә тотонһаҡ, етди ҡиәфәт менән беҙҙе тыйырға керешә... Ул осорҙа һәр беребеҙҙең төрлө йырҙар, һынамыштар, иҫтәлектәр яҙа торған ҡуйын дәфтәре була торғайны. Күптәребеҙ шунда шағир ағайыбыҙҙың гәзит-журнал биттәрендә баҫылған шиғри шәлкемдәрен ҡырҡып йәбештерә йәиһә күсереп ала, тик үҙенә белгертмәйбеҙ, оялабыҙ. Ул ваҡыттарҙа уҡытыусыларға башҡаларҙан ныҡ юғары торған хөрмәтле заттар тип ҡарағанғамы, уларҙың шәхси тормошоноң уҡытыу-тәрбиә процесына туранан-тура ҡағылышы булмаған холоҡ-халәттәре менән артыҡ ҡыҙыҡһыныу тәртипһеҙлек, ҙур әҙәпһеҙлек һанала ине. Шиғыр яҙыуҙы ла беҙ үтә шәхси эш тип һанағанбыҙҙыр, күрәһең.

...Шағирҙың бәләкәй генә форматта 1967 йылда сыҡҡан тәүге «Тауыш килә тауҙарҙан» йыйынтығы райондаштар — бөрйәндәр, ауылдаштары аҫҡарҙар тарафынан ҙур ғорурлыҡ менән ҡабул ителде, республика кимәлендә лә яңғыраш алды, шәхсиәтенә «Тауҙар йырсыһы» тигән исем дә тағылды, буғай. «Ғүмер юлым үтә тау битләп» тигән шиғырында:

*Ҡайһы ташҡа барып сыҡһам да,*
*Тауҙар-тауҙар мине уратҡан...*
*Тора улар,*
*Ҡайҙа баҫһам да,*
*Нимә эшләһәм дә, күҙәтеп...—*

тип яҙғанынса, уның күпселек ғүмер юлы таулы-ташлы йәнтөйәгендә — Бөрйәндә уҙҙы.

Әйтергә кәрәк, бала саҡтан уҡ үҙенең ата-әсәйенән алып алыҫ ата-бабаларына тиклемге нәҫел-нәсәбенең нисегерәк донъя көтөүҙәрен яҡшы белгән туған-тыумаса араһында йәшәүҙең рәхәт яҡтары ла, ҡыйын мәлдәре лә була. Һуңғыһы хатта күберәктер, сөнки көнитмешеңдең һәр минутын тигәндәй ауылдаштарыңдың һынамсыл күҙҙәре оҙата, ауыҙыңдан ысҡынған һәр һүҙең үҙ ихтыярыңдан тыш һаҡ ҡолаҡтар тырышлығы менән шундуҡ таралып-төрләнеп китә, ә сер һаҡлау тураһында әйтәһе лә юҡ, «йүкә телефон» да өҙөлөү белмәй. Бындай тормош «прозаһы», шағиранә тойғоло-хисле, яҙыусының хыял даръяларын күпмелер быуып, ижади фантазияһын тулыһынса эшкә егергә ҡамасаулап, күңеленә ниндәйҙер кәртә лә ҡуйғандыр.

*Дағаларҙан сәсрәп ҡалған таштай,*
*Юлдарымда сәселеп ҡалдығыҙ,*
*Аҡҡа төшмәй,*
*телгә килеп етмәй,*
*Күптәрегеҙ эстә яндығыҙ,—*

тип әсенеүе лә бушҡа ғына түгелдер шағирҙың. Яҙғандарҙы ла бит халыҡтың байтағы йыш ҡына «булған-булмаған» күҙлегенән баһалай һәм ысынбарлыҡтан саҡ ҡына художестволы тайпылыуға «юҡты яҙған» тип мөһөр баҫырға әҙер генә тора. Шуғалыр ҙа, бәлки, Самат ағайҙың шиғриәтендә автобиографизм көслө, әҫәрҙәрендәге лирик геройҙы шағирҙың үҙ шәхесенән айырып ҡарау мөмкин дә түгел һымаҡ. Улар

бергәләп тауҙар юлынан атлай, шишмәләр сафлығы өсөн көрәшә, Бөрйән урмандарының яҙмышы өсөн борсолоп оран һала, ырыу йыйынында ҡайнаша, инәйҙәр менән өмә-байрамдарға, һуғым аштарына йөрөй, «тандыр ғына, баҙлап ҡына» янған усаҡ йылыһында ҡыҙына «ғашиҡмын тип һөрән һалмай ғына», тыуған ерҙең гүзәллегенә шатланып йәшәй.

Ана шул шау-шыулы тормошта, халыҡ кисергәнен кисереп, ыҙа-ҡайғыларын иңдәрендә тигеҙ күтәреп, шатлыҡ-ҡыуаныстарын ихлас бүлешеп, «бер туғандар кеүек» берҙәм ғүмер һөрөү — асылда, йәшәүҙең төп мәғәнәһе, тип иҫәпләй шағир.

*Быныһы һәйбәт, тегеһе шәп түгел тип,*
*Яһамайыҡ тоҡос һығымталар.*
*Ваҡытына ҡарап*
*мөһимлеге —*
*Һәр кемдең дә үҙ урыны бар,—*

тип яҙа ул «Тормош фәлсәфәһе» шиғырында.

Тәбиғәттә һәр бер йән эйәһе, берен-бере тулыландырып, бер-береһе менән һыйышып, берберeһенә артыҡ ҡамасауламай көн күрергә яраҡлашҡан. Кеше лә ошо тәбиғи ҡанундарҙан ситкә тайпылмаҫҡа тырышырға тейеш. Тарих төпкөлөнән үк нығынған йәшәүҙең был ҡанунын иҫәпкә алмау, күрәләтә боҙоу кешелектең үҙенә ҡурҡыныс тыуҙыра. Ошо хәҡиҡәтте яҡшы аңлаған шағирҙы шуғалыр ҙа, 90-сы йылдар башында илдә власть түңкәрелеүҙән, хаҡ-

тар ысҡыныуҙан бигерәк, кешенең үҙе «ысҡыныуы» ҙур хәүефкә һала. «Нишләнек һуң беҙ, ватандаштар? Ыҙғыш, татыулыҡ юҡ!» — ошондай пафослы аптырау менән:

*Бирешмәçкә, эй, йәшәргә ине*
*Салт аҡылға ҡушып тапҡырлыҡты.*
*Һөмһөҙләнмәү, Кеше булып ҡалыу —*
*Бөгөнгө көн иң ҙур батырлыҡтыр! —*

тип тә ярһыны әҙип 1991 йылдың 18 авгусында болаҡ путч көндәрендә. Кеше булыу, ниндәй генә хәлдәргә тарығанда ла, кешелек дәрәжәһен төшөрмәү — шағирҙың әҙәми заттарға ҡуйған төп талабы. Ябайҙарҙың ябайы булып, үҙ ерендә теләгәненсә — артыҡ күҙгә лә ташланмай, артыҡ юғалып та ҡалмай — гүмер йомғағын тыныс ҡына һүтеү — уның өсөн бәхеттең үҙелер, хаҡ яҙмыштыр. Үҙен бейегерәк, бөйөгөрәк итеп күрергә теләгән дуç-иштәренә төбәлгән шиғри яуабы әлеге фекеребеҙҙе ҡеүәтләмәйме ни?!

*Аптырап ҡаламын ҡай саҡ:*
*«Олпатыраҡ тот үҙеңде,*
*Һин бит түгел минең ише!»*
*Үҙемде үҙем хурламайым,*
*Үҙемде үҙем ҙурламайым,*
*Юҡ, юҡ! Мин бит һинең ише — Кеше!*

М. Ғафуриға эйәреп яҙылған «Бер төрлөләр араһында» тигән шиғырынан күренеүенсә, шағир үҙ-үҙенә мысҡыллабыраҡ та ҡарағандай.

Ысынлап та, унда автопортрет фәлсәфәһе асыҡ төҫмөрләнә.

*«Зурҙар» янына һыймайым,*
*«Ваҡтар» янына һыям,*
*«Зур» янында ваҡланма, тип*
*Үҙемде үҙем тыям.*
*«Аҡыллылар» араһында*
*Үҙемде артыҡ тоям.*
*«Бер төрләләр» араһында*
*Йөрөйөм, аҡыл йыям.*

Иҫкә төшөрәйек: үҙеңде кесерәйтеп күрһәтеү — башҡорт әҙәбиәтендә борондан килгән поэтик традиция. «Ҡол, мәжнүн, бахыр, меҫкен...» һ. б. теҙемендә М. Аҡмулланың

*...Әфлисун араһында мин бер кишер...*
*...Беҙ байғош, бөйөктәрҙән алашабыҙ.*
*Кесерәйтһәгеҙ, кесерәйергә мин яраймын,*
*Үҙегеҙ ҙурайырға яраһағыҙ...—*

тигән атаҡлы юлдарын иҫкә төшөрөү ҙә етә.

Самат Ғәбиҙуллин шиғриәтендә һынланған лирик герой һис кенә лә, «бәләкәй кеше» фәлсәфәһен һуҙып, «арба ватылһа — утын, үгеҙ үлһә — ит» тип, тормош ағышына күндәм риза булып ятыусыларҙан түгел. Шағир ололаған сифатты — ябайлыҡты, «бер төрлөлөктө» шулай уҡ бер ҡатлылыҡ, йәиһә битарафлыҡ тип тә аңларға ярамай. Үҙенең тәүге китабында уҡ шағир «Эй йөрәгем, янған усаҡ, ҡас ышыҡтан,

сыҡ асыҡҡа» тип, «заман елдәрен тойоп», ил һәм халыҡ хәстәре менән янып-ярһып йәшәргә саҡырҙы.

Уның әҙәби геройына тәбиғилек хас, шуға ла кешелек, донъя, ил, халыҡ, тыуған ер хаҡындағы әҫәрҙәрендә ҡоро декларатив раҫлауҙар, ялған пафос менән һуғарылған шалтырауыҡ саҡырыуҙар, ялҡытҡыс өгөт-нәсихәт юҡ. Барыһы ла әҙәмсә, таныш һәм танһыҡ образдар, ғибәрәләр... Халыҡ поэзияһына яҡынлығы — уның булмышындағы сәсәнлек сатҡыларының сағылышылыр, тип уйларға урын бар (атаһы Мәһәҙей ағайҙың бәйет, йырҙар, төртмә таҡмаҡтар сығарып йөрөгәнен ауылда әле лә иҫләйҙәр). Бер ыңғайҙа Самат Ғәбиҙуллин шиғыр технологияһын бик яҡшы белә, шиғыр строфикаһы, рифма ҡороу оҫтаһы, тип раҫлау ҙа хилафлыҡ булмаҫ. Хәйер, был хаҡта махсус фекерҙәр ҙә киләсәктә әйтелер. Әйтелергә тейеш — шағир шуны өмөт итә:

*Шиғырҙарым — ғәзиз балаларым!*
*Һеҙҙән алда йөрөр исемем юҡ,*
*Йәшәү сәмен һеҙгә һаламын.*
*Әрһеҙ балалар бит, бирешмәҫтәр,*
*Тигән өмөт менән ҡаламын...*

Зәйтүнә ШӘРИПОВА,
филология фәндәре докторы,
БДУ профессоры



Экология буйынса үткән конференциянан һуң.
*1989 йыл*

## Һағындыра, юҡһындыра...

Самат ағай Ғәбиҙуллин, минеңсә, ысын мәғәнәһендә милли шағирҙарыбыҙҙың береһе ине. Иҫ китмәле ҙур мираҫ ҡалдырмаһа ла, уның исеме башҡорт шиғриәтендә үҙенә күрә тауҙар төпкөлөнән һарҡылған һағышлы шаңдау һымаҡ яңғырай; йыл артынан йыл уҙһа ла, сәсәни һүҙе әҙәби офоҡта шаңдаҡ кеүек балҡый. Ул ижадында ябайлығы, эскерһеҙлеге, тәбиғилеге һәм халыҡсанлығы менән алдырҙы тиһәк, һис хилаф булмаҫ. Шәхсән тормошта ла ғәҙәти, ябай ине, үҙе дуҫ күргән ҡәләмдәштәргә, бигерәк тә йәштәргә, ярҙамсыл, кәңәшсел, хатта ки ғәҙел юҫыҡта талапсан булды. Яҙмыш һынауҙарына бирешмәҫкә, ғорурлығын юғалтмаҫҡа тырышып йәшәне.

Егәрле лә ине... Нисәнселер йылдың йәйен-

дә мин уны Иглиндағы баҡсама һалып ҡуйҙым. Бер аҙна эсендә ағайыбыҙ, үҙе уйнатып әйтмешләй, «бәләкәй саналыҡ» — егермеләп яңы шиғыр яҙҙы, элеккеләрен «ипкә-һапҡа» килтерҙе. Электр һүнгән саҡта усаҡ яҡтыһында ла, шәм баҙлауында ла ҡулынан ҡәләм төшөрмәне: «Көнөбөҙ» йыйынтығы шулай тупланды.

Ағиҙел буйҙарында ла гәпләшергә форсат таба инек. Мин ҡармаҡ һалам, ә ул тәмәкеһен ҡырын тешләп, фәлсәфәгә бирелә... Һағындыра шул мәлдәр, юҡһындыра.

Ҡулыбыҙҙағы ошо китап иһә — шағирҙың беҙгә аманаты, йөрәк һүҙе ул. (Рәхмәт инде йыйынтыҡты сығарыуға ихласлығын һалған Зөфәр Вәлиткә.)

Ҡәҙерен беләйек ул һүҙҙең. Васыят итеп һаҡлайыҡ һәм онотмайыҡ.

Сабир ШӘРИПОВ,
яҙыусы,
Башҡортостандың атҡаҙанған
мәҙәниәт хеҙмәткәре

## Ул тауҙарҙан баҡты донъяға!

Самат ағай Ғәбиҙуллиндың «Тауыш килә тауҙарҙан» тигән тәүге китабы 1967 йылда донъя күрҙе. Артабан «Шаңдаҡ», «Күңелем бишеге», «Сыңлар ҡылдарым», «Көнөбөҙ» тигән китаптарын уҡыусылар бик йылы ҡабул итте.

Ағай уйсан, әммә сәмсел шағир ине. Башҡортостандың һоҡландырғыс тәбиғәтле Бөрйән районы Аҫҡар ауылында тыуып үҫкән уҙаман-



Улы Бабсаҡ, ҡыҙы Нәфисә. *1997 йыл*

дың күп шиғырҙары йәнтөйәгенә, ҡая-тауҙарына, урман-ҡырҙарына бағышланған. Уның үҙ тормошо һәм ижады ла, шиғри образдарҙа сағылған яҡташтарының яҙмышы ла — йәшәүгә йәм, хеҙмәткә сәм биреүсе ер-һыуынан, изге тупрағынан баш алған.

Ул минең хәтеремдә тыйнаҡ, сабыр булмышы, һынамсыл ҡарашы, кешене тыңлай, аңлай белеү һәләте, аҡыллы кәңәштәре менән уйылып ҡалған. Егерме йыл буйына һуҙылған дуҫлығыбыҙ эскерһеҙ, саф ине. Күпкә өлкән булыуына ҡарамаҫтан, ул мине һәр саҡ тиң күрҙе. Ауыҙынан бер тапҡыр ҙа ауыр, әҙәпһеҙ һүҙ ишетмәнем. Уның тураһында йыш ҡына: «Самат — намыҫлы, саф кеше!» — тиерҙәр ине. Ҡайҙа ғына булһам да, Самат ағайҙың атайҙарса хәстәрлеген тойоп йәшәнем.

Хәйләһеҙ кеше булды ул. 1986 йылдың баштарында Бөрйәндән: «Өфөгә китергә хыялланып, эштән сыҡтым әле...» — тип яҙҙы. «Өфөгә ҡасан киләһең?..» — тигән хатыма июнь айында яуап алдым: «Бөрйәндәмен әле, дүртенсе ай инде район гәзитендә яуаплы сәркәтип вазифаһын башҡарам. Мөхәррир, артабан эшләү өсөн ғариза яҙ, тиһә лә, — әллә нишләп яҙманым. Йәй ысҡынып булһа, китергә ине, тик мөхәррир ысҡындырмаҫ, ахыры. Кисә, 23 июндә, төшкөһөн минең «Инсебикә»не радионан уҡығандар, үҙем белмәй ҙә ҡалдым. Әхтәм Әбүшахмановтың әҙәби-музыкаль композиция итеп әҙерләп йөрөгәнен беләинем. Минең шул инде: үҙем гел ишетмәй ҡалам. Ну, был да булғанмы ҡайғы, ярай, халыҡ тыңлаһа булды!.. Бына һиңә теге йыйынтыҡты — «Күңелем бишеге»н һалам! Өфөгә барып алып ҡайттым. Хәҙер районға ла килде. Килгән партияһы бөтөп тә бара, автограф биреүҙән бушап булмай, һорап киләләр, урамда ла осрайҙар... Шөкөр!..»

Ул Бөрйәндән китеү тураһында башҡаса һүҙ ҡуҙғатманы. «Сыңлар ҡылдарым», «Көнөбөҙ» тигән тағы ике китабын сығарҙы, фатирлы

булды, дәүләтебеҙ тарафынан уға «Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исем бирелде.

Урындағы «Баҙал» әҙәби берекмәһе етәксеһе булараҡ, Самат ағай мине уның ағзалары менән, хат аша булһа ла, таныштыра килде, уларҙың «Таң»да донъя күргән шиғыр, хикәйәләрен ебәреп торҙо. Ул саҡтағы «Баҙал» берекмәһе ағзалары — Иршат Теләүембәтов, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Зөфәр Толомғужин, Инсур Йәһүҙин, Флүр Ғазин, Сәрүәр Ғәләүетдинов, Айһылыу Ғарифуллина, Булат Тимерғәлиев, Гәүһәр Сәғитова, Таңһылыу Баһауетдинова — бөгөн инде билдәле яҙыусылар, шағирҙар...

1988 йылдың май айында ҡыуаныслы хат алдым: «...Өфөнән Барый дуҫ Ноғоманов шылтыратты. «26 апрелдә союзға — приемға!» — ти. Шатлыҡлы хәбәр, әлбиттә! Иртәгәһенә үк ысҡындым. Мөкәрәмә Садиҡова, Муса Ғәли, Кәтибә апай, шиғриәт секцияһынан рекомендация бирҙеләр. «Прием» тигәне үҙенә күрә хәтәр генә икән ул. Комиссияла 21 кеше, унан һуң идара ағзалары. Мине яҡлап иң тәүҙә Факиһа тороп һөйләне, үҙемдең элекке уҡыусым. Мин уларға (Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылы) уҡытырға барғанда, алтынсы синыф уҡыусыһы Нафиҡова ине. Хәҙер Туғыҙбаева — минең әҙәби түңәрәктән үҫеп сыҡты, бәйләнеште бер ваҡытта ла өҙмәнек тиерлек. Тик уның әле шулай иң алдан «һикереп сығырын» көтмәгәйнем, рәхмәт уға. Шунан А. Филиппов (Күгәрсендән), Тимер Йосопов, Рафаэль ағай Сафин һөйләне. Ҡул күтәреүселәр күп ине, Мостай ағай, етер, тип туҡтатты. Күҙҙәрҙән йәш сыҡҡансы маҡтанылар...»

Тағы шул иҫтә ҡалған: бынан 16 йыл элек Өфөнөң “Нефтселәр” мәҙәниәт һарайында шағирҙар бәйгеһе үткәрелгәйне. Утыҙлап шағир араһынан 1-се урын (яҙ көнө Бөрйәндән быйма кейеп килгән, бөтәһенең дә хәтерендә шул ҡалған!) Самат Ғәбиҙуллинға бирелде һәм уға телефон бүләк иттеләр... Тәбиғи, Бөрйәндә ҡыш оҙағыраҡ була, яҙ һуңыраҡ килә шул.

Самат ағайҙың һуңғы хатын 1997 йылдың 14 мартында Күгәрсендә саҡта алдым. Хатына ҡушып «Таң» гәзитен һәм миңә арналған «Иҫәнһеңдер, тимен...» тигән шиғырын һалған, миндә һаҡланған ҡайһы бер китаптарын ебәреүемде һораған. Шул көндө үк һорауын үтәнем, тик... уның исеменә «Таң» редакцияһына ебәрелгән бандеролем «Адресат вафат булды» тигән ҡара мөһөр менән кире әйләнеп ҡайтты... Әйе, ул мәңгелеккә үҙенең Бөрйәнендә ҡалды. Яңғыҙлыҡта түгел, ә ижадта янды, матди яҡтан ауыр йәшәһә лә, шыңшыманы, бөтә байлығы, ғаиләһе, һөйгәне — шиғриәт булды!

Әйе, шундай ябай кеше булды Самат ағай! «Өйөбөҙгә килһә, ҡайҙа һалһаң — шунда йоҡланы, нимә ашатһаң — шуға шөкөр ҡылды. Үҙенә бөтөнләй иғтибар итмәне, иң мөһиме — ижадҡа килгән йәштәр тип тырышты, уларға хәленән килгәнсе ярҙам итте. Хәҙер ундай ағайҙар, үкенескә ҡаршы, ҡалманы тиерлек», — тигәйне бер мәл Самат ағайҙы юҡһынып яҙыусы Сабир ағай Шәрипов.

Донъялар нисек кенә үҙгәрмәһен, Самат ағай Ғәбиҙуллиндың шиғриәте бер ҡасан да үҙенең ҡиммәтен юғалтмаҫ, тимен.

Зөфәр ВӘЛИТ




Самат Ғәбиҙуллин. *1977 йыл*



Һулдан уңға: Зөфәр Толомғужин, Айгөл Толомғужина, Самат Ғәбиҙуллин, Айһылыу Ғарифуллина. *1997 йыл*

## Уйҙарын ҡаты мендәр итеп...

Кәүҙәһен тура ғына тотоп, үҙенсә, әкрен генә баҫып, урамыбыҙҙан уҙған шағирыбыҙ арабыҙҙа юҡ. Үҙе яҙғанса: уйҙарын ҡаты мендәр итеп йоҡлай алмай ятҡандан һуң, саф һауа һулап, бер аҙ ял итергә урамға сыға торғайны ул. Самат ағайҙы фани донъя менән хушлашыр алдынан бер көн алда, редакцияға етмәҫ элек осраттым. Хәл-әхүәл һорашып, һөйләшеп киткәс — мин уның эш тип янып йөрөүен аңланым. «Һуңғы осорҙа алһыҙ-ялһыҙ эшләргә тура килә, — тип һөйләп алып китте ул. — Алтмыш йәшем тулыуға берәр йыйынтыҡ әҙерләп өлгөрөп булмаҫмы икән, тигәнерәк уйҙамын. Ваҡыт бик тар ҡалды, өлгөрә алырмынмы-юҡмы?.. Унан башҡа берекмә эштәре менән дә шөғөлләнергә кәрәк. Һин берәй яҡҡа китеп барма, 8 апрелдә «Баҙал» берекмәһенең ултырышын үткәрәбеҙ. Зөлфиә ҠаһармановаIның шиғырҙарын тикшереп, нәшриәткә тәкдим итергә кәрәк. Берекмәнең етәксеһен һайлауҙы ла ошо йыйылышта хәл итербеҙ, сөнки уның етәксеһе, һис һүҙһеҙ, редакцияла эшләгән кеше булырға тейеш». Самат ағайҙың ошо һыҙаттары, үҙе өсөн генә йәшәмәүен, фәҡәт йәмәғәт эштәрен ҡайғыртып, районыбыҙҙағы йәш таланттарҙың ижади үҫешен ҡайғыртып йөрөүе тураһында һөйләй. Филология фәндәре докторы Әхмәт Сөләйманов әйтмешләй: «Дан артынан ҡыуманы, ә тыуған төйәгенең гүзәл тәбиғәтен, уңған улдарын һәм ҡыҙҙарын данлап йырланы. Үҙе йәшәгән төбәктең таланттары үҫһен өсөн, уларға ярҙам ҡулы һуҙҙы».

Талапсан да ине ҡәләмдәштәренә ҡарата. Уның ҡулынан үткән әҫәрҙәр, Өфөлә Яҙыусылар союзы секцияһы ултырышында тикшерелеп, ыңғай баһалана торғайны.

Мостай Кәрим, Баязит Бикбай кеүек күренекле әҙиптәр шағирҙы маҡтап телгә алды. Ә ул үҙе Бөрйән төбәгендә йәш ижадсылар күбәйһен өсөн арымай-талмай эшләне. «Баҙал» берекмәһенең эшен йәнләндереү маҡсатында яныпкөйөп, уға күп ваҡыт ижадын ситләтеп торорға тура килде. Әгәр ҙә ул йәмәғәт эше менән шөғөлләнмәһә, бәлки, тиҫтәләгән китаптарҙың авторы ла булыр ине. Йәш таланттарҙы ижади офоҡтарға әйҙәүсе ул тоҡандырған усаҡ һәр беребеҙҙең күңелендә балҡып яна, янырға тейеш.

Зөфәр ТОЛОМҒУЖИН

## Һуңғы осрашыу

1969 йыл. Район үҙәге Иҫке Собханғолға юл төшөп, бер барғанымда мәҡәлә һәм шиғырҙарымды «Таң» гәзитенә биреү ниәте менән редакцияға юлландым. Ул саҡта шағирҙар Самат Ғәбиҙуллин менән Хәсән Назаровтың гөрләтеп эшләп йөрөгән мәле. Бәләкәй генә бүлмәлә мине ҡаҡса йөҙлө, буйсан, йор һүҙле бер ағай йылы ҡаршылаңы — ул Самат Ғәбиҙуллин ине.

Беҙҙең осрашыу тәүгә булһа ла, йәнле һөйләшеүебеҙ шиғриәткә бәйләнде. Шул көндән алып беҙҙең дуҫлыҡ, ижади хеҙмәттәшлек башланды. Ил һағынан яҙған шиғырҙарым да гәзит биттәрендә йыш донъя күрҙе.

«Таң» гәзитендә кемдәр үҙенең шиғырҙарын йә башҡа әҫәрҙәрен башлап баҫтырып, ижад юлына сыҡҡан, шағир Самат Ғәбиҙуллиндың ярҙамын, кәңәштәрен тоймай ҡалмағандыр.

1997 йыл. Сасҡау февраль башы. Яҡташыбыҙ шағирә Тәнзилә Дәүләтбирҙина Өфөнән Бөрйәнгә «Башҡортостан» телевидениеһына тапшырыу төшөрөү өсөн килгәнендә «Таң» гәзите редакцияһында булырға ла өлгөрҙө. Уның килеүенә тура килтереп, «Баҙал» берекмәһе ойошторған шиғриәт кисәһенә Самат ағай Ғәбиҙуллиндың саҡырыуы буйынса Айһылыу Ғарифуллина менән барҙыҡ. Самат ағай сирләңкерәп торһа ла, йөҙөнә сығарманы, кәйефе күтәренке ине.

Ул: «Әлдә килгәнһегеҙ, бында килеү еңелдән түгел, икегеҙ ҙә бер мәктәптә эшләйһегеҙ, ситтә ятаһығыҙ шул», — тине, донъяһын теүәлләгән кешеләй, үҙенең ҡәнәғәт булыуын белдереп. Редакцияла осрашыу йәнле үтте. Тәнзилә Дәүләтбирҙина телевидениеға тапшырыуын төшөрә, шағирҙарҙан Самат Ғәбиҙуллин, Айһылыу Ғарифуллина, Булат Тимерғәлиев, Инсур Йәһүҙин һәм ошо юлдарҙың авторы бер-бер артлы шиғырҙарын уҡыһа, Зөфәр Толомғужин менән Флүр Ғазин да ижади пландары тураһында һөйләне.

Һуңынан Самат ағай, «Баҙал» берекмәһенең ағзаларына апрель, май айҙарында тағы ла осрашырға кәрәк, тигән теләк тә белдергәйне. Үкенескә күрә, аяуһыҙ әжәл ижадының сәскә атҡан мәлендә уны арабыҙҙан алып китте. Хәйер, китте тип әйтеп булмай, ул үҙенең йән арбар сихри моңло йырҙары, тыуған еренә арналған шиғырҙары менән күңелдәрҙә йәшәй.

Эйе, Самат ағай ышанысłы, тоғро дуҫ та, кәңәшсе лә, ҡәләмдәш тә, арҡа терәр ағай ҙа ине. Кем уйлаған шул осрашыуҙың Самат ағай менән һуңғыһы булырын...

Сәрүәр ҒӘЛӘҮЕТДИНОВ

## Тәбиғәтсә ғәҙел талаптар ҡуя белде...

Тау һыртынан беленер-беленмәҫ кенә күренгән ағас остары араһынан алтын уҡтар осороп ҡояш ҡалҡа. Таң ата. Унан тирләп-бешеп көнө буйы тереклеккә, тәбиғәткә хеҙмәт итә лә икенсе яҡтағы тауға шылыша. Кис етә, эңер төшә. Тәүлектең ошо мәле нимәһе менәндер моңһоу, серле бит ул...

...Самат ағай Ғәбиҙуллиндың шиғриәткә, журналистикаға арналған ғүмере лә мәңгелек тауының артына тәгәрәне, байыны шулай. Ни тигәндә лә, ул яҡты донъя менән үҙ иңенә төшкән ирлек бурысын үтәп, йырын йырлап хушлашты. Ләкин уның исеме илебеҙ өсөн күптән таныш, күптән билдәле. Иле, халҡы яҙмышын уйлап, йөрәгенә ҡан һауҙырған, тыштан сабыр күренә белеп тә, эстән ут булып йәшәгән, үҙенә һәм бүтәндәргә тәбиғәтсә ғәҙел талаптар ҡуя белгәндәр рәтенә инә был исем. Шулай булмаһа: нисәмә китап авторы була алыр инеме лә, «Баҙал» әҙәби берекмәһен етәкләп, ҡарлуғастарының ҡанатын нығытып, ижади офоҡтар киңлегенә осора алыр инеме? Эйе, Самат ағайҙың өлөшө ҙур булды был тәңгәлдә!

Булат ТИМЕРҒӘЛИЕВ

## Сәсән һүҙе мәңге серемәҫ

*(Самат Ғәбиҙуллиндың баш осонда әйтелде)*

Сәйерһенде һине бик күп кеше,
Сәйерһенде хатта дуҫтарың.
Сәйерһенгәндәргә сер сисмәнең,
Дуҫ булыуҙан ғына туҡтаның.
Юҡ, әйтмәнең, бер минеке хаҡ, тип,
Үҙ туҡһаным ғына — туҡһаным.
Үҙең ише сәйерҙәрҙе тапһаң,
Сәйерһенмәй генә хупланың.
Кешеләрҙе миһырбанлы итеү,
Хисле итеү — булды хыялың.
Зыян күрһәң күрҙең, тик бирәүгә
Теймәгәндер һинең зыяның.
Ғәмһеҙҙәрҙең ғәмен уятыуың
Кеменәлер зыян булмаһа...
Аңлағаны аңлар, аңһыҙҙарҙы
Йөңкөткәне ана шул даһа.
Дан һөймәнең. Данға һыуһағанды
Ҡабул итер булдың мөрхәтһеҙ.
Дуҫ, тип ҡул һонғандар күп булһа ла,
Үрһәләнден дуҫһыҙ һин хәтһеҙ.
Тиңдәштәрең һинең күп булһа ла,
Һин бер үҙең булдың тиңдәшһеҙ.
Диуананың ғына көндәше юҡ,
Тиңдәшһеҙҙәр булмай көндәшһеҙ.
Самат — сәйер, тип сәйнәнгәндәр
Сәсән һүҙе бәҫен белмәҫтәр.
Сәсән ауһа, сәсәп, бер саҡ килеп,
Бәхилләшергә лә килмәҫтәр.

Шундайҙарҙың араһында: «Үҙем
Сәсәнерәк!» — тигән әҙ түгел.
Ундайҙарға, сәсәп сәсрәй ҡуйһа,
Үҙ әсәһе хатта йәл түгел.
Сәсрәһә лә сәсән сәсәп бер саҡ,
Йән бирһә лә, сәсән сер бирмәҫ.
Тар ҡәберҙә үҙе серeһә лә,
Сәсән һүҙе мәңге серемәҫ.
Туған телдең һәр өн, ижегенең,
Һәр һүҙенең белде ҡәҙерен,
Тик үҙенсә ынйы итеп теҙҙе
Һайлап тормай юлдың әҙерен.
Шыңшығанда күптәр —
шыңшыманы,
Белгән өсөн үҙе ир ғәмен.
Ғүмер буйы йырлап һис ҡанманы
Тыуған Бөрйәненең бар йәмен.
Тыуған яҡтың йәмен генә йырлау
Ҡулынан килә бары хөр йәндең.
Тик киләсәк аңлар: сәсән үҙе —
Йырланмаған йәме Бөрйәндең!
Аҡырып илаһаҡ та, ҡайтмаҫ кире
Асмандарға ашҡан хөр йәнең.
Иҫтән сығарһа ла башҡа тараф,
Оноталмаҫ һине Бөрйәнең.
Онотмаһын!
Шулдыр теләгем.

Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ,
филология фәндәре докторы, профессор,
Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт
премияһы лауреаты



Самат Ғәбиҙуллин яҡташы профессор Әхмәт Сөләймәнов менән

# Китте

*Остазым Самат ағай*
*Ғәбиҙуллиндың яҡты иҫтәлегенә*

Китте айҙар, китте йылдар,
Китте кешеләр...
Бөтәһе лә ваҡытлыса
Киткән төҫләләр.

...Тыҡрыҡтарҙан пар аттарҙа
Китте йәш саҡтар.
Болот эстәренән кешнәп
Баш сайҡай аттар...

Ҡырҙа кәйеф-сафа ҡора
Ҡара ҡарғалар.
Ерҙә аунай күпте күргән
Ватыҡ арбалар.

Урмандарҙа шаулай елдең
Дәрүиш туғаны.
Ишетелә унын ҡышты
Өҙләп ҡыуғаны.

Китте көҙҙәр, китте ҡыштар,
Китте кешеләр...
Ҡалды яҙҙа — ярты етем
Минең ишеләр...

*Март, 1997 йыл*

## Һүҙҙәрен тыны менән иретеп...

Тамырҙарын, шиғри тамырҙарын
Тыуып үҫкән ере һуғарҙы.
Ул һүҙҙәрен тыны менән иретеп,
Сыныҡтырып, ҡойоп сығарҙы.

Сал Бөрйәндең тоғро йырсыһы ла
Һәм улы ла булды халҡының.
Күкрәгендә һаҡлай, аҡлай килде
Төйәгенең йөрәк ялҡынын.

Сал ҡаялар, тере шишмәләре
Көс өҫтәне уның һүҙенә...
Тыуған ере шағир күҙе менән
Ҡарай бөгөн донъя йөҙөнә.

Зөфәр ВӘЛИТ

* * *

*Остазым Самат ағай Ғәбиҙуллинға*

Шиғырҙарым уҡып һөйөнөүсе,
Хәсрәтемде аңлап көйөнөүсе
(Ҡаламы ул, ҡалмаймы ул хәтер),
Тура ҡарап тәнҡит һүҙен әйтер
Һин, остазым, юҡ шул арабыҙҙа.
Таланттарға теүәл баһа бирер,
Бушбоғаҙҙың өнөн баҫа бирер,
Аҡты — аҡ, тиер, хаҡты — хаҡ, тиер гелән,
Изгелектәр ҡылып, бәхет теләр
Һин, остазым, юҡ шул арабыҙҙа.
Бөрйән данын һин бит күтәреүсе,
Йөрәгеңдән барын үткәреүсе,
Йәш таланттар өсөн борсолоусы,
Терәк-ҡалҡан инең ҡурсалаусы,
Һин, остазым, юҡ шул яндарымда.
Баҙап ҡалды инде «Баҙал»ың да,
Остазым юҡ инде яндарымда.
Сәбәләнә яңғыҙ мин — уҡыусың,
Йән дә, тән дә, намыҫ, мөхәббәт тә
Һатылғанда тормош баҙарында,

Шиғырҙарым уҡып һөйөнөүсе,
Хаталарым өсөн көйөнөүсе
Яндарымда юҡ шул остазым —
Шуға һағыш-моңло был сазым...

Айһылыу ФАРИФУЛЛИНА




«Таң» гәзите коллективы менән. *1997 йыл*

* * *

*Самат Ғәбиҙуллин иҫтәлегенә*

Ҡая кеүек ҡаҡса йөҙлө
Ине Самат атлыбыҙ.
Ул атайсал ғорурлығы
Булды, тиһәк — хаҡлыбыҙ.
Матур Бөрйән тәбиғәтен
Гүзәллектә данланы.
Сикһеҙ ябайлығы менән
Күңелдәрҙе яуланы.
Иңдәренән ғүмер буйы
Илдең йөгө төшмәне.
Үҙ иңенә аҫылған йөк
Башҡаларға күсмәне.
Һәр төйәктең үҙ бөркөтө —
Бөркөт ҡуна ҡаяға.
Унының үткән ғүмере оҡшап
Ҡуйҙы умырзаяға.
Китеп беҙҙең арабыҙҙан,
Йөрәктәрҙе яндырҙы.
Үкенмәҫлек —
Сағандарҙан
Уҡтар яһап ҡалдырҙы...

Рауил ИШБАЕВ

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

***Тыуған ерем — төйәгем***

Кешеләрем! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
Ҡас ышыҡтан, сыҡ асыҡҡа . . . . . . . . . . . . . . 5
Бөрйән ырыуы йыйынына . . . . . . . . . . . . . . 6
Берҙәм баҫһаҡ... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 7
Илгә иткән изгелектәр... . . . . . . . . . . . . . . 8
Юҡ, үҙгәртеп булманы әле . . . . . . . . . . . . . 9
Ҡараштар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 10
Шайтан аҙҙырғандыр шул... . . . . . . . . . . . 12
Көнөбөҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 13
Шулмы өнөм? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 13
Ай менән әрепләшеү . . . . . . . . . . . . . . . . 15
Ныҡ әле ул, торһон әле! . . . . . . . . . . . . . 17
Ниңә һуңланың һин, кәкүк? . . . . . . . . . . . 19
Мәле етер . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 20
Етте, етте! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 20
Ҡаршылағыҙ, тауҙар! . . . . . . . . . . . . . . . . 21
Баһадирҙар кеүек ҡаялар . . . . . . . . . . . . 22
Күҙ йәштәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 22
Шуны уйлап, күңелемә... . . . . . . . . . . . . . 23
Бирешмәҫкә, эй, йәшәргә ине . . . . . . . . . 23
Тиҙерәк эшкә ҡушһаҡ икән . . . . . . . . . . . 27
Йығылғандар тороп баҫһын . . . . . . . . . . . 28
Кисереү юҡ! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 29
Йән әсетер хәлдәр барҙа... . . . . . . . . . . . . 29

Ҡайһығыҙҙан кәңәш һорайым да... . . . . . . . . . . 30
Тәҙрәләрҙе асып ҡуям әле... . . . . . . . . . . . . . 31
Бөгөн булһа уйлап... . . . . . . . . . . . . . . . . 32
Ҡайтығыҙ! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 33
Һинән ситтә бәхет эҙләйһем юҡ . . . . . . . . . . 36
Ымһындырып, әйҙәп юлдар ята . . . . . . . . . . . 37
Күрербеҙме? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 39
Әллә ғәрәсәт тыныр мәл?.. . . . . . . . . . . . . . 40
Уйлайһы ла беҙгә, һайлайһы... . . . . . . . . . . 40
Мине генә алмай йоҡо . . . . . . . . . . . . . . . . 41
Халҡым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 42
Өлгөргәндәр инеп ҡалһын . . . . . . . . . . . . . . 43
Иманлы булыу фарыз . . . . . . . . . . . . . . . . . 44
Ауған ҡайын сереп бөткәс кенә... . . . . . . . . . 45
Юҡ, ҡурҡытмай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 47
Күрмәмеш бул! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 48
Ысынлап та, кемдең кем икәне... . . . . . . . . . 49
Тынғы бирмәй бер уй . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
Һөйләшеүҙәрҙән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 51
Унан алда күрше күршеһенә... . . . . . . . . . . . 52
Уйлап һөйләр ирҙәр генә... . . . . . . . . . . . . . 53
Дауахананан сыҡҡас . . . . . . . . . . . . . . . . . 53
Һеҙ уларҙы, берүк, кәмһетмәгеҙ... . . . . . . . . . 54
Ауылыма . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 54
Мәңге онотмаҫ күңел . . . . . . . . . . . . . . . . . 56
Ил йәшәр, тел йәшәр, дан йәшәр... . . . . . . . . 57
Өҫтәл эргәһендә төн оҙатып... . . . . . . . . . . . 58
Белорет хәтирәләре . . . . . . . . . . . . . . . . . . 59
Ҡала тәртип ярата, тип... . . . . . . . . . . . . . . 60
Рухи шишмә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 61
Урал тыныс таң ҡаршылай икән... . . . . . . . . . 61
Ғүмерҙең дә йәйе, көҙө булһын... . . . . . . . . . 62
Мин әсендем уйлап үткәндәрҙе... . . . . . . . . . 63
Онотмаһын ине . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 63
Байназар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 64
Буяуҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 65
Тормош фәлсәфәһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 66
Тәүге ҡар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 66

Һәр Яңы йыл — ыуыҙ ғына сабый . . . . . . . . . . . 67
Бына тағы яҙҙар етте . . . . . . . . . . . . . . . . . . 67
Ҡайтырмын арыш бешкәндә... . . . . . . . . . . . 68
Сыҡтыҡ алыш майҙанына . . . . . . . . . . . . . . 69
Ҡуйма юл! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 70
Өсһыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 71
Шул көнгәсә бер шашаһы... . . . . . . . . . . . . . 78
Хәтерләүҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 78
Ҡайһылай ҙа оҡшаш, имеш... . . . . . . . . . . . 79
Таңдағы күҙ йәшең менән... . . . . . . . . . . . . 80
Аңламаның... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 80
Эй, ни яман, ни яман? . . . . . . . . . . . . . . . . . 81
Толҡа тапмай, юлды тағы... . . . . . . . . . . . . 81
Иҫкә төшһөн үткән көндәр... . . . . . . . . . . . 82
Ахыры, бешкән алманы... . . . . . . . . . . . . . . 83
Тик сисә алмабыҙ, ахыры... . . . . . . . . . . . . 83
Оҙата барһын гәлсәр сыңдары . . . . . . . . . . 84
Ҡотлайым мин . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85
Әммә юҡҡа... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85
Йәшәй икән әле имәндәрем . . . . . . . . . . . . 86
Туғайҙа . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 86
Тик күңелгә көн дә... . . . . . . . . . . . . . . . . . 87
Сағандар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 88
Инде кәбән һалабыҙ беҙ . . . . . . . . . . . . . . . 89
Мәүлиҙә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 90
Төнгө уйҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 91
Ай, шул әтәс ҡалай тертләтте . . . . . . . . . . 92
Бабай, тауҙар һинең һымаҡ . . . . . . . . . . . . 94
Ә һиндә? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 95
Елдәр еләҫ, елдәр еләҫ... . . . . . . . . . . . . . . 95
Ергә һин тыуған өсөн . . . . . . . . . . . . . . . . . 96
Әсә күҙҙәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
Яна икән һиндә, тик һиндә . . . . . . . . . . . . 98
Ғүмер юлым үтә тау битләп . . . . . . . . . . . . 98
Донъя иркен күренә . . . . . . . . . . . . . . . . . . 99
Ә таң шундай аяҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 99
Юлдар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 100
Һөйөү булып тамды . . . . . . . . . . . . . . . . . 104

Бир ҡулыңды, йәштәш! . . . . . . . . . . . . . . . . . . 104
Тауҙарыма киләм... . . . . . . . . . . . . . . . . . . 105
Күҙе була үрҙә, ҡояшта . . . . . . . . . . . . . . . 106
Үкенестәрем ҡалһын үҙемдә . . . . . . . . . . . . 106
Өфөм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 107
Ҡайтмайынса шунда мин үҙем . . . . . . . . . . 109
Хәҙер беҙ йылтлап уҙабыҙ . . . . . . . . . . . . . 110
Ҡыуыштарҙың хужалары ҡайтһын . . . . . . . . 111
Һары ялҡын ялмағанда . . . . . . . . . . . . . . . . 111
Кисерегеҙ! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 112
Аҙаҡ ҡолаҡҡа салынып... . . . . . . . . . . . . . . 112
Йәшәһен ошо гәҙәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 113
Ташҡа тамыр йәйгән сауҡалар . . . . . . . . . . 114
Тулап ҡуйҙы ҡапыл йөрәгем . . . . . . . . . . . 115
Була икән йылғаның да... . . . . . . . . . . . . . . 116
Сатирик миниатюралар . . . . . . . . . . . . . . . . 116
Таңдан торған кеше... . . . . . . . . . . . . . . . . . 118
Баҫыр әле саған ҡаршыбыҙға . . . . . . . . . . . 119
Ял туҙғытып килә ярһыу атым . . . . . . . . . . 120
Бөрйәнем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 121
Донъя менән һөйләшеү . . . . . . . . . . . . . . . . 122
Ҡыңғырау сыңы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 123
Ошо оло, изге исемдәргә . . . . . . . . . . . . . . 126
Түбәнлектән өҫтөн булайыҡ! . . . . . . . . . . . 127
Эйе, «тегеләр» беҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 128
Үтмәһәм шул һуҡмаҡтарҙы . . . . . . . . . . . . 129
Әйтер һүҙем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 130
Моңһоу саҡта йәнем . . . . . . . . . . . . . . . . . 134
Ғүмер йомғағымды тағатып... . . . . . . . . . . 135
Ауыл остарында зыяраттар... . . . . . . . . . . 135
Рәшит Ниғмәти ҡәбере янында . . . . . . . . . 136
Тиҫтерҙәрҙең арабыҙҙан... . . . . . . . . . . . . 137
Баҡһаң, ул да минең кеүек... . . . . . . . . . . 137
Үҙең һаман йөрөйһөңдөр төҫлө... . . . . . . . 138
Әйтеп ҡуйҙың... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 138
Көн йөҙөндә көлтә нур һүнде . . . . . . . . . . 139
Әҙәп барҙа — иман бар . . . . . . . . . . . . . . . 140
Айырылһам һинән... . . . . . . . . . . . . . . . . . 143

Кескәй ауыл оло илдең... . . . . . . . . . . . . . . . 144
«Онотмағы-ы-ыҙ!» . . . . . . . . . . . . . . . . . . 145
Ағиҙелдә боҙ киткәндә . . . . . . . . . . . . . . . . 146
Тик усаҡтар ғына . . . . . . . . . . . . . . . . . . 147
Була көндәр... . . . . . . . . . . . . . . . . . . 148
Иҫкәртәләр йылдар килеше лә... . . . . . . . . . . 149
Шыршыҡайым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 149
«Булды!» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 150
Төш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 151
Төнгө аҡланда . . . . . . . . . . . . . . . . . . 152
Иҫәнһеңдер, тимен... . . . . . . . . . . . . . . . 153
Инсебикә (Поэма-баллада) . . . . . . . . . . . . . 154
Ҡарағай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 163
Тимерлектә ут уйнатып... . . . . . . . . . . . . . 164
Тирҙем, тирәм әле . . . . . . . . . . . . . . . . 165
Алҡымға ниҙер тығылды . . . . . . . . . . . . . . 165
Шундай йәштәр күп хәҙер... . . . . . . . . . . . . 166
Аяп тормай, уйлап тормай . . . . . . . . . . . . . 167
«Бер төрлөләр» араһында... . . . . . . . . . . . . 168
Шулай һөйөү тыуған икән... . . . . . . . . . . . . 168
Их, белмәнең... . . . . . . . . . . . . . . . . . 169
Әйтсе, һылыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 170
Ни ғәжәбе... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 170
Юлым Нөгөш буйлап, барам уйлап . . . . . . . . . 171
Шиғырҙарым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 173
Күңелдәрҙе сафлап китер өсөн... . . . . . . . . . . 174
Эшләр эштәр, ай-һай, ҡалғандыр . . . . . . . . . . 175
Ҡараштарым һеҙҙе иркәләй ҙә . . . . . . . . . . . . 175
Яҙҙарҙы мин күтәп алам... . . . . . . . . . . . . . 176
Һинең ише . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 177
«Юҡҡа-барға көйәләнмә...» . . . . . . . . . . . . . 178
Тауҙарымды урап ҡайтам әле . . . . . . . . . . . . 179
Тик мин генә онота алмай... . . . . . . . . . . . . 180
...Донъя ҡалай шаярта . . . . . . . . . . . . . . . 181
Бабсаҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 182
Егет күңеле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 182
Хәтерендәме? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 184
Тиҫтерҙәрҙән, берүк, айырма! . . . . . . . . . . . . 184

Мин — уларға, ә дуҫтарым — миңә . . . . . . . . . . 185
Күңелем тула минең яҙҙарҙа . . . . . . . . . . . . 186
Һағындым шулай . . . . . . . . . . . . . . . . . . 187
Мәсетле дәфтәренән . . . . . . . . . . . . . . . . 187
Мәрйен теҙәм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 189
Ышанығыҙ беҙгә, ветерандар! . . . . . . . . . . . 190
Ә һин беләһеңме? . . . . . . . . . . . . . . . . . 191
Юлдаштарҙан уңам . . . . . . . . . . . . . . . . . 193
Һин бит миңә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 194
Ғәйеп итмә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 195
Серҙәрем — йылдар сатҡыһы . . . . . . . . . . . . 195
Ғүмер . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 196
Үҙемдең һәр хатаға... . . . . . . . . . . . . . . 197
Ярай әле баҙлар өмөт бар . . . . . . . . . . . . . 197
Моңһоу шиғыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 198
Бар мираҫым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 199

*Иҫтәлектәр, бағышлауҙар*

Күңелем үҫте... *Мостай Кәрим* . . . . . . . . . . . 201
Шағир урамы. *Ҡәҙим Аралбай* . . . . . . . . . . . 202
Шағир хаҡында «ипле» һүҙ.
*Зәйтүнә Шәрипова* . . . . . . . . . . . . . . . . 208
Һағындыра, юҡһындыра... *Сабир Шәрипов* . . . 215
Ул тауҙарҙан баҡты донъяға! *Зөфәр Вәлит* . . . 216
Уйҙарын ҡаты мендәр итеп...
*Зөфәр Толомғужин* . . . . . . . . . . . . . . . . 223
Һуңғы осрашыу. *Сәрүәр Ғәләүетдинов* . . . . . . 224
Тәбиғәтсә ғәҙел талаптар ҡуя
белде... *Булат Тимерғәлиев* . . . . . . . . . . . 226
Сәсән һүҙе мәңге серемәҫ.
*Әхмәт Сөләймәнов* . . . . . . . . . . . . . . . . 227
Китте . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 229
Һүҙҙәрен тыны менән иретеп... *Зөфәр Вәлит* . . 230
Остазым Самат ағай Ғәбиҙуллинға.
*Айһылыу Ғарифуллина* . . . . . . . . . . . . . . 231
Самат Ғәбиҙуллин иҫтәлегенә.
*Рауил Ишбаев* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 233

*Литературно художественное издание*

**ГАБИДУЛЛИН Самат Магадеевич**

**ЗАРЕВО**

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Гөлназ Фазлиәхмәтова*
Биҙәлеш мөхәррире, рәссамы *Фазлетдин Ислахов*
Техник мөхәррире *Зәйтүнә Сыңғыҙова*
Корректорҙары *Гөлсирә Таһирова, Ләйсән Саниева, Зәлифә Вәлеева*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 08.07.09. Форматы 70x90$^1/_{32}$. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 8,78. Шартлы буяу отт. 9,07. Иҫәп-баҫма таб. 8,84. Тиражы 2000 дана. Заказ 1.0090.09.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан “Китап” нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының “Өфө полиграфкомбинаты” дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.